“Мәләүез үҙәкләштерелгән китапханалар системаһы”
Арыҫлан китапханаһы

# Аҡ күңелле Арыҫлан егете



**Динис Бүләковтың
ижад һәм тормош юлына
арналған дайджест**

Смаҡ 2019



## Төҙөүсеһе:  Зәлиә Байгилдина

**Аҡ күңелле Арыҫлан егете [Текст] : дайджест: 12+ / төҙөүсеһе З. Ә. Байгилдина.  –**
**Смаҡ : Арыҫлан китапханаһы,  2019. – Б. 90.**

# Хөрмәтле уҡыусым!

Яҡташ яҙыусыбыҙ Динис Мөҙәрис улы Бүләковҡа 2019 йылда 75 йәш тулыр ине. Юбилейы айҡанлы ошо дайджест төҙөлдө.

Динис Мөҙәрис улы тураһында 1994 – 2019 йылдарҙа гәзит – журналдар биттәрендә яҙылған мәғлүмәттәр менән таныша алаһығыҙ. Дайджестта уның ижады тураһында, яҙыусының ҡыҙҙары менән булған әңгәмәләрен уҡырға була.

Яҙыусы тураһында мәғлүмәттәр башҡорт һәм урыҫ телендә яҙылды. Был дайджест яңы мәғлүмәттәр менән тулыландырып торасаҡ.

Дайджест менән тыуған әҙәбиәт уҡытыусылары, мәктәп уҡыусылары, уның яҡташтары ҡулана ала.



*Ил кешеһе илгә ярай*

*Күҙ тейерлек ошо егетлектәр*
*Килә ине һинең ҡаныңдан.*
*Әллә ниндәй бер ғорурлыҡ булды*
*Баҫып ҡына тороу янында.*

*Арыҫланда тын арыҫлан һин,*
*Ҡаты торҙоң донъя һағында.*
*Аяғүрә тороп алыштың гел,*
*Баҫтың һәр саҡ хаҡлыҡ яғында.*

*Һинең менән мин дә бәхәсләштем,*
*Беҙ бит йәшәмәнек маҡташып.*
*Тура һүҙле, асыҡ йөҙлө булдың,*
*Кинйә Арыҫланов яҡташы.*

*Йә Салауат майҙанында йыш-йыш*
*Һүҙ һөйләнең меңдәр алдында.*
*Халыҡ хәтерендә бер әйҙәүсе*
*Һин Салауат һымаҡ ҡалдың да.*

*Ирек Кийәбулатов*

**Бүләков, Д. Киләсәк хәтерҙә тамырлана [Текст] / Д. Бүләков ;**
**Т. Ғәниева һөйләште**
**// Ағиҙел. – 1994. - № 3. – Б. 3 – 7.**

***- Динис Мөҙәрисович, байрам ҡотло булһын! Ғәҙәттә юбилейҙар осоронда үтелгән юл байҡала. Беҙ ҙә 60 йәшлек Башҡортостан Яҙыусылар ойошмаһы тарихына экскурс яһайыҡ әле.***

—Үкенескә ҡаршы, Башҡортостан Яҙыусылар ойошмаһының тарихы ентекле өйрәнелмәгән. Уның менән ниндәйҙер дәрәжәлә профессор Зиннур Нурғәлин шөғөлләнде. Ләкин был ғына аҙ, ә байтаҡ нәмәләр асыҡланыуһыҙ ҡала килә.

Беҙҙә, мәҫәлән, оҙаҡ йылдар ошондай фекер йәшәне: йәнәһе, башҡорт әҙәбиәте Октябрь революцияһынан һуң ғына барлыҡҡа килгән, ә уғаса башҡорт ижад та итмәгән, әҙәбиәттең ни икәнен дә белмәгән. Бәхеткә ҡаршы, бындай хилафлыҡтарҙы төҙәтеү эше башланды. 5 томы донъя күргән «Башҡорт әҙәбиәте тарихы»нда халҡыбыҙҙың революцияға тиклемге осорҙа ижад иткән бик күп әҙиптәре хаҡында һүҙ бара. Әле XII быуатта уҡ ижад ителгән «Ҡиссаи Йософ» әҫәренең авторы Ҡол Ғәлиҙең Әйле ырыуы башҡорто булыуы билдәле. «Ҡиссаи Йософ» ҡулдан ҡулға быуындан-быуынға күсә килеп, башҡорттарҙың да, татарҙарҙың да популяр поэтик хазинаһына әйләнә, урта быуаттар яҙма әҙәбиәтебеҙҙең алтын фондында урын ала.



***Баязит Бикбай Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты .***

Яҡыныраҡ тарихҡа күҙ һалһаң, XVIII—XIX быуаттарҙағы Ерәнсә, Ҡобағош, Ҡарас, Байыҡ сәсәндәр ижады, башҡорт ижтимағи фекер, фән һәм әҙәбиәт үҫешенә ҙур йоғонто яһаған Батырша, Салауат Юлаев, Мәүлә Ҡолай, Тажетдин Ялсығол, Әл-Башҡорди, Буранбай Йәркәй сәсән, Ишмөхәммәт Сәсән, Ғәбдерәхим Усман, Әбделмәник Ҡарғалы, Һибәтулла Сәлихов, Шәмсетдин Зәки, Мирсалих Биксурин, Ғәли Соҡорой, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев, Риза Фәхретдинов, Зәйнулла Рәсүлов, Ғәбит Арғынбаев, Ғәрифулла Кейеков һәм башҡалар ижады үҙәк урынды биләй.

XX быуат башы башҡорт әҙәби һәм ижтимағи фекер үҫешендә өр-яңы дәүер булараҡ характерлы. Был тарихи осорҙа ижад майҙанына алдағы осорҙоң Мәғрифәтселек мәктәбен үткән Мәжит Ғафури, Афзал Таһиров, Закир һаҙый, Сафуан Яҡшығолов, Төхфәт Йәнәби, Ямалетдин Юмаевтар килә. Шәйхзада Бабич генийы башҡорт рухының Аҡмулланан һуң йәнә бер илаһи күренеше булараҡ балҡый.

***— Тимәк, революция шауҡымы менән 1934 йылдың мартында барлыҡҡа килгән Башҡортостан Яҙыусылар ойошмаһы уңдырышлы тупраҡҡа тамырлана, тимәксеһегеҙ инде...***

— Һис һүҙһеҙ. Ә тәүге ойошма БАПП (Башкирская ассоциация пролетарских писателей) тип атала. Унан алда Башҡортостанда (1923 йыл) «Башҡортостан шағирҙарының берлеге» тигән ойошма төҙөлөп, уның программаһы һәм уставы ҡабул ителә. Был эҙләнеү осоро. Әммә был ойошмаларҙың әҙәбиәтебеҙгә, уның тарихына кире йоғонтоһо ла ярайһы ҙур.



***Хәким Ғиләжев РСФСР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты .***

Бая әйткәнемсә, башҡорт әҙәбиәте тик революциянан һуң ғына формалашҡан тигән фекер нәҡ ошо осорҙа ныҒына. Быға са бөтә төрки донъя менән киң бәйләнештә булған башҡорт мәҙәниәтендә лә әҙәбиәтендә лә милли үҙенсәлектәр өҫтөнлөк итә. Дөйөм төрки мәҙәниәте тарихында бөтә төр төрки халыҡтар тыуҙырған, шуға уртаҡ мираҫ тип һаналған ҡомартҡылар бар. Асылда партия етәкселегендә һәм уның контроллеге аҫтында ойошторолған тәүге ойошмаларҙы телгә алынған ҡомартҡыларҙан баш тартырға мәжбүр итәләр. Был, әлбиттә, халҡыбыҙҙың фажиғәһе. Безгә һуңынан күренекле шәхестәребеҙҙең исемен яңынан халыҡҡа ҡайтарыу өҫтөндә ныҡлы эшләргә, хатта көрәшергә тура килде. Ярай әле, хәҡиҡәт юлынан тайпылмай барған Мөхәммәтша Буранғолов кеүек кешеләребеҙ булған. Нәҡ Буранғолов ныҡышмалылығы арҡаһында башҡорттоң ҡиммәтле әҙәби ҡомартҡылары халыҡ күңелендә һаҡланғанса ҡағыҙға төшөрөлгән. һуңғы йылдарҙа Татарстан матбуғатында донъя күргән «Ҡиссаи Йософ», «Иҙеүкәй менән Мораҙым», «Сура батыр» дастандары башҡорт һүҙҙәренең татарса аңлатмаһы менән донъя күрә: аяҡтары ҡайпандай — ебек кеүек, тип аңлатыла, был сифат түгел, ҡылым;

баллы буҙа — хәмер, иҫерткес; күрәүкә — ҡымыҙ һауыты; ҡонан — ҡырағай ат(?); һаҡлау — хан йә иһә түрәләрҙе, һаҡлау өсөн билдәләнгән ғәскәр; ҡорот — әсегән һөт ризығы һ.б., ә башҡортҡа телгә алынған әҫәрҙәрҙәге һәр һүҙ аңлашыла, сөнки улар әлеге халыҡ һәм әҙәби телендәге киң ҡулланышлы һүҙҙәр. Бына ошо байлығыбыҙҙан баш тартырға мәжбүр ителеүебеҙ ысын мәғәнәһендәге фажиғә бит инде.



***Назар Нәжми Башҡортостандың халыҡ шағиры, М.Горький исемендәге РСФСР дәүләт премияһы, Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреты.***

Был юғалтыуҙар осороноң йәнә бер яман яғы шунда, рухи ҡиблаһы көнсығыш мәҙәниәтенә ҡараған башҡорт әҙәбиәте урыҫ идеологияһы һуҡмағына төшөрөлә. Был ят ҡиммәттәргә, башҡортҡа таныш булмаған рухи донъяға һуҡырҙарса эйәреү, тамыры ҡырҡылған үҫентене япраҡ ярҙырырға, сәскә аттырырға маташыу менән бер.

1934 йылдың 4 мартында Башҡортостан яҙыусыларының беренсе съезы уҙғарыла, унда А. Фадеев ҡатнаша. Ул саҡтағы Баш ЦИК председателе Афзал Таһиров яңы ойошторолған яҙыусылар берлегенең тәүге рәйесе итеп һайлана.

Әммә милли мираҫтан мәхрүм ителгән башҡорт әҙәбиәте бынан һуң да тамырланып китә алмай әле. Совет осоро әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы бер төркөм оло быуын яҙыусыларҙың ижадына яла яғыу, уларҙың шәхесен шик аҫтына ҡуйыу эшмәкәрлеге башлана. Башҡорт әҙәбиәте тирәһендә барған шау-шыу һуңғы сиктә 1937 йылдың 26 авгусында партия өлкә комитетының Ғ. Амантайҙың «милли әҙәбиәтте билдәләү принциптары» тигән хеҙмәте буйынса ҡарар ҡабул итеү менән тамамлана. Ошо көндән алып, башҡорт халҡының Октябргә ҡәҙәр яҙма әҙәбиәтте булмаған, тигән ҡараш рәсми төҫ ала. Башҡортостан яҙыусыларының I съезында һайланған Яҙыусылар берлеге идараһы йәшәүҙән туҡтай, уның урынына Ойоштороу комитеты төҙөлә. Йософ Гәрәй был ҡыйралышҡа «ҙур көс» һала.

Дауыт Юлтый, Төхфәт Йәнәби, Ғабдулла Амантай, Ғөбәй Дәүләтшин, Һәҙиә Дәүләтшина, Афзал Таһировтар ҡайһы бер ошаҡсылар тырышлығы менән ҡорбан ителә.

Хәүефһеҙлек министерствоһы архивында һуңғы йылдарҙа байтаҡ

тыйылған материалдар менән танышыу мөмкинлеге асылды. Һөҙөмтәлә Мөхәммәтша Буранғолов, Муса Мортазин, Зәки Вәлиди кеүек шәхестәрҙең биографияһы һәм эшмәкәрлеге халыҡҡа еткерелде.

Быйыл беҙ террор һәм ошаҡ ҡорбаны булғандарҙың ҡайҙа ерләнеүен асыҡлай алдыҡ. Өфө төрмәһендә атылып, улар Тимашевка тирәһендә ерләнгән. Зыярат урыны бар. Ошо урынға һәйкәл ҡуйырға ниәтләйбеҙ. Иң ҡыҙығы, мәйеттәрҙе зыяратҡа ат менән ташыған күсерҙең иҫән булыуы асыҡланды.

***- Башҡортостан яҙыусылар берлегенең аяҡҡа баҫып китеү осоро ҡайһы ваҡыттарға тура килә?***

- Ойошма үҙе төрлө ваҡытта төрлө исемдәр менән йөрөтөлгән. Яҙыусыларға ышанмаусылыҡ киң таралған бер дәүерҙә (ә уларҙан халыҡты йәшәп килгән власҡа ҡаршы ҡоторторҙар, тип шикләнәләр) ойошмаға ВКП(б)ның Киров район комитеты секретары Митин етәкселек итә.

Яҙыусылар берлегенең ҙур дәрәжәгә өлгәшкән ойошма булып китеүен мин Мостай Кәрим исеме менән бәйләр инем. Мин, әлбиттә, һуғыш осоронда берлеккә етәкселек иткән Б. Бикбайҙы ла ыңғай яҡтан ғына телгә алыр инем. Әммә Башҡортостан яҙыусыларының ныҡлы аяҡҡа баҫып, киң ҡолас менән эшләп китеүе башлыса һуғыштан һуңғы йылдарға тура килә. Мостай Кәрим берлеккә 1951 йылдан 1962 йылға тиклем етәкселек итә. 1962—1969 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Назар Нәжми, 1968— 1972 йылдарҙа — Хәким Ғиләжев, унан һуң 19 йыл — Әсғәт Мирзаһитов.



***Әсғәт Мирзаһитов Салауат Юлаев исемендәге дәүләт, республика комсомолының Ғәлимов Сәләм исемендәге премиялар лауреаты.***

***- 1988 йылдан бөгөнгө көнгәсә һеҙ...***

-Эйе... Нәҡ атап әйтелгән Б. Бикбай — Ә. Мирзаһитов осоро башҡорт яҙыусылар берлегенең нығыныу осоро, тип мин ҡабатлап әйтәм. Сөнки ошо йылдарҙа китап сығарыу эше яйға һалынған. Хәким Ғиләжевтың тырышлығы менән «Ағиҙел» журналының күләме ҙурайтылып, даими сыға торған әҙәби-сәйәси журнал дәрәжәһен алған. Ошо осорҙа башҡорт әҙәбиәте Бөтә Союз аренаһына сыға, рус һәм бүтән милләт телдәренә тәржемә ителеп сығарылған әҫәрҙәр барлыҡҡа килә. Туғандашлыҡ, дуҫлыҡ бәйләнештәре нығый.

Яҙыусыларҙың халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртып, власть башында

тороусыларҙың хилаф эштәренә ҡаршылыҡ ойоштороуынан партия органдары, әлбиттә, юҡҡа ғына ҡурҡмай һәм ошоларҙы иҫкәртеү йәһәтенән ойошторолған саралар нисек кенә һиҙгер булмаһын, башҡорт әҙәбиәтенә эленән-әле халыҡ мәнфәғәтен яҡлаусылар килеп торҙо. Башҡорт халҡының һәм әҙәбиәтебеҙҙең ғорурлығы булған Рәми Ғарипов, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев кеүектәр ана шундайҙарҙан. Улар замандың «үҙ йырсылары» булыуҙан бигерәк, халыҡтың үҙ йырсылары булып танылды, халыҡтың бәҫен, уның рухи ҡиммәттәрен, тарихын дөрөҫ баһаларға саҡырҙы, кеше күҙенән төпкәрәк йәшерелгән хәҡиҡәткә хеҙмәт итте.

***— Яҙыусының төп тәғәйенләнеше үҙен тыуҙырған халыҡ алдында яуаплылыҡты онотмау, уның рухи ихтыяждарына хеҙмәт итеү, тип әйтмәксе булаһығыҙмы?***

— Тап шулай. Башҡортостан республикаһында милли үҙаң уянған һәм ил-төйәктең мөстәҡиллеге өсөн барған көрәштә лә яҙыусылар ана шул тәғәйенләнешкә тоғро, тиер инем мин. Гәзит, бигерәк тә «Йәшлек» гәзите биттәрендә яҙыусыларҙы битарафлыҡта ғәйепләгән мәҡәләләр күренеп ҡала. Әммә шул уҡ Мөхәмәтша Буранғолов, Муса Мортазин, Зәки Вәлиди исемдәрен реабилитациялауҙы ойоштороусылар яҙыусылар түгел инеме лә, тоталитар власть тарафынан халыҡ яҙмышында ҡылынған фажиғәләрҙе асып биреүселәр яҙыусылар булманымы? Республикабыҙҙың суверенлығы өсөн көрәштең башында тороусы ғалимдарыбыҙ менән бер рәттән Рәшит Шәкүр, Ғәзим Шафиҡов, Таңһылыу Ҡарамышева, Тамара Ғәниева, Булат Рафиҡов, Тайфур Сәғитов, Борис Павлов, Александр Филиппов, Факиһа Туғыҙбаева, Рауил Ниғмәтуллин, Рамазан Өмөтбаев һәм башҡа бик күптәрҙең исемен телгә алмаһаҡ хилаф булыр ине. Яҙыусының көрәш майҙанындағы урыны митингтарҙағы сығыштар менән генә баһаланмай бит (ә телгә алынғандар ундай сараларҙан да баш тартманы), яҙыусынан һүҙ көтә халыҡ. Публицистик мәҡәләләр, йүнәлешле ижади эшмәкәрлек — былар беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙә, аллаға шөкөр, бар.

Республиканың тәүге Президентын һайлау кампанияһы осоронда Мостай Кәрим, Әнисә Таһирова, Ҡәҙим Аралбаев, Ирек Кинйәбулатов, Булат Рафиҡов, Рамазан Өмөтбаев, Ноғман Мусин, Мәүлет Ямалетдиновтар урындарға барып һайлаусылар менән осрашты һәм фекерҙәрен халыҡҡа еткерҙе.

***— Беҙ инде, Динис Мөҙәрисович, юбилярҙың эшмәкәрлегенә, уның үҫеш тарихына ҡыҫҡаса байҡау яһаныҡ шикелле. Әммә һуңғы осор яҙыусыларҙы яңы ҙур һынауҙарға, матди мәхрүмлеккә дусар итте. Боларыш, түңкәрелештәр таяғының ауыр осо уларға ла төштө, тиеүем. Һеҙ, Башҡортостан Яҙыусылары идараһының икенсе тапҡыр һайланған***

***рәйесе, донъяға оптимистик күҙ менән ҡарайһығыҙмы?***

— Тирә-яҡта, Рәсәйҙең үҙендә таран лып, тарҡалып бөткән яҙыусылар берлеге фонында Башҡортостан яҙыусылары араһындағы берҙәмлек һәм низағтарға бирелмәй, ваҡлыҡтарҙан өҫтөн була белеүе оптимист булырға ҡуша миңә. Әҙиптәр ысын ижадҡа тотондо. Прозала, поэзияла булһынмы, матур әҫәрҙәр тыуып тора. Драматургия яңырыу кисерә. Рәшит Солтангәрәев, Булат Рафиҡов, Раил Байбулатовтар драматургияла ҡәләм һынай, әҫәрҙәре сәхнәлә ҡуйылды. Хатта мин үҙем дә|пьеса яҙып ташланым. Ә инде Наил Ғәйетбаев менән Флорид Бүләковтар ҙың исеме был өлкәлә ныҡлап нығынды. Ҡолдәүләттең пьесалары театр эшмәкәрҙәрен ҡыҙыҡһындыра.



***Динис БҮЛӘКОВ Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре һәм Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Ғәлимов Сәләм , Фәтих Кәрим исемендәге премиялар лауреаты.***

Шиғриәттә күҙгә күренерлек ижад емештәре бар. Һинең «Ҡыпсаҡтар» поэмаңды, шиғыр шәлкемдәреңде мин ҡыуанып уҡыным. Ирек Кинйәбулатов, Таңһылыу Ҡарамышева, Ҡәҙим Аралбаев, Сафуан Әлибаев, Рәмил Йәнбәк һәм башҡаларҙың шиғриәттәге ҡаҙаныштарын телгә алырға мөмкин булыр ине.

Иң ҡыйыны торлаҡ мәсьәләһе. Быйылғы йылдан ижади берләшмәләр өсөн йорттар төҙөү ҡарала. Министрҙар Советы рәйесе урынбаҫары Усманов етәкселегендә проекттар төҙөлдө. Яҙыусылар берлеге бюджет ойошмалары менән тиңләштерелде. Уҙған йылда 3-4 кеше йәшәү шарттарын яҡшыртты. Яңыраҡ Рәмил Ҡолдәүләткә фатир бирҙек. Матбуғат министерствоһы журналистарға фатирҙар бирә, ә беҙҙең яҙыусыларҙың күбеһе журналистикала хеҙмәт итә. Фронтовик яҙыусыларҙың матди хәлен яҡшыртыуға өлгәштек. Маҡтаулы исемдәр өсөн түләү мәсьәләһен хәл итергә торабыҙ. Сөнки артистар, уҡытыусылар, врачтар атҡаҙанған эшмәкәр исемен алһа, уларҙың эш хаҡы арта ине. Был яҙыусыларға ғына бер ҡасан да ҡағылманы.

Йәнә шуны ла белдәләр инем. Һуңғы ваҡытта «Китап» нәшриәтенең эше йәнләнде. Балалар өсөн китап сығарыу беҙҙә ауыр бер хәл ине. Уҙған йылда ғына ла төҫлө буяуҙар менән биҙәкләнгән һәм балаларға тәғәйенләнгән төрлө жанрҙағы китаптар донъя күрҙе. Ринат Хәйри, Финат Шакирйәнов,

Гөлнур Яҡупова, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Тамара Ғәниеваларҙың китаптарын атап әйтер инем. Ә Мәскәү нәшриәттәре быңдай китаптарҙы сығара алмай. Беҙҙең нәшриәт хөкүмәтебеҙҙең даими хәстәрлеген күреп тора.

Республикабыҙ ошондай үҙ аллылығын һаҡлай алһа төрлө янауҙарға бирешмәһәк, етәкселек әҙәбиәт һәм сәнғәттең баһаһын әлегесә аңлаһа, иншалла, көрсөктән сығып та китербеҙ. Ә әҙәбиәтһеҙ, мәҙәниәтһеҙ дәүләт тә, халыҡ та булмай, һәр хәлдә халыҡтың, дәүләттең бөйөклөгөн ижадсылар тәьмин итә.

**Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Динис Бүләков менән Тамара Ғәниева һөйләште**.

**Бикбаев, Р. Илленсе артылышта [Текст] : Динис Бүләковҡа 50 йәш / Р. Бикбаев**

**// Ағиҙел. – 1994. – № 5. – Б. 114-118.**



Бынан ун-ун биш йылдар элегерәк Динис Бүләков йәйге ялын Урал тәбиғәтендә үткәрергә, йыл һайын кәмәлә Ағиҙел буйлап ағып төшөргә ярата торғайны. Хәҙер ҙә яраталыр, форсат ҡына етмәйҙер. Заманы ла башҡасараҡ шул бөгөн.

Нисәмә көндәр буйына тау-урмандарҙың,өҫкә ауырҙай булып торған текә ҡаяларҙың матурлығына хайран ҡалып ағып барыуҙар,зәм-зәм һыуындай саф шишмәләрҙә һыуһыныңды ҡандырыуҙар, әллә ниндәй тәрәнлектә лә төбөндәге таштары йым-йым килеп күренгән Ағиҙелдә ҡолас ташлап йөҙөүҙәр тормош мәшәҡәттәрен иңдәрҙән һыпырып ташлағандай, тыуған еренән көс алып, кеше донъяға яңынан тыуған кеүек була бит ул. Ләкин, ҡаяларға һуғылып, шаршыларҙа ҡайнап аҡҡан Ағиҙел буйлап ағып төшөр өсөн уяулыҡ та, сослоҡ та, етеҙлек тә кәрәк. Ағиҙелдең ярһыу ағымы ҡыйыуҙарға, таһыллы кешеләргә генә баш бирә, иҫ киткес матурлыҡтарға һоҡланып та, шарламаларҙа баҙап та ҡалғандарҙы, ебеп тә төшкәндәрҙе кәмәһе, һалы менән ҡая ташҡа ҡыйрата

килтереп һуға. Хас та тормоштоң үҙендәге һымаҡ, кешедәрҙең яҙмыштарындағы ҡатмарлы юлдар һымаҡ.

Ижад донъяһында үҙ асыштарына ирешер өсөн, уҡыусыларға үҙ һүҙен әйтер өсөн Динис Бүләков тормоштоң етеҙ һәм аяуһыҙ ағышында һәр саҡ үҙәктә булырға тырышты, киҫкен боролоштарында уяулығын юғалтманы, заман үҙгәрештәрен һиҙгер тоя һәм әҫәрҙәрендә шуның үҙенсәлекле һыҙаттарын күрһәтә алды.

Яҙыусының 1992 йылда «Ағиҙел» журналында баҫылып сыҡҡан һәм 1993 йылда Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡ булған «Ғүмер бер генә» романының исеме аҫтына йәйәләр эсендә «Заман тормошоноң күренештәре» тип ҡуйылған. Бына ошо һүҙҙәр Динис Бүләков прозаһының төп асылын йыйнаҡ итеп әйтеп биргән кеүек. Заман тормошоноң күренештәре — яҙыусының һәр әҫәренә ҡарата шулай тиергә мөмкин. Әлбиттә, был күренештәр бер әҫәрҙә бик сағыу асылырға, икенсеһендә үтә тоноҡ төҫмөрләнергә лә мөмкин. Ләкин Динис Бүләковтың хикәйәләрен, повестарын, романдарын, ғөмүмән, барлыҡ ижадын, фекерләү үҙенсәлеген, яҙыусы булараҡ тормош менән бәйләнешен заман тематикаһынан тыш, әлеге көн рухынан башҡа күҙ алдына килтереүе ҡыйын.

Һәр әҙиптең уҙ донъяһы, үҙ зауығы һәм үҙ табыныуҙары. Күпселек яҙыусылар, ғәҙәттә, үҙе йәшәгән дәүерҙең хафалары һәм борсолоуҙары тураһында яҙа, икенселәре үҙ заманы хаҡында ла, уҙғандарҙы байҡап та ҡыҙыҡлы әҫәрҙәр ижад итә, өсөнсөләре (улары күпкә һирәгерәк) бары тарихи жанрҙа ғына эшләй, һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтенен иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе — беҙҙә ысын мәғәнәһендә тарихи прозанын барлыҡҡа килеүе. Был шатлыҡлы күренеш халҡыбыҙҙа милли үҙаңдын үҫеүен раҫлай, яңы быуындарҙың рухи нығыныуына, милəттә үҙ мираҫына, тарихтағы үҙ урынына дөрөҫ ҡараш тәрбиәләүгә көслө йоғонто яһай. Быуаттар төпкөлөндәге ваҡиғаларҙы йәнле образдар аша яңынан терелтеү өсөн яҙыусыға илһамдан, художник һиҙемләүенән тыш үткер тарихсы ҡарашы, илһам өҫтөнә әллә күпме документтарҙа соҡсонорлоҡ, шуларҙан тейешле һығымталар яһарлыҡ тарихсы аҡылы, йылдарға һуҙылған хеҙмәт һәм сабырлыҡ та кәрәк.

Ләкин һәр жанрҙың, һәр теманың үҙ ҡатмарлылыҡтары һәм ауырлыҡтары бар. Халыҡтар тарихы үҙенең бик күп тармаҡтары менән бөгөнгөгә килеп тоташһа ла, беҙҙең тамырҙарыбыҙҙы билдәләһә лә, барыбер үҙенсә тамамланған, туҡтаған процесс. Әлбиттә, ундағы ваҡиғалар үҫешендәге эҙмә-эҙлелекте, сәбәптәрҙе һәм һөҙөмтәләрҙе, билдәһеҙ шәхестәрҙе һәм факттарҙы асыҡлау, шул осор кешеләренең психологияһына, үҙ-ара мөнәсәбәттәрендәге нескәлектәргә, рухи һәм материаль донъяһындағы үҙенсәлектәргә үтеп инеүе

ғәйәт ауыр хәл.

Үҙ замана хаҡында һүҙ әйтергә теләүсе әҙип алдында шулай уҡ ауырлыҡтар етерлек, сөнки уның алдындағы ваҡиғалар тамамланмаған, барыһы ҡайнай, бәрелешә, өр-яңы тенденциялар тыуып тора. Тарихты байҡаусыны тын диңгеҙ ҡултығына ҡат-ҡат сумып, гәрәбәләр эҙләүселәр менән сағыштырып булһа, хәҙерге заман тураһында яҙыусы үҙе ғүмерҙә лә күрмәгән ташҡын йылғала алда ниндәй боролоштар, нилдәй ҡаялар көтөрөн дә белмәйенсә һал менән төшөп килеүсе булып күҙ алдына баҫа. Ташҡындың тынғанын, йылғаның ярыр юлдарын ярып үткәнен көткәндә, моғайын, барыһы ла асығыраҡ күренер ине, баһалар, күҙәтеүҙәр, һығымталар ҙа тулыраҡ һәм дөрөҫөрәк булыр ине. Юҡҡамы ни ижад эшендә, бигерәк тә прозала ваҡыт дистанцияһы талабы, йәғни ваҡиғалар ваҡыт арауығында һыуынғас, барыһы ла үҙ урынына ултырғас ҡына, улар хаҡында һүҙ әйтергә мөмкин тигән ҡараш йәшәй.

Был фекерҙә лә үҙенсә дөрөҫлөк барҙыр. Ләкин Динис Бүләков ваҡыт дистанцияһы тураһында уйлап, ваҡиғаларҙың һыуынғанын көтөп ултыра торған яҙыусыларҙан түгел. Ул тормоштоң эҫе эҙҙәренән, шаулы юлдарынан атларға ярата. Быны иң асыҡ миҫалдарының береһе — яҙыусының һуңғы романы.

Хәҙер инде тарҡатылған оло илдең төрлө милли әҙәбиәттәре элек бер-береһенең уңыштарын күрә һәм баһалай белә торғайны, һуңғы ваҡыттарҙа былдай дуҫлыҡ бәйләнештәре тураһында ауыҙ асып һүҙ әйтеүе лә гөнаһҡа иҫәпләнә башланы. Әгәр былдай ижади бәйләнештәребеҙҙе юғалтһаҡ, беҙ бик ныҡ фәҡирләнәсәкбеҙ, үҙебеҙҙең киләсәгебеҙҙе үҙебеҙ сикләйәсәкбеҙ. Шуға ла Динис Бүләковтың «Ғүмер бер генә» романы тураһында һүҙ йөрөткәндә, бәғзеләрҙең ҡарашынса бик үк заманса булмаһа ла, башҡа әҙәбиәттәрҙең дә бөгөнгө тәжрибәһенә, әлеге хәлдәренә ҡараш ташламаҡсымын.

Динис Бүләковтың романы беҙҙең күҙ алдында булған, элекке СССР күләмендә шаулаған ваҡиғаларҙың тулҡындары әле тынмаған, шаңдауы әле ҡолаҡтарыбыҙҙа яңғырап торған сағында уҡ ҡағыҙға теркәп ҡалдырған, түбәндән юғарыға тиклемге власть баҫҡыстарында ҡоролған сәйәси уйындарға ҡарата күптәрҙең күҙен асырға ярҙам иткән ҡыйыу әҫәр булды. Халыҡ депутаттары һайлау ваҡытындағы төрлө оятһыҙ интригалар, машиналар, торбалар, асфальт юлдар, һәр йортҡа телефон үткәреүҙәр вәғәҙә итеп, сәйҙәр-мәйҙәр таратып һайлаусыларҙы төрлөсә алдап, парламенттарға үтеүсе йылғыр бәндәләр элекке оло дәүләттең һәр тарафында аҙ булманы бит. Ә бына шул хаҡта тыуған роман тағы ла ниндәй әҙәбиәттә бар икән? Мин бер темаға мотлаҡ әллә нисә әҫәр яҙылырға тейеш тигән талап ҡуймайым. Ләкин бында бит һүҙ тема тураһында ғына түгел, милләттең

киләсәгенә, халыҡ яҙмышына мөнәсәбәт, шуларға тоғро шәхестәр хаҡында һәм кешеләрҙең өмөт-ышаныстары менән үҙҙәренең тар, түбән мәнфәғәттәре өсөн һатыу итеүсе бәндәләр хаҡында бара. Аҙаҡ килеп, иң мөһиме — милләттең үҙ-үҙенә мөнәсәбәе, рухи талаптары, үҙ бәҫен үҙе баһалай белеүе йәки белмәүе тураһында бара. «Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, дөрөҫ һүҙең инде һуңлаһа?»— тигәйне Рәми Ғарипов. Динис Бүләковтың «Ғүмер бер генә» романындағы дөрөҫ һүҙҙәрҙең ваҡытында әйтелеүе айырыуса мөһим.

Һикһән етенсе йылдарҙа Рыбаков, Дудинцев, Гроссман һ.б. яҙыусыларҙың Мәскәү журналдарында баҫылған романдары тирәһендәге шау-шыуҙы кемдәр хәтерләмәй? Шундай әҫәрҙәр баҫылған шул дәүерҙә үҙәк журналдарҙың тираждары күрелмәгәнсә үҫте, әҙәбиәттә ғәйәт етеҙ күтәрелеш башланыр кеүек ине. Ләкин сенсацияларҙың буш ҡыуыҡтары тиҙ шартланы, өҫтәл тартмаһында һаҡланған йәки сит илдә яҙылған рус прозаһы баҫылып та бөттө, ә уҡыусылар өсөн ваҡиға булырлыҡ яңы әҫәрҙәр бөгөнгө рус әҙәбиәтендә прозала ғына түгел, шиғриәттә лә, драматургияла ла нисә йылдар буйынса юҡ дәрәжәһендә, заманында атаҡлы булған үҙәк журналдар ҙа саҡ-саҡ тын ала.

Был яҡтан үҙебеҙҙең башҡорт әҙәбиәтендәге хәлдәр, минеңсә, һәйбәтерәк. Һуңғы йылдарҙа «Ағиҙел» журналында элек баҫырға мөмкин булмаған әҫәрҙәр донъя күрҙе (Зәки Вәлиди, Муса Мортазин). Шул уҡ ваҡытта үҙәктәге сенсациялар тынып, ундағы әҙәби мөхит һүлпәнәйеп, яңылыҡтар һирәгәйеп ҡалғанда, беҙҙең башҡорт яҙыусыларының, шағирҙарының, драматургтарының яңынан-яңы әҫәрҙәре ижад ителә торҙо, һәләтле яңы йәш көстәр үҫеп сыҡты. Үҙәктәге ижади союздар ығы-зығы, тартҡылаш, мал өсөн яғалашыу арҡаһында тарҡалғанда, беҙҙең ижади ойошмабыҙ үҙенең берҙәмлеген һаҡлап ҡала алды.

Динис Бүләковтың «Ғүмер бер генә» романы ошо уңыштарға үҙенең тос өлөшөн өҫтәй, шәхестең үҙ ере, үҙ халҡы алдындағы яуаплылығы, милләттең киләсәге тураһында уйландыра. Эйе, ғүмер ҙә, яҙмыш та, намыҫ та бер генә. Был әҫәрҙе һәр кемде иҫкәртеүсе роман тиергә була.

Был мәҡәләмдә мин Динис Бүләковтың барлыҡ ижадына байҡау яһарға, әҫәрҙәренә бәйнә-бәйнә туҡталырға йыйынмайым. Уның өсөн махсус тикшеренеү кәрәк. Яҙыусының һуңғы романы тураһында ентекләберәк һөйләүемдең сәбәбе иһә шунда, беренсенән, был әҫәрҙе прозаиктың ижад юлында яңы бейеклек, оҫталығының артабан үҫеүен раҫлаусы күренеш тип баһаларға кәрәк, икенсенән, ошо романда Динис Бүләков прозаһына хас төп сифаттар, айырыуса уның тормоштағы мөһим үҙгәрештәрҙе һиҙгер тоя һәм күрә белеүе тулы сағылған.

Заман һәм әҙип тигән һүҙҙәр ҡайһы саҡта яңғырауыҡлы лозунг ҡына

булып күренһә лә, әҙәбиәтте ошо мәңгелек бәйләнештән тыш күҙ алдына килтереп булмай. Һикһәненсе йылдар аҙағында — туҡһанынсы йылдар башында башҡорт яҙыусыларының, шағирҙарының тормош менән бәйләнешендә байтаҡ мөһим үҙгәрештәр барлыҡҡа килде, элек тыйылып килгән үткер мәсьәләләр, ҡатмарлы хәл-ваҡиғалар, тарихи шәхестәр тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләү мөмкинлеге тыуҙы. Баштағы осорҙағы елкенеү, үҙгәртеп ҡороуҙарға ихлас инаныу илдәге ҡыйралыштар тәьҫирендә, ялған демократтарҙың асылын аңлау һөҙөмтәһендә ризаһыҙлыҡ, тәнҡит рухы менән алмашынды. Ошоға нигеҙләнеп, айырым әҙиптәр, кешеләрҙе баҙар балтаһы менән ҡурҡытып, башҡорт халҡын баҙар иҡтисадына, демократияға ҡаршы өндәй, тигән һүҙҙәр ҙә ишетелеп ҡалды. Ундай һүҙҙәр әйтеүсе, бәлки, баҙар иҡтисадының нимә икәнлеген бик асыҡ күҙ алына килтерә торғандар. Ләкин танылған академиктар, сәйәсмәндәр уйлап сығарған төрлө программалар бер-бер артлы ҡыйралып тора, ә баҙар мөнәсәбәттәренең (унық заман талабы икәнлеген күпселек аңлай, әлбиттә) төплө концепцияһы беҙҙә һаман да юҡ. Үҙгәртеп ҡороу тигән изге эш асыҡ маяҡһыҙ, төҙөк компасһыҙ башланды, баҙар иҡтисады тигән «модный» һүҙҙәр ил байлығын урлауға киң юл асты, шок терапияһы яһап, халыҡтың тир түгеп йыйған һуңғы тинен көпә-көндөҙ таланылар, уны хәйерсегә әйләндерҙеләр. Инде мәсьәлә башҡорттоң ерен тартып алыуға килеп терәлде.

Башҡорт әҙәбиәте халыҡты бер ҡасан да артҡа саҡырмаған, яманлыҡҡа әйҙәмәгән. Бөгөн дә шулай. Яңы осорҙа туған телдең, милли мәктәптәрҙең, мәҙәниәттең яҙмышы, ер-һыуҙарҙың ҡурҡыныс хәлдә булыуы тураһындағы мәсьәләләрҙе тәү башлап башҡорт әҙиптәре күтәреп сыҡты, Башҡортостандың суверенитетын яулағанда, беренсе президентыбыҙҙы һайлауҙа, республика конституцияһын ҡабул итеүҙә лә уларҙың хеҙмәте аҙ булманы. Улар йәштәрҙең күтәрелеүен күрергә теләй, төрлө алыпһатарҙарҙың ғына түгел, юғары мәҙәниәтле белгестәрҙең, ысын эшҡыуарҙарҙың күпләп үҫеп сығыуына өмөтләнә.

Динис Бүләковтың ижады хаҡында башлаған һүҙемә тормоштоң әллә күпме яҡтары хаҡында уйланыуҙар ҡушыла. Яҙыусының әҫәрҙәре үҙҙәре үк шуға сәбәпсе, сөнки бөгөн өҫкә ҡалҡып сыҡҡан борсоулы мәсьәләләр яҙыусының бынан байтаҡ йылдар элек яҙылған әҫәрҙәрендә үк күтәрелә килде. Мәҫәлән, әҙиптең күпселек хикәйәләре һәм повестары йәштәр тураһында. Уларҙың яҙмышы еңел түгел. Оло тормошҡа аяҡ баҫҡанда улар төрлөсә аҙашыуҙар, хаталаныуҙар, эҙләнеүҙәр аша оло юлға сығырға ынтыла, кеше рухын сикләүсе ҡалыптар менән үҙҙәренсә көрәшә.

Йәки экология хәлдәре. Етмешенсе йылдарҙа яҙылған «Иң оҙон төн» повесында ваҡиғалар урмандың киләсәк яҙмышы тураһындағы бәхәс

тирәһендә үҫә. Уны аяуһыҙ ҡырыуҙы киләсәк быуындар алдында енәйәт тип Ғәфүр күпме генә аңлатырға тырышһа ла, Хажғәле кеүек ҡомһоҙҙар еңеп сыға. Ләкин Хажғәленең тәбиғәт алдындағы енәйәте язаһыҙ ҡалмай. Рөхсәтһеҙ урман ҡырғанда тоҙ менән атылып тотола. Аҙаҡ кеше өйөнә яуыз ниәт менән килгәнендә уны йәшен атҡан ике ҡоласлыҡ йөҙйәшәр ҡарағай баҫып үлтерә.

Һикһәненсе йылдар аҙағында баҫылып сыҡҡан «Килмешәк» романы кешенең тәбиғәткә мөнәсәбәте, кемдәр ерҙең ысын хужалары кеүек борсоулы һорауҙарҙы күтәрә. Дан-шөһрәт өсөн тыуған төйәгенең матурлығын рәхимһеҙ емереүсе, байлығын талаусы, һыуҙарын ҡоротоусы бәғзе етәкселәр, асылда, был ергә осраҡлы килеп юлыҡҡан, шуға уның яҙмышына битараф йәшәгән килмешәк булып сыға.

Динис Бүләков Мәләүез районының Арыҫлан ауылында, һуҡмаҡтарына Кинйә батырҙың эҙҙәре уйылып ҡалған, һәр кемде бер күреүҙә ғашиҡ итерлек йәмле Нөгөш буйҙарында тыуып үҫкән. Күпме араларҙы тау-таш ярып үткән Ағиҙел, Нөгөш был яҡтарҙа иркен сәхрәләргә килеп сыға. Бында Урал тауҙарының олпатлығы башҡорт далаларының киңлеге менән ҡушыла. Улар яҙыусы күңелендә лә бер бөтөн булып йәшәй. Динис Бүләков тәбиғәтте бик нескә тойоусы әҙип. Ҡайһы бер яҙыусыларҙың барлыҡ иғтибары кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәренә генә йүнәлтелгән була, улар ниндәй ерҙә йәшәй, ниндәй матурлыҡтарға һоҡлана, уларҙы ниндәй ел-ямғырҙар ҡаға һ.б. — былары автор өсөн мөһим түгел. Бында бәхәсләшергә лә сәбәп юҡ һымаҡ, сөнки һәр кемдең үҙ ижади алымдары. Ә бына Динис Бүләковтың прозаһын тәбиғәттән тыш күҙ алдына килтереүе ҡыйын, сөнки тәбиғәт ундағы төп образдарҙың береһе, күпселек әҫәрҙәре ниндәйҙер күренеште һүрәтләүҙән башлана. Ундағы ер-һыу исемдәренә генә иғтибар итегеҙ: Кейәү ҡашы ҡаяһы, Аҡтүбә ҡаяһы, Кәләш күҙе шишмәһе, Баллы шишмә, Йөҙшишмә ауылы, Йәмбиргән ауылы, Аҡнөгөш йылғаһы... Үҙҙәре кеүек исемдәре лә ниндәй матур, һәр береһе йырлап тора, һәр береһе кешеләрҙең өлөштәренә төшкән бәхет булып, уларҙың яҙмыштарын биҙәп йәшәй. Әҙип үҙенең геройҙарының донъяһына уҡыусыны һәр ваҡыт тиерлек тәбиғәт аша алып инә, уларҙың намыҫын, рухи ныҡлығын тәбиғәт менән бәйләнештә һынай, кешенең ҡылған ҡылыҡтарына ла һуңғы хөкөмдө йыш ҡына тәбиғәт үҙе сығара. «Иң оҙон төн»дә ҡомһоҙ Хажғәлене ҡарағай баҫҡан һымаҡ, «Ҡыйырсыҡ ай»ҙа туйға әҙерләнеп йөрөгәндә мөхәббәтенә хыянат иткән Нурғәленең өйләк бүрәнәләрҙән йыйылған һалын ажарланып аҡҡан Ағиҙел ташҡа бәреп урталайға һындырып һалсыһы менән бергә шарламалағы ҡаяға һөйрәп алып китә.

«Ҡыйырсыҡ ай» повесының тәүге биттәрендә туҡтауһыҙ ямғыр яуған

дөм ҡараңғы төндә кешенең бына ниндәй хәлдә ҡалғанын күрәбеҙ: «Сынтимер хәлде тиҙ аңланы, һалды бәйләп ҡуя торған йыуан арҡанды ҡармап алып, кейеме-ние менән һыуға һикерҙе. Бәхеткә ҡаршы, был тәңгәлдә Ағиҙел ул тиклем тәрән түгел ине. Тырыша торғас, Сынтимер ярға сыҡты. Арҡанды беренсе осраған беләк йыуанлыҡ йәш ағасҡа сырманы, һал тартылыуға, ағастың ҡайыры һыҙырылып, ботаҡтары шартлап һынды. Сынтимерҙең танауына таныш ҡайыр еҫе бәрелде: муйыл ағасы, ныҡ булырға тейеш. Ләкин ағым ыңғайына дәртләнеп алған һал муйыл ағасын тамыры менән генә ерҙән һурып сығарҙы ла ары китте. Сынтимер шулай ҙа унық ярға яҡыная биреп ҡалғанлығын шәйләне. Арҡанды тарта-тарта өҫтөрәлеп барҙы ла муйыл ағасы аңғармаҫтан йыуан тирәк ботағының айырсаһына ҡыҫылды. Ҡылдай тартылған арҡан бирешмәне. Ҙур һал, ҡеүәте кәмеп, әкрен генә ярға һуҡты. Инде Сынтимер арҡанды тирәктең олонона бәйләп ҡуйҙы».

Динис Бүләков прозаһында кеше тәбиғәт менән хозурланып ҡына түгел, уның ташҡынлы, буранлы, дауыллы хәтәр ваҡыттарында сая алышып та йәшәй. «Упҡын ситендә бейеү», «Аҡбуҙ алышҡа сыға», «Шарлауыҡ» — китаптарҙың исемдәре үк һүрәтләнәсәк ваҡиғаларҙың ғәҙәти булмаясағын белгертеп тора. Геройҙарҙың киҫкен бәрелештәрҙә, етеҙ хәрәкәттә асылыуы, сюжеттың көсөргәнешле үҫеше, ваҡиғаларҙың тығыҙ үрелеүе, урыны-урыны менән мажаралы хәлдәргә юлығыуҙар, үҙенсә серлелек, йомаҡ булып килгән һорауҙарҙың йыш ҡына көтөлмәгәнсә хәл ителеп ҡуйыуы — әҙиптең һүрәтләү стиленә, художество асылына иң хас сифаттар.

Күпселек әҫәрҙәре тормоштоң ҡатмарлы ҡаршылыҡтарына нигеҙләнеп тыуһа ла, Динис Бүләковтың ижад донъяһы — яҡты донъя. Ул күтәренке рухлы, күңеле ҡанатлы кешеләрҙе, романтик шәхестәрҙе айырыуса яҡын күрә, күберәк шундай яҙмыштар хаҡында яҙа. Үҙенең тәүге китаптарының береһен ул «Ауылымдың аҡ өйҙәре» тип атағайны. Әҙиптең геройҙарының күбеһе юлдарҙа аҙашып, тормоштары буталып ҡалғанда ла кешелек сифаттарын юғалтмайҙар, яҡты хыялдарына тоғро ҡалалар. Яҙмыштарының ҡояшы сайралып ватылғанда ла уның һәр ярсығын ҡәҙерләй беләләр. Әйтәйек, ғүмере буйы кешеләргә йорт бурауҙан бушамаған Сынтимергә бәхет бер ваҡытта ла тулы ай булып баҡмаған кеүек, бер ваҡытта ла уның донъялары түп-түңәрәк булмаған кеүек. Ләкин һуғыш юлдарында тапҡан мөхәббәтенең шаһиты булған ҡыйырсыҡ ай нисә йылдар инде уның күңелен ҡояш кеүек яҡтыртып йәшәй.

Яҙыусының тәүге әҫәрҙәренән үҙенең биографияһында, шулай уҡ иптәштәренең, таныштарының тормошонда булған ваҡиғалар туранан-тура инеп киткеләй торғайны. Ижадтың тәүге осорҙарында күп әҙиптәр өсөн уртаҡ

сифат. Бөгөн әҙип ғүмер юлының илленсе артылышына артыла. Алсаҡ шишмә булып башланған ижады Ағиҙел һымаҡ олпатлана, уйсанлана, тулылана бара, иңдәге хәстәрҙәр ҙә арта. Ижад эштәрен Динис Бүләков оҙаҡ йылдар буйы яуаплы вазифалар менән бергә алып барҙы, «Пионер» журналының редакторы, Башҡортостан радио һәм телевидениеһының етәксеһе булды. Уҙған йыл көҙ ул икенсе тапҡыр Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе итеп һайланды. Эштәрен уң булһын, хыялдарың мул булһын, ҡыуған юлың халыҡ юлы булһын, Динис дуҫ!

**Рауил Бикбаев**

**Бүләкова, Р. Сал Уралдың сая бөркөтөндәй ... [Текст] / Динис Бүләков // Ватандаш. – 2004. - № 5. – Б. 80-89.**

Күренекле яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Динис Бүләковаҡа 2004 йылдың 18 майында 60 йәш тулған булыр ине...



***Динис Бүләков ғаиләһе менән. 1994 йыл.***

*Динис Мөҙәрис улы Бүләков Башҡортостандың Мәләүез районы Арыҫлан ауылында тыуған. Смаҡ ауылында алтынсыны тамамлағас, Воскресен урта мәктәбенә уҡырға китә. Һуңынан “Нөгөш“ колхозында механизатор булып эшләй. 1960-1964 йылдарҙа Бәләбәй ауыл жалығын механизациялау һәм электрлаштырыу техникумын тамамлап сыға. Бәләбәй районының “Сельхозтехника“ берекмәһендә - инженер, “Еңеү байрағы“ төбәк гәзите хәбәрсеһе булып эшләй. Совет сафтарында хеҙмәт итеп ҡайтҡас, Мәскәүҙә М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға инә. “Совет Башҡортостаны“ гәзите һәм “Ағиҙел“ журналы редакцияларында эшләй, “Пионер“ журналының баш мөхәррире була.*



***Советтар Союзы Геройы Иван Пстыго, Кәтибә Кинйәбулатова, Ирек Кинйәбулатов менән.***

*1986 йылда Д.М.Бүләков Телевидение һәм радио тапшырыуҙары буйынса дәүләт комитеты рәйесе итеп үрләтелә, Башҡорт АССР-ы хөкүмәт ағзаһы итеп һайлана. Республика журналистары уны үҙҙәренең ижади союзының етәксеһе итеп ҡуя. Ошо осорҙа Д.М.Бүләковтың ойоштороу һәләте, яҙыусылыҡ дарманы айырыуса баҙыҡ асыла. Өлкәндәр һәм балалар өсөн повестар, бер-бер артлы романдар ижад итә.*

*1988 йылда Башҡортостан яҙыусыларының X съезында Д. М. Бүләков Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе итеп һайлана, 1993 йылда XI съезда ҡәләмдәштәре уға яңынан ышаныс күрһәтә.*

*Динис Бүләков әҙәбиәт менән йәштән ҡыҙыҡһына башлай. Уның “Ҡояш ярсығы“ тигән тәүге хикәйәләр китабы 1971 йылда донъя күрә.*

*Шуның артынса “Ауылымдың аҡ өйҙәре“, “Һары һандуғас балаһы” һәм башҡа китаптары сыға. 1988 йылда “Килмешәк“ романы баҫыла, бөгөнгө көндөң мөһим мәсьәләләре тураһында тәрән уйланыуҙар һөҙөмтәһе булған “Ғүмер бер генә“ романы Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды. “Туҙҙырылған тамуҡ“ романы ла шундай уҡ ҡырҡыу замана проблемаларына арналған.*

*Үҙе лә аҡ күңелле шәхес булараҡ, уның аҡ тойғоларға ғына сорналған ижады уҡыусыларын гел аҡ юлға әйҙәр.*

*Ошондай ышаныс менән, иғтибарығыҙға әҙиптең ҡәләмдәштәренең, дуҫтарының һағыныу тойғоларына һуғарылған иҫтәлектәрен, шиғырҙарын тәҡдим итәбеҙ.*

**Ҡол Дәүләт**

Арзаная әҙәм ғүмеркәйе,
Артҡан һайын дан-мал хаҡтары.
Алтынға ла хатта алмашмаҫлыҡ
Аҫылдарҙың китә баштары.
Алмашынған һайын сын баһалар,
Ауырая әжәл арбаһы.
Аҡылынан яҙғандарҙы алмай,
Ала гелән аҡыл аллаһын.
Асмандарға оҙатҡанда халҡы
Аҡ кәфенгә төрөп аҡ улын,
Аңлай алмай донъя асылын,
Алмашына кеүек аҡылым.

17. 04. 1995

**Рауил Бикбаев**

Динис Бүләков һәр саҡ сәмләнеп, илһамланып ижад итте. Ул бөгөнгө көндөң борсолоуҙары, милләтебеҙҙең бөгөнгө хафалары менән йәшәне. Хәҙерге ҡатмарлы тормошобоҙҙоң ауыр хәлдәре хаҡындағы хаҡ һүҙен үҙ ваҡытында, кешеләрҙең күҙенә тура ҡарап әйтә белде. Шуға ла уның әҫәрҙәре уҡыусыларыбыҙҙың ихтирамын яуланы, әҙәбиәтебеҙҙең бөгөнгө юғары ҡаҙаныштарына әйләнде.

Динис Бүләков үҙен-үҙе аяй белмәүсе сая рухлы, тынғыһыҙ шәхес ине. Шуға ла ул көслө, ҡыйыу һәм матур кешеләр хаҡында яҙырға яратыр ине.

Үҙе лә ул һәр саҡ йөҙө нур сәсеп торған һөйкөмлө, матур кеше булды, йондоҙло, көслө шәхес ине. Ул үҙенең йөрәк ялҡынын кешеләргә йомарт өләшеп йәшәне.

Динис Бүләковтың ни тиклем ярҙамсыл кеше булғанлығын, тоғро дуҫ, ышаныслы юлдаш булғанлығын уның менән аралашҡан һәр кем онота алмаҫ.

Хыялдарҙа эҙләп күк диңгеҙҙең
Аҡ карабын, алһыу елкәнен,
Онотабыҙ ерҙә кешеләрҙең
Мал көткәнен, иген иккәнен —
Ошо үҙе тормош икәнен.
Ураҡҡанда ҡайсаҡ ығы-зығы,
Ауырлыҡтар баҫып киткәндә,
Әйткеләнем:
Шул да булған тормош!
Башҡасараҡ беҙҙең көткәндәр.
Уйламайса ысҡындырған һүҙҙән
Кешеләрҙең күңеле кителде.
Әллә ниндәй тормош эҙләнем мин...
Ошо үҙе тормош бит инде.
Күпме эште, алда эшләнер тип,
Иртәгәһе көнгә ҡалдырҙым.
Яҡындағын ҡайғыртаһы ерҙә
Алыҫтағын уйлап ҡаңғырҙым.
Донъя мәшәҡәте ялыҡтырып,
Хыял менән күңелем тулышһа,
Әйттем тағы:
Былар тормошмо ни?!
Алда әле беҙҙең тормоштар...
Йөрәк һыҙландарып, ғүмеремдең
Аҫыл сағы үтеп киткәндә,
Аңланым мин:
Һәр ғәҙәти сәғәт —
Ошо үҙе тормош икән дә...

1983

**Иҫәнбикә Туған**



*Төркиәлә Иҫәнбикә Туған менән*

...Билдәле булыуынса, атайым “Хәтирәләр“ендә үҙе тыуып-үҫкән мөхиттең һәм ул мөхиттең уҡымышлыларын таныта. Шулай итеп, беҙ XX быуат башында Урал тауҙарында урынлашҡан төрлө ауылдарҙа уҡымышлыларҙың күп булыуын күрәбеҙ. Башҡортостанды белмәгәндәр өсөн был бик аңлашылмай, һәм миңә бирелгән һорауҙарҙың береһе Урал тауҙары кеүек таулы өлкәлә былдай мәҙәниәтле кешеләрҙең булыуына һәм уларҙың быуат башындағы хәрәкәттәрҙә актив ҡатнашыуына, ҡайһы ваҡыттарҙа атайым кеүек лидер булып китеүҙәренә бәйле. Атайым "Хәтирәләр“ендә аңлатҡанса, ул шул дәүерҙә яңғыҙ булмаған, уға ярҙам иткән бик күп кеше булған. Улар Петербургтан алып Ташкентҡа тиклем һуҙылған бер орбита эсендә булғандар һәм мәҙәниәт, сәйәсәт мәсьәләләрендә иң ныҡ ярҙам итеүселәр үҙе тыуып-үҫкән мөхиттән булған. Был мөхиттең эскерһеҙ һәм мөхәббәт тулы мөнәсәбәте “Хәтирәләр“- ҙең төп темаларының береһе.

Динис Бүләковты мин шул мөхиттең дауамы кеүек ҡабул итәм. Уның менән 1990 йылдың декабрендә Зәки Вәлиди Туғандың тыуыуына 100 йыл тулыуына бәйле тантаналарҙа танышҡайным. Ул ваҡытта мин Америкала инем. Шулай ҙа саҡырыу килгәс тә барғым бик килде. Ҡәрҙәшем Субидәй ҙә Төркиәнән килеп еткәйне. Асылында нисек ҡаршылаясаҡтары тураһында бер нәмә лә белмәй инек, тик атайыбыҙҙың тыуған илен һөйөү тойғоһонда тәрбиәләнгән өсөн йүгереп килеп еттек. Ошо теләк эсендә һуңынан дуҫыбыҙ буласаҡ бик күп кешеләр менән таныштыҡ. Шуларҙың береһе Динис Бүләков ине.

Шул йылғы тантаналарҙы Башҡорт дәүләт университеты, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һәм яҙыусылар ойошмаһы ойошторғайны. 1989 йылда Зиннур Ураҡсиндан “Атайығыҙҙың тыуған иле Башҡортостанды күрергә килегеҙ“, тип яҙылған бик йылы саҡырыу алдыҡ...

Мәскәү аэропортында беҙҙе туғаныбыҙ Камил Вәлиев ҡаршыланы, Уны мин информация кибете янында “Сүбидәй һәм Иҫәнбикә Вәлиди! Ватаныығыҙға хуш килдегеҙ!“ тип яҙылған, әлеге көндә лә беҙҙә һаҡланған

яҙыу аҫтында беренсе тапҡыр күрҙем, һәм беҙ нисек булғанын да белмәйенсә һөйләшә башланыҡ. Мин ул көндәргә тиклем башҡортса аңлаясағымды, минең һөйләгәндәремде лә аңлаясаҡтарын белә инем. Тик бөтәһе лә ҡапыл булды. Ләкин ул аңлашыу шул көндән башлап дауам итә.

...Икенсе көн конференция үткәреү өсөн Башҡорт дәүләт университетына алып барҙылар. Конференцияны үткәреүселәр сифатында Динис Бүләков, Рәғиб Ғимаев, Зиннур Ураҡсин, сит ил ҡунаҡтары сифатын да Абдулкадир Заһиди, мин, Йозеф Торма һәм Конгур Мандоки президиумда ултырҙыҡ. Унан һуңғы көндәрҙә дауам иткән тантаналарҙа ла Динис Бүләков беҙҙең менән бергә булды.

...Хәҙерге көндә 1990 йылдың декабрендә бергәләшеп ултырған кеше - ләрҙең ҡайһы береһе арабыҙҙа юҡ. Динис Бүләковтан башҡа, Конгур Мандоки һәм үткән йыл Сара апайым үлеп китте, инде Камил да юҡ арабыҙҙа.

...Һуңынан, 1993 йыл ҡышын, Динис Бүләков Төркиә яҙыусылар ойошмаһы йыйылышында ҡатнашыр өсөн Анкараға килде. Бергә ресторанға барҙыҡ, ул үҙе, эше, пландары тураһында һөйләне. Күңеле ҡайнай ине. Оҙаҡ йылдар буйы таныш булғанбыҙ кеүек ине. Минең күңелем ошондай тойғолар менән тулған өсөн Динис Бүләков миңә "Хәтирәләр"ҙә телгә алынған атайымдың бик күп дуҫ-иштәрен иҫемә төшөрҙө һәм дуҫлыҡтарын хис итеп ҡағыҙға күсерергә сәбәп булды

Ауыр тупраҡтары еңел булһын!

Әхәт Сәлихов тәржемәһе.

**Муса Ғәли**

## Егетлек ҡомары

Уның менән беҙ ҡасан, ниндәй мәлдә тәү башлап осрашҡанбыҙҙыр — хәҙер хәтерләмәйем. Миңә ҡалһа, Динистың йөҙө-төҫө, буйы-һыны беҙ күҙмә-күҙ осрашҡансы уҡ таныш та, яҡын һәм ҡәҙерле лә булды. Уның һәр хәрәкәтендә, хатта атлап йөрөшөндә үк, күңел асыҡлығы һәм дауыллы бер йәшәү көсө сағыла ине һымаҡ. Уның алыҫтан уҡ ишетелеп килгән көр тауышы, йөҙөнән һирпелгән йылмайыу яҡтылығы күңелдәрҙәге бөтә пәрҙәләрҙе асып ташлай торғайны.

Динис менән беҙҙең дуҫтарса яҡынлашыуыбыҙға тормоштоң үҙенән сыҡҡан ҡайһы бер сәбәптәр ҙә булды һымаҡ. Әйтәйек, минең ҡасандыр "Пионер" журналында эшләп китеүем, уның иһә, йылдар үткәс, ошо уҡ журналға баш редактор булып килеүе...

— Һа-а-ай! Ағайым килгән дә баһа! — тип, ҡулдарын бөркөт ҡанат-

тарындай йәйеп ҡаршылай торғайны ул редакцияға килгән мәлдәремдә. Тимәк, ул миңә ошо уҡ “Пионер“ҙан, йәғни бер “тамырҙан” ҡалҡынған зат итеп ҡараны.

Бынан тыш, йылдар ағымына ҡушылып, аҙмы ижади бәйләнештәр, идара ултырыштарындағы фекер алышыуҙар, яңы ижади берекмәләр асыуҙың тетрәткес мәлдәре теҙелеп китте. “Тетрәткес мәлдәре” тип юҡҡа әйтмәнем. Сөнки республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә (Учалы, Яңауыл, Сибай) ижади берекмәләр асыу ниндәйҙер протоколға яҙылған ҡоро ҡарарҙарҙы үтәү генә түгел ине. Айырым төбәктәр яҙмышына төшкән был ваҡиға, хозур бер байрам төҫөн алып, әҙәбиәт һәм сәнғәттең, мәҙәниәтебеҙҙең яңы усаҡтарын ҡабыҙыу кимәленә күтәрелә барҙы. Шуға ла асыу тантаналарының һәр ҡайһыһында ла халыҡтың рухи сарсауын ҡандырырҙай йыр-бейеү һәм шиғриәт майҙан тотто. Шағирҙар, йырсылар менән осрашыуҙа халыҡ үҙенең рухи ҡаҙаныштарын күреп кинәнә, ижади сығанаҡтарын барлай, үткәндәрҙе байҡай һәм киләсәген күҙаллай. Быларҙы ойоштороуҙа Динис Бүләковтың шатлығын, уның ниндәй тойғолар менән яныуын һөйләп тораһы ла юҡ. Халыҡ алдында ул илһамлы телмәр тота, кәрәк икән, дауылланып бейеп тә китә, мәҙәк һүҙ әйтеп, көлдөрөп тә ала торғайны. Сөнки ул ғәмәлгә ашҡан был етди эштәрҙең үҙ исеме менән бәйләнгән булыуын бөтә күңеле менән тойҙо...

1996

**Газим Шафиков**

Я не собираюсь ударяться в какие-то воспоминания. Хочу просто сказать: он был замечательным человеком и хорошим писателем. И то, что он дал переводить столь серьезный труд, как роман “Жизнь дается однажды“ молодому человеку, студенту Литературного института имени Горького Фариту Ахмадиеву, сыну покойного замечательного поэта и литературоведа Вафы Ахмадиева, говорит о многом. Он мог обратиться к любому московскому “пробивному“ переводчику, хотя бы привычному Ямилю Мустафину, и никаких проблем с напечатанием романа не было бы. Но он обратился к Фариту. В этом — его отношение к молодым, способным. Его желание помочь им, подвигнуть к серьезной работе, творчеству. Таким он был всегда. Таким он ушел из намих рядов.

Наш последний разговор с Динисом Мударисовичем — о прошедших выборах. Он сильно переживал повальную неудачу на них людей духовного мира. Ни один писатель или представитель иной сферы культуры (в том числе журналистики) не пробился в депутаты. Он говорил об этом с горечью.

Я отвечал ему усмешкой: “Ты забыл, в какой стране живешь? — подковыривал его. — Разве не поставили тебя на место, сказав, что культура подождет?“ “Но ведь это конец демокра..."

Тут он осекся и докончил бесцветным голосом: “Это надо же до такой степени дискредитировать понятие демократии, что оно стало то ли ругательным, то ли пошлым словом! После чеченской войны об этом не может быть и речи“.

Динис был романтиком и идеалистом. Но он был одновременно и реалистом...

1995

**Валентин Сорокин**

## Динис

Башкорт, а именем — Динис,
А статью вольною — казак.
Зачем уральский мрак навис
В твоих степных больших
глазах?
Вон вдохновенный Салават,
Праправнук грозному, тому,
Поет, как плачет на закат,
В районном праздничном дому.
И рвется русский баянист,
Владимир — ишь, престольный
князь,
Встряхнуть мехами — гром и
свист,
Талантом не ударить в грязь!
Казак Динис, послушай, друг,
Здесь наши деды и отцы
Перетерпели столько вьюг,
А край – скачи во все концы:
Вблизи — река, вдали — гора,
А за спиной — леса, леса.
Просить прощенья нам пора
У скал, подперших небеса!..
Я думаю, непросто им
Нас оберечь своим трудом.
Динис, мы вместе постоим
На берегу, где был твой дом.
Твой дом и мой, в годину зла
Они исчезнули с земли.
Их буря в бездну унесла,
Над ними — стонут журавли.
Пусть вдохновленный Салават
Поет, и пусть баян звенит.
Тот в нашей доле виноват,
Кто черной кровью знаменит.

1990

**Ирек Кинйәбулатов**

**Тетрәндерҙе донъя**

Бейек күгең, аҫыл ереӊ өсөн
Тыуғайның һин, башҡорт
бөркөтө.
Сая остоӊ бейек көмбәҙҙәрҙә,
Күпме Сальериҙы өркөтөп.
Һинең ғүмереӊ бөтөнләйе
менән —
Ир өлгөһө, егет өлгөһө.
Бөгөн бына иртә яҙҙар менән
Ир-егеттәр илай көллөһө
Һинең яҙмыш нисек тура килде
Был тормоштоӊ мәхшәр мәленә.
Ни хәлендә булһын — керә
белдең
Ил хәленә, кеше хәленә.

Дауыл ауҙармаҡсы булды
Кеше таянырлыҡ ҡаяны.
Беҙҙең алда ҡатып уйға ҡалдың
Гүйә терһәгеңә таянып.

Аяҙ көндө йәшен атҡан һымаҡ

Тетрәндерҙе донъя ағышы.
Йөрәктәрҙә – һинең йөрәк уты,
Беҙҙең күҙҙә – һинең һағышың.
Күтәргәнгә күрә һинең иңең -
Ниндәй генә йөктәр һалманыҡ.
Һин һаҡлаған саҡта беҙҙе
тотош -
Һине генә һаҡлай алманыҡ ...

1995

**Сафуан Әлибай**

**Өмөт**

(*Юл һайын беҙ өйҙәргә китап*
*тейәп ҡайта инек*)

Ҡайҙан ғына килеп йоҡҡандыр
ул —
Беҙгә танһыҡ ошо сәйер сир?!
(Юҡ, сир түгел, изге
яҙмышыңдың
Рух һуғарыр тылсым сәйелер).
Беҙ икәүләп ерҙе күп сырманыҡ:
Ҡул болғашып ҡалды сит илдәр.
Ташланманыҡ алтын-
көмөштәргә,

Берәмтеклеп йыйған бүләктәр шул
Алтындарға ғына биргеһеҙ:
Сәфәрҙәрҙә үткән ғүмерҙәрҙең
Шаһиттары улар, билгеһе.
Алып ҡайттыҡ оло табыштарҙы,
Томдар көтә дуҫтар, әшнәләр;
Ә һин, Динис, ҡайҙа
гиҙәһеңдер,
Әллә һаман бүләк эҙләйһеңдер?
Һығылды ла инде кәштәләр.

Әүрәтмәне сит-ят стилдәр.
Әлибайҙың байлыҡ күтәргеһеҙ,
Сәфәр һайын килә йөрәкһеп;
Ҡайта буламы һуң Динис Бүләк
Күстәнәсһеҙ йәки бүләкһеҙ!
Хазиналар йыйҙыҡ хаҡ
биргеһеҙ,
Кағa-ҡаға һуңғы тиндәрҙе;
Табыла торҙо кибеттәрҙең
Тәғәйене, беҙгә тигәне.

Танһыҡ булды ошо изге бер сир:
Сабыр ғына донъя ҡыҙырҙыҡ.
Кәштәләрҙә — беҙҙең көндәр, айҙар,
Бәғзеләрҙең күҙе ҡыҙырлыҡ.
Йәндәребеҙ ете күккә ашыр,
Рухтарыбыҙ осор юғары.
Кемдер бирәү,
Йылдар туҙандарын өрә-һөртә,
Ҡулдарына алһа шуларҙы…

2003

**Ҡәҙим Аралбай**

## Тоғро ҡалайыҡ

Эй әйләнә тормош ҡуласаһы,
Ваҡыт ваҡлап ғүмер иләнә.
Тарта-тарта һәлмәк йәшәү йөгөн,
Күҙҙәр тона, урттар сәйнәлә.
Әлдә дуҫтарым бар — бергә-
бергә
Күтәрергә заман һынауын.
Юрап-белеп булмай әле дәүер
Алда тағы ниҙәр һонаһын.
Гөл һулытып, сүл киптереп үткән
Ғүмеребеҙҙән намыҫ уйланыр.
Ҡәбер ҡаҙып, китап яҙып үткән
Көнөбөҙгә сауап юлланыр.
Беҙ йырлайһы йырҙар алда әле,
Иң шәп шиғыр әле тыуымаған,
Беҙ һөйәһе ҡыҙҙар буй етмәгән,
Ижад ҡомарыбыҙ туймаған.
Эй әйләнә тормош ҡуласаһы
Ваҡыт ваҡлап ғүмер иләнә.

Ғүмер бирәү булғанғалыр, ахыры,
Ҡарашыбыҙ
Үткәндәргә йыш-йыш әйләнә.
Кемде генә илатмаған икән
Күҙ һирпкәнсе үтер был ғүмер?-
Сәскә кеүек кенә ата ла ул,
Ята ла шул ергә көл-күмер.
Ерҙә бер ниндәй ҙә юҡ мөғжизә,
Юҡ ҡағиҙә,
Бар хис, ярһыуҙар...
Беҙгә насип булған бер ғүмерҙе
Йөҙ ғүмер итерлек бар хыял!
Ҡалған юлыбыҙға һабаҡтарҙың
Ғибрәтлеһен генә алайыҡ,
Һатылмай ҙа,
Ватылмай ҙа торған
Хыялдарға тоғро ҡалайыҡ!

1991

**Тимер Йосопов**

## Беште ер eләккәйҙәре

*Ер eләккәйҙәре беште инде...*
*Р. Ғарипов*

Яна-яна туңған ергә
Төштө ир йөрәккәйҙәре.
Йәйҙәр үтте,
Һин генә юҡ,
Беште ер eләккәйҙәре.
Һуңғы тапҡыр яҙғы елдә
Туҙҙы һинең сәскенәйең.
Eләк беште,
Eләк татлы,
Уттай әсе йәшкенәйем.
Оло инең,
Һинең менән
Бер иттек беҙ киң ғаләмде.
Юғалтыуҙар уртаҡ булды,
Бишкә бүлдек бер тәғәмде.
Бер кем дә юҡ,
Серҙәремде
Асам йәйҙең елдәренә.
Үҙең һымаҡ,
Ҙур кәүҙәле
Ҡайғы ятты иңдәремә.
Татлы тиһәм,
Eләк асы,
Еренем мин
Бүкһеп-бүкһеп...
Йырың ҡалды,
Йырҙарыңды
Йырлайым мин үкһеп-үкһеп...
Яна-яна туңған ергә
Төштө ир йөрәккәйҙәре,
Йәйҙәр етте,
Һин генә юҡ,
Беште ер eләккәйҙәре

1996

**Роберт Миңнуллин**

## Ах, ниндәй егет инең бит!

Ах, ниндәй егет инең бит,
Ах, ниндәй бөркөт инең!
Һин бит бөтөн Өфөһөнә
Бер генә бөртөк инең.
Ах, ниндәй дуҫым инең бит,
Берәүгә лә биргеһеҙ,
Һинең төҫлө дуҫтар тағы
Булыр микән — билгеһеҙ.
Күңелдәр һинһеҙ тулышҡан,
Өфөләр һинһеҙ бойоҡ.
Саҡ-саҡ ҡына түҙеп торам,
Күҙ йәштәремде тыйып.
Динис кенә юҡ арала...
Ах, уның дуҫлыҡтары!
Ул киткәс кенә беленде
Донъяның бушлыҡтары...
Ах, дуҫтарым, кәрәк түгел
Һеҙ мине йыуатмығыҙ
Күңел былай ҙа кителгән –
Кәрәкмәй, илатмағыҙ!
Ах, дуҫтарым, ниңә генә
Динисты ебәрҙегеҙ,
Ник үлемде еңмәнегеҙ,
Ник минһеҙ ерләнегеҙ!

Ниҙәр ҡалған һиңә унда,
Ник кенә киттең, Динис?!
“Һағындыра Динис“, — тиһеҙ
Һуң мин дә шулай тим бит.

Өлгөрмәне хәбәрегеҙ,
Һуңланы хаттарығыҙ...
Әйҙәгеҙ Динис янына,
Йә үҙен ҡайтарығыҙ!

1995

Рәйлә Бүләкова әҙерләне.

**Абдрахманова, Л. Динис Бүләков романдарын Төркиәлә лә укыйҙар [Текст] / Л.Абдрахманова // Көнгәк. – 2012. – 18 декабрь. – Б. 2.**

*Арабыҙҙан бик иртә киткән, күптәрҙең яраткан яҙыусыһы Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Динис Буләковтың "Ғүмер бер генә", "Килмешәк" романдары Төркиәлә нәшер ителгән. Уларҙы Төркиәнең Гази университеты укытыусыһы, филология фәндәре докторы Нигяр Калкан башкортсанан тәржемә иткән.*

Нигяр Ҡалҡан яҡташыбыҙҙың әҫәрҙәрен тотош төрөк теленә тәржемә итһә, романдар Анкараның Этимесгут районы Хакимиәте, “Бенгю” Евразия Яҙыусылар берекмәһе һәм Төрксой халыҡ – ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы ярҙамында баҫылған.

Баш ҡалабыҙ Өфөлә төрөксә нәшер ителгән ошо китаптарҙың презентацияһы булды. Төрксой Халыҡ-ара ойошмаһы делегацияһы II "Аҡ торна" Халыҡ-ара төрки телле поэзияны тәржемә итеү конкурсы лауреаттарын ҡотлау тантанаһында ҡатнашты.

Презентация сиктәрендә улар яҙыусының тыуған яғы Смаҡ ауылында ла булып китте. Делегацияны район Хакимиәте башлығы урынбаҫары Илнур Мөләков оҙатып йөрөнө. БР Мәҙәниәт министрлығының Төрксойҙағы вәкиле Әхәт Сәлихов, Анкараның Этимесгут районы Хакимиәте башлығы Сонат Алааттин, Гази университеты укытыусыһы Нигяр Ҡалҡан, БР Яҙыусылар берекмәһе рәйесе урынбаҫары Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, яҙыусылар Ғәлим Хисамов, Марсель Сәлимов, БР Мәҙәниәт министрлығы белгесе Тимур Йосопов, иң беренсе күренекле яҡташыбыҙ исемен йөрөткән мәктәп алдындағы бюсҡа сәскә һалды. Ауыл мәҙәниәт йорто үҙешмәкәрҙәре, мәктәптең "Нөгөш ынйылары" фольклор ансамбле коллективы дәртле йыр-бейеү менән халҡыбыҙҙың ҡунаҡ ҡаршы алыу йолаһын күрһәтте. Сит илдән килгән ҡунаҡтарҙа башҡорт халыҡ көнкүрешен сағылдырған милли мөйөш тә ҙур ҡыҙыҡһыныу уяты. Артабан улар яҙыусының тормошон һәм ижадын сағылдырған, билдәле яҡташыбыҙ-ҙың исемен йөрөткән музейға йүнәлде.

Унда сит ил ҡунаҡтарын яҙыусының хәләл ефете Рәйлә апай Бүләкова, ҡыҙы Зөһрә, Арыҫлан ауылы биләмәһе башлығы Айрат Шәйәхмәтов, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе Юнир Аҙнағолов, балалыҡ дуҫтары, музейҙы ойоштороуға ярҙам итеүселәр ҡаршы алды. Иң беренсе, Рәис хәҙрәт Суҡбаев яҙыусы рухына доға ҡылғас, әҙәби музей директоры Нәсимә Сукбаева музей ҡомартҡылары тураһында ҡыҫҡаса һөйләне. Динис Мөҙәрис улының балалыҡ дуҫтары Әхәт Шаһманов, Ғәйнетдин Камалетдинов, яҙыусының сәңгелдәгендә йоҡлап үҫкән Сәлих Исәкәевтың хәтирәләре ҡыҙыҡһыныу уятты. Рәйлә Мөхәмәт ҡыҙы бөтәһенәлә рәхмәт белдерҙе.

Тәржемәсе Нигяр Калҡан үҙ сығышында яҙыусының романдарын тикшергән ваҡытта башҡорт теленең шул тиклем бай, тәрән, киң ҡоласлы булыуын аңлауын, геройҙарҙың киң күңеллеген, тыуған ергә тоғролоғон, саф һөйөүҙең көсөн тойоуын, был образдарҙы Төркиә йәштәренең дә яратып уҡыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды.



**Лена Абдрахманова.**
**Александр Яворский фотаһы**

**Бикбаев, Р. Ғүмер бер генә булһа ла ... [Текст] / Р. Бикбаев // Ватандаш. – 2014. – № 5. - Б. 3 - 19.**

*Кешенең тормошон йәмләүсе, уға ныклы көс-таяныс биреүсе дуҫлыҡ тураһында быуаттар буйына бик күп матур һүҙҙәр әйтелгән. Тоғро дуҫтарың булыу оло бәхет ул. Бигерәк тә бөгөнгө һымаҡ әхлаҡ-иман емерелгән буталсыҡ замандарҙа.Тормошта яуызлыҡ, яһиллыҡ, оятһыҙлыҡ, көнсөллөк ярһығанда, ихлас аралашыр кешеләр һирәгәйгәндә тоғролоҡтоң, ғәҙеллектең ҡәҙере арта, был-донъянан бик күптәре үтә иртә киткән дуҫтарым тағы ла йышыраҡ иҫкә төшә. Рәми Ғарипов, Әнур Вахитов,*

*Марат Минһажетдинов, Миәссәр Басыров, Ким Әхмәтйәнов, Вафа Әхмәҙиев уҙған быуаттың етмешенсе-һикһәненсе йылдарында бер-бер артлы вафат булды. Фекерҙәштәрем Мостай Кәримдең, Рәшит Солтангәрәевтең, Булат Рафиковтың, Ғәзим Шафиковтың, Раил Байбулатовтың, Ихсан Әхтәмйәновтың, Шәрәф Әхмәмәтовтың арабыҙҙан китеүенә байтаҡ йылдар үтте. Яҡташым Дим Дәминов менән дуҫ булдыҡ. Башҡортостанға башҡортоңдан да тоғрораҡ ир-азамат Александр Филиппов менән йәш саҡтарҙан рухи аралаштыҡ. Ул минең шиғырымды беренсе булып рус теленә тәржемә итте. Ошондай яҡты шәхестәр менән яҡын дуҫ булып, уй-фекер уртаҡлашып, бер-беребеҙҙең ижади уңыштарына ҡыуанып йәшәгән йылдарым ғүмеремдең ниндәй бай мәғәнәле аҫыл саҡтары икәнлеген ваҡыт үткән һайын нығыраҡ аңлайым, дуҫтарымды нығыраҡ һағынам. Шулар араһынан Динис Бүләковты айырыуса юҡһынам.*

*Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, дуҫтарымдың күбеһе хаҡында, ижадтары тураһында улар тере саҡта ентекле һүҙ әйтеп өлгөрә алманым. Ғүмерҙең бер генә икәнлеген белһәк тә, ваҡыттың сикләнгәнлеген онотабыҙ. Әйтер һүҙҙәр әйтелмәй ҡала. Шуныһы бигерәк үкендерә.*

*Фекерҙәшем, дуҫым Динис Бүләковтың илле йәшенә уның тураһында мәҡәлә яҙғаныма ҡыуанам, һәләтле яҙыусы, оло шәхес хаҡындағы һүҙҙәремде уның үҙенә лә, шул осор уҡыусыларына ла әйтә алдым. Был яҙмаларым ғәҙәттәгесә юбилярҙы маҡтауҙар түгел, әҙиптең үҙенсәлекле яҙмышы, уның заман менән ҡатмарлы бәйләнештәре, шул осорҙағы әҙәби мөхит, илдәге ҡыйралыштар дәүерендәге ижади эҙләнеүҙәр тураһында уйланыуҙарым булды. Унда күтәрелгән мәсьәләләрҙең күбеһе әле лә ватандаштарыбыҙҙы борсой. Хәҙерге тормоштағы хәүефле хәлдәрҙең уҙған быуаттағы тамырҙарын барлау бөгөнгө уҡыусыларға ла фәһемле булыр тип уйлайым. Сөнки яңы йәш быуын донъя ғүмер буйы әлегесә барған тип уйлай, бик күптәре уларға тиклем булған ваҡиғалар, бөйөк ватаныбыҙҙың тарихи ҡаҙаныштары һәм ҙур юғалтыуҙары хаҡында бөтөнләй тиерлек белмәй. Динис Бүләков илдәге ҡаршылыҡлы ижтимағи ваҡиғаларҙың уртаһында йәшәне, улар әле тарихҡа күсмәҫ борон уҡ, әле ҡайнап торған саҡтарында уҡ үҙ һүҙен әйтә алды, үҙ заманының һулышы бөркөлөп торған әҫәрҙәр ижад итте.*

*Әлбиттә, ваҡыт үтеү менән яҙыусының, шағирҙың, драматургтың ижади мираҫы тулыраҡ асыла бара. Ләкин әҙиптең яҙғандары мираҫҡа әйләнгәнгә тиклем үк уның ижад донъяһын байҡауҙар, ваҡиғаларҙы шул саҡтағы йәнле хәрәкәттә, үҫештә күҙәтеүҙәр — былар барыһы ла заман шаһитының ҡарашы, байтаҡ йылдар бергә аралашып йәшәгән фекерҙәшенең раҫлауҙары ул. Һәр яҙыусы йәки шағир хаҡында уның менән бер осорҙа*

*йәшәгән заман шаһитының һүҙҙәре яңы быуын уҡыусыларына шул осорҙоң һулышын еткерә, уҙғандарҙың әле тарихҡа әйләнмәгән тере сағына ҡайтара, шуға ла ҡыҙыҡһынып уҡыла. Бына ошоларҙы күҙ уңында тотоп, мин 1994 йылда — бынан егерме йыл элек яҙылған мәҡәләмә яңынан әйләнеп ҡайттым һәм Динис Бүләковтың тыуыуына етмеш йыл тулыу айҡанлы уны бөгөнгө уҡыусылар хөкөмөнә сығарам.*

## Илленсе артылышта

Бынан ун-ун биш йылдар элегерәк Динис Бүләков йәйге ялын Урал тәбиғәтендә үткәрергә, йыл һайын кәмәлә Ағиҙел буйлап ағып төшөргә ярата торғайны. Хәҙер ҙә яраталыр, форсат ҡына етмәйҙер. Заманы ла башҡасараҡ шул бөгөн.

Нисәмә көндәр буйына тау-урмандарҙың, өҫкә ауырҙай булып торған текә ҡаяларҙың матурлығына хайран ҡалып ағып барыуҙар, зәмзәм һыуындай саф шишмәләрҙә һыуһыныңды ҡандырыуҙар, әллә ниндәй тәрәнлектә лә төбөндәге таштары йым-йым килеп күренгән Ағиҙелдә ҡолас ташлап йөҙөүҙәр тормош мәшәҡәттәрен иңдәрҙән һыпырып ташлағандай була, тыуған еренән көс алып, кеше донъяға яңынан тыуған кеүек була.

Ләкин ғүмерлеккә онотолмаҫ былдай сәйәхәттәр хозурлыҡ ҡосағында йәшәү генә түгел. Ҡаяларға һуғылып, шаршыларҙа ҡайнап аҡҡан Ағиҙел буйлап ағып төшөр өсөн уяулыҡ та, сослоҡ та, етеҙлек тә кәрәк. Ағиҙелдең ярһыу ағымы ҡыйыуҙарға, таһыллы кешеләргә генә баш бирә, иҫ киткес матурлыҡтарға һоҡланып та, хәтәр боролоштарҙа, шарламаларҙа баҙап ҡалғандарҙы, ебеп төшкәндәрҙе кәмәһе, һалы менән ҡая ташҡа ҡыйрата килтереп һуға. Хас та тормоштоң үҙендәге һымаҡ, кешеләрҙең яҙмыштарындағы ҡатмарлы юлдар һымаҡ.



***Рауил Бикбаев, Динис Бүләков.***
***Салауат районы Тирмән ауылы. 1978 йыл***

Ижад донъяһында үҙ асыш-тарына ирешер өсөн, уҡыусыларға үҙ һүҙен әйтер өсөн, Динис Бүләков тормоштоң етеҙ һәм аяуһыҙ ағышында һәр саҡ үҙәктә булырға тырышты, ваҡыттың киҫкен боролоштарында уяулығын юғалтманы, заман үҙгәрештәрен һиҙгер тоя һәм әҫәрҙәрендә шуның үҙенсә - лекле һыҙаттарын күрһәтә алды.

Яҙыусының 1992 йылда «Ағиҙел» журналында баҫылып сыҡҡан һәм 1993 йылда Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһына лайыҡ булған «Ғүмер бер генә» романының исеме аҫтына йәйәләр эсендә «Заман тормошоноң күренештәре» тип ҡуйылған. Бына ошо һүҙҙәр Динис Бүләков прозаһының төп асылын бик йыйнаҡ итеп әйтеп биргән кеүек. Заман тормошоноң күренештәре — яҙыусының һәр әҫәренә ҡарата шулай тиергә мөмкин. Әлбиттә, был күренештәр бер әҫәрҙә бик сағыу асылырға, икенсеһендә үтә тоноҡ төҫмөрләнергә лә мөмкин. Ләкин Динис Бүләковтың хикәйәләрен, повестарын, романдарын, ғөмүмән, барлыҡ ижадын, фекерләү үҙенсәлеген, яҙыусы булараҡ тормош менән бәйләнешен заман  башҡа күҙ алдына килтереүе лә ҡыйын.

Һәр әҙиптең үҙ донъяһы, үҙ зауығы һәм үҙ табыныуҙары. Күпселек яҙыусылар ғәҙәттә үҙе йәшәгән дәүерҙең хафалары һәм борсолоуҙары тураһында яҙа, икенселәре үҙ заманы хаҡында ла, уҙғандарҙы байҡап та ҡыҙыҡлы әҫәрҙәр ижад итә, өсөнсөләре (улары күпкә һирәгерәк) бары тарихи жанрҙа ғына эшләй. Һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа башҡорт әҙәбиәтенең иң ҙур ҡаҙаныштарының береһе — беҙҙә ысын мәғәнәһендә тарихи прозаның барлыҡҡа килеүе. Был шатлыҡлы күренеш халҡыбыҙҙа милли үҙаңдың үҫеүен раҫлай һәм яңы быуындарҙың рухи нығыныуына, милəттә үҙ мираҫына, тарихтағы үҙ урынына дөрөҫ  ҡараш тәрбиәләүгә көслө йоғонто яһай. Быуаттар төпкөлөндәге ваҡиғаларҙы йәнле образдар аша яңынан терелтеү өсөн яҙыусыға илһамдан, художник һиҙемләүенән тыш үткер тарихсы ҡарашы, илһам өҫтөнә әллә күпме документтарҙа соҡсонорлоҡ, шуларҙан тейешле һығымталар  яһарлыҡ тарихсы аҡылы, йылдарға һуҙылған хеҙмәт  һәм  сабырлыҡ та кәрәк

Ләкин һәр жанрҙың, һәр теманың үҙ ҡатмарлылыҡтары һәм ауырлыҡтары бар. Халыҡтар тарихы үҙенең бик күп тармаҡтары менән бөгөнгөгә килеп тоташһа ла, беҙҙең тамырҙарыбыҙҙы билдәләһә лә, барыбер үҙенсә тамамланған, тукталған процесс. Әлбиттә, ундағы ваҡиғалар үҫешендәге эҙмә-эҙлелекте, сәбәптәрҙе һәм һөҙөмтәләрҙе, билдәһеҙ шәхестәрҙе һәм фактарҙы асыҡлау, шул осор кешеләренең психологияһына, үҙ-ара мөнәсәбәттәрендәге нескәлектәргә, рухи һәм матди донъяһындағы үҙенсәлектәргә үтеп инеүе ғәйәт ауыр хәл.

Үҙ заманы хаҡында һүҙ әйтергә теләүсе әҙип алдында шулай уҡ ауырлыҡтар етерлек, сөнки уның алдындағы ваҡиғалар тамамланмаған, барыһы ҡайнай, бәрелешә, өр-яңы күренештәр тыуып тора. Тарихты байҡаусыны тын диңгеҙ ҡултығына ҡат-ҡат сумып, гәрәбәләр эҙләүселәр менән сағыштырып булһа, хәҙерге заман тураһында яҙыусы, үҙе ғүмерҙә лә күрмәгән ташҡын йылғала алда ниндәй боролоштар, ниндәй ҡаялар көтөрөн дә белмәйенсә, һал менән төшөп килеүе күҙ алдына баҫа. Ташҡындың тынғанын, йылғаның ярыр юлдарын ярып үткәнен көткәндә, моғайын, барыһы ла асығыраҡ  күренер ине, баһалар, күҙәтеүҙәр, һығымталар ҙа тулыраҡ һәм дөрөҫөрәк булыр ине. Юҡҡамы ни ижад эшендә, бигерәк тә прозала, ваҡыт һуҙымы, талабы, йәғни ваҡиғалар ваҡыт арауығында һыуынғас, барыһы ла үҙ урынына ултырғас ҡына, улар хаҡында һүҙ әйтергә мөмкин, тигән ҡараш йәшәй. Был фекерҙә лә үҙенсә дөрөҫлөк барҙыр. Ләкин Динис Бүләков ваҡыт арауығы тураһында уйлап, ваҡиғаларҙың һыуынғанын көтөп ултыра торған яҙыусыларҙан түгел. Ул тормоштоң эҫе эҙҙәренән, шаулы юлдарынан атларға ярата. Уның иң асыҡ миҫалдарының береһе — яҙыусының һуңғы романы.

Хәҙер инде тарҡатылған оло илдең төрлө милли әҙәбиәттәре элек бер-береһенең уңыштарын күрә һәм баһалай белә торғайнылар, һуңғы ваҡыттарҙа бындай дуҫлыҡ бәйләнештәре тураһында ауыҙ асып һүҙ әйтеүе лә гонаһҡа иҫәпләнә башланы. Әгәр бындай ижади бәйләнештәребеҙҙе юғалтһаҡ, беҙ бик ныҡ фәҡирләнәсәкбеҙ, үҙебеҙҙең киләсәгебеҙҙе үҙебеҙ сикләйәсәкбеҙ. Шуға ла Динис Бүләковтың «Ғүмер бер генә» романы тураһында һүҙ йөрөткәндә, бәғзеләрҙең ҡарашынса бик үк заманса булмаһа ла, башҡа әҙәбиәттәрҙең дә бөгөнгө тәжрибәһенә, әлеге хәлдәренә ҡараш ташламаҡсымын.

Динис Бүләковтың романы беҙҙең күҙ алдында булған, элекке СССР күләмендә шаулаған ваҡиғаларҙың тулҡындары әле тынмаған, шаңдауы әле ҡолаҡтарыбыҙҙа яңғырап торған сағында уҡ ҡағыҙға теркәп ҡалдырылған, түбәндән юғарыға тиклемге хакимлыҡ баҫҡыстарында ҡоролған сәйәси уйындарға ҡарата күптәрҙең күҙен асырға ярҙам иткән ҡыйыу әҫәр булды. Халыҡ депутаттары һайлау ваҡытындағы төрлө оятһыҙ интригалар, машиналар, торбалар, асфальт юлдар, һәр йортҡа телефон үткәреүҙәр вәғәҙә итеп, сәйҙәр-мәйҙәр таратып, һайлаусыларҙы төрлөсә алдап, парламенттарға үтеүсе йылғыр бәндәләр элекке оло дәүләттең һәр тарафында аҙ булманы бит. Ә бына шул хаҡта тыуған роман тағы ла ниндәй әҙәбиәттәрҙә бар икән? Мин бер темаға мотлаҡ әллә нисә әҫәр яҙылырға тейеш, тигән талап ҡуймайым. Ләкин бында бит һүҙ тема тураһында ғына түгел, милләттең киләсәгенә, халыҡ яҙмышына мөнәсәбәт, шуларға тоғро шәхестәр хаҡында һәм кешеләрҙең өмөт-ышаныстары менән үҙҙәренең тар, түбән мәнфәғәттәре

өсөн һатыу итеүсе бәндәләр хаҡында бара. Аҙаҡ килеп, иң мөһиме — милләттең үҙ-үҙенә мөнәсәбәте, рухи талаптары, үҙ бәҫен үҙе баһалай белеүе йәки белмәүе тураһында бара. «Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, дөрөҫ һүҙең инде һуңлаһа?» — тигәйне Рәми Ғарипов. Динис Бүләковтың «Ғүмер бер генә» романындағы дөрөҫ һүҙҙәрҙең ваҡытында әйтелеүе айырыуса мөһим.

Һикһән етенсе йылдарҙа Рыбаков, Дудинцев, Гроссман һ.б. яҙыусыларҙың Мәскәү журналдарында баҫылған романдары тирәһендәге шау-шыуҙы кемдәр хәтерләмәй? Шундай әҫәрҙәр баҫылған шул дәүерҙә үҙәк журналдарҙың тираждары күрелмәгәнсә үҫте, әҙәбиәттә ғәйәт етеҙ күтәрелеш башланыр кеүек ине. Ләкин сенсацияларҙың буш ҡыуыҡтары тиҙ шартланы, өҫтәл тартмаһында һаҡланған йәки сит илдә яҙылған рус прозаһы баҫылып та бөттө, ә уҡыусылар өсөн ваҡиға булырлыҡ яңы әҫәрҙәр бөгөнгө рус әҙәбиәтендә прозала ғына түгел, шиғриәттә лә, драматургияла ла нисә йылдар буйына юҡ дәрәжәһендә, заманында атаҡлы булған үҙәк журналдар ҙа саҡ-саҡ тын ала.

Был яҡтан үҙебеҙҙең башҡорт әҙәбиәтендәге хәлдәр, минеңсә, һәйбәтерәк, һуңғы йылдарҙа «Ағиҙел» журналында элек баҫырға мөмкин булмаған әҫәрҙәр донъя күрҙе (Зәки Вәлиди, Муса Мортазин). Шул уҡ ваҡытта үҙәктәге шау-шыу тынып, ундағы әҙәби мөхит һүлпәнәйеп, яңылыҡтар һирәгәйеп ҡалғанда, беҙҙең башҡорт яҙыусыларының, шағирҙарының, драматургтарының яңынан-яңы әҫәрҙәре ижад ителә торҙо, һәләтле яңы йәш көстәр үҫеп сыҡты. Үҙәктәге ижади союздар ығы-зығы, тарткылаш, мал өсөн яғалашыу арҡаһында тарҡалғанда, беҙҙең ижади ойошмабыҙ үҙенең берҙәмлеген һаҡлап ҡала алды.

Динис Бүләковтың «Ғүмер бер генә» романы ошо уңыштарға үҙенең тос өлөшөн өҫтәй, шәхестең үҙ ере, үҙ халҡы алдындағы яуаплылығы, милләттең киләсәге тураһында уйландыра. Эйе, ғүмер ҙә, яҙмыш та, намыҫ та бер генә.

Был мәҡәләмдә мин Динис Бүләковтың барлыҡ ижадына байҡау яһарға, әҫәрҙәренә бәйнә-бәйнә туҡталырға йыйынмайым. Уның өсөн махсус тикшеренеү кәрәк. Яҙыусының һуңғы романы тураһында ентекләберәк һөйләүемдең сәбәбе иһә шунда. Беренсенән, был әҫәрҙе күренекле прозаиктың ижад юлында яңы бейеклек, оҫталығының артабан үҫеүен раҫлаусы күренеш тип баһаларға кәрәк. Икенсенән, ошо романда Динис Бүләков прозаһына хас төп сифаттар, айырыуса уның тормоштағы мөһим үҙгәрештәрҙе һиҙгер тоя һәм күрә белеүе тулы сағылған.

Заман һәм әҙип тигән һүҙҙәр ҡайһы саҡта яңғырауыҡлы лозунг ҡына булып күренһә лә, әҙәбиәтте ошо мәңгелек бәйләнештән тыш күҙ алдына килтереп булмай. Һикһәненсе йылдар аҙағында — туҡһанынсы йылдар

башында башҡорт яҙыусыларының, шағирҙарының тормош менән бәйләнешендә байтаҡ мөһим үҙгәрештәр барлыҡҡа килде, элек тыйылып килгән үткер мәсьәләләр, ҡатмарлы хәл-ваҡиғалар, тарихи шәхестәр тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләү мөмкинлеге тыуҙы. Баштағы осорҙағы күтәренкелек, үҙгәртеп ҡороуҙарға ихлас инаныу илдәге ҡыйралыштар тәьҫирендә, ялған демократтарҙың асылын аңлау һөҙөмтәһендә ризаһыҙлыҡ, тәнҡит рухы менән алмашынды. Ошоға нигеҙләнеп, айырым әҙиптәр кешеләрҙе баҙар балтаһы менән ҡурҡытып, башҡорт халҡын баҙар иҡтисадына, демократияға ҡаршы өндәй, тигән һүҙҙәр ҙә ишетелеп ҡалды. Ундай һүҙҙе әйтеүсе, бәлки, баҙар иҡтисадының нимә икәнлеген бик асыҡ күҙ алдына килтерә торғандыр. Ләкин танылған академиктар, сәйәсмәндәр уйлап сығарған төрлө программалар бер-бер артлы ҡыйралып тора, ә баҙар мөнәсәбәттәренең (уның заман талабы икәнлеген күпселек аңлай, әлбиттә) төплө фәнни нигеҙе беҙҙә һаман да юҡ. Үҙгәртеп ҡороу тигән изге эш асыҡ маяҡһыҙ, төҙөк компасһыҙ башланды, баҙар иҡтисады тигән «модный» һүҙҙәр ил байлығын урлауға киң юл асты, шок терапияһы яһап, халыҡтың тир түгеп йыйған һуңғы тинен көпә-көндөҙ таланылар, уны хәйерсегә өйләндерҙеләр. Инде мәсьәлә башҡорттоң ерен тартып алыуға килеп терәлде.

Башҡорт әҙәбиәте халыҡты бер ҡасан да артҡа саҡырмаған, яманлыҡҡа әйҙәмәгән. Бөгөн дә шулай. Яңы осорҙа туған телдең, милли мәктәптәрҙең, мәҙәниәттең яҙмышы, ер-һыуҙарҙың ҡурҡыныс хәлдә булыуы тураһындағы мәсьәләләрҙе тәү башлап башҡорт әҙиптәре күтәреп сыҡты, Башҡортостандың үҙаллылыҡ яулауында, беренсе президентыбыҙҙы һайлауҙа, республика конституцияһын ҡабул итеүҙә лә уларҙың хеҙмәте аҙ булманы. Улар йәштәрҙең күтәрелеүен күрергә теләй, төрлө ярым ҡараҡ алыпһатарҙарҙың ғына түгел, юғары мәҙәниәтле белгестәрҙең, ысын эшҡыуарҙарҙың күпләп үҫеп сығыуына өмөтләнә.

Динис Бүләковтың ижады хаҡында башлаған һүҙемә тормоштоң әллә күпме яҡтары хаҡында уйланыуҙар ҡушыла. Яҙыусының әҫәрҙәре үҙҙәре үк шуға сәбәпсе, сөнки бөгөн өҫкә ҡалҡып сыҡҡан борсоулы мәсьәләләр яҙыусының бынан байтаҡ йылдар элек яҙылған әҫәрҙәрендә үк күтәрелә килде. Мәҫәлән, әҙиптең күпселек хикәйәләре һәм повестары йәштәр тураһында. Уларҙың яҙмышы еңел түгел. Тормошҡа аяҡ баҫҡанда улар төрлөсә аҙашыуҙар, хаталаныуҙар, эҙләнеүҙәр аша оло юлға сығырға ынтылалар, кеше рухын сикләүсе ҡалыптар менән үҙҙәренсә көрәшәләр.

Йәки тәбиғәт яҙмышы. Етмешенсе йылдарҙа яҙылған «Иң оҙон төн» повесында ваҡиғалар урмандың киләсәк яҙмышы тураһындағы бәхәс тирәһендә үҫә. Уны аяуһыҙ ҡырыуҙы киләсәк быуындар алдында енәйәт, тип Ғафур күпме генә аңлатырға тырышһа ла, Хажғәле кеүек ҡомһоҙҙар еңеп

сыға. Ләкин Хажғәленең тәбиғәт алдындағы енәйәте язаһыҙ ҡалмай. Рөхсәтһеҙ урман ҡырғанда тоҙ менән атылып тотола. Аҙаҡ кеше өйөнә яуыз ниәт менән килгәнендә, уны йәшен атҡан ике ҡоласлыҡ йөҙйәшәр ҡарағай баҫып үлтерә.

Һикһәненсе йылдар аҙағында баҫылып сыҡҡан «Килмешәк» романы кешенең тәбиғәткә мөнәсәбәте, «Кемдәр ерҙең ысын хужалары?» кеүек борсоулы һорауҙарҙы күтәрә. Дан-шөһрәт өсөн тыуған төйәгенең матурлығын рәхимһеҙ емереүсе, байлығын талаусы, һыуҙарын ҡоротоусы бәғзе етәкселәр асылда был ергә осраҡлы килеп юлыҡҡан, шуға уның яҙмышына битараф йәшәгән килмешәк булып сыға.

Динис Бүләков Мәләүез районының Арыҫлан ауылында, һуҡмаҡтарына Кинйә батырҙың эҙҙәре уйылып ҡалған тарихи төбәктә, һәр кемде бер күреүҙә ғашиҡ итерлек йәмле Нөгөш буйҙарында тыуып үҫкән. Күпме араларҙы тау-таш ярып үткән Ағиҙел, Нөгөш был яҡтарҙа иркен сәхрәләргә килеп сыға. Бында Урал тауҙарының олпатлығы башҡорт далаларының киңлеге менән ҡушыла. Улар яҙыусы күңелендә лә бер бөтөн булып йәшәй. Динис Бүләков тәбиғәтте бик нескә тойоусы әҙип. Ҡайһы бер яҙыусыларҙың барлыҡ иғтибары кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәренә генә йүнәлтелгән була, улар ниндәй ерҙә йәшәй, ниндәй матурлыҡтарға һоҡлана, уларҙы ниндәй ел-ямғырҙар ҡаға һ.б. — былары автор өсөн мөһим түгел. Бында бәхәсләшергә лә сәбәп юҡ һымаҡ, сөнки һәр кемдең үҙ ижади алымдары. Ә бына Динис Бүләковтың прозаһын тәбиғәттән тыш күҙ алдына килтереүе ҡыйын, сөнки тәбиғәт ундағы төп образдарҙың береһе, күпселек әҫәрҙәре ниндәйҙер күренеште һүрәтләүҙән башлана. Ундағы ер-һыу исемдәренә генә иғтибар итегеҙ: Кейәү ҡашы ҡаяһы, Аҡтүбә ҡаяһы, Кәләш күҙе шишмәһе, Баллы шишмә, Йөҙшишмә ауылы, Йәмбиргән ауылы, Аҡнөгөш йылғаһы... Үҙҙәре кеүек, исемдәре лә ниндәй матур, һәр береһе йырлап тора, һәр береһе кешеләрҙең өлөштәренә төшкән бәхет булып, уларҙың яҙмыштарын биҙәп йәшәй. Әҙип үҙенең геройҙарының донъяһына уҡыусыны һәр ваҡыт тиерлек тәбиғәт аша алып инә. Уларҙың намыҫын, рухи ныҡлығын тәбиғәт менән бәйләнештә һынай, кешенең ҡылған ҡылыҡтарына ла һуңғы хөкөмдө йыш ҡына тәбиғәт үҙе сығара. «Иң оҙон төн»дә ҡомһоҙ Хажғәлене ҡарағай баҫҡан һымаҡ, «Ҡыйырсыҡ ай»ҙа туйға әҙерләнеп йөрөгәндә мөхәббәтенә хыянат иткән Нурғәленең өйләк бүрәнәләрҙән йыйылған һалын ажарланып аҡҡан Ағиҙел ташҡа бәреп урталайға һындыра һәм һалсыһы менән бергә шарламалағы ҡаяға һөйрәп алып китә.

«Ҡыйырсыҡ ай» повесының тәүге биттәрендә туҡтауһыҙ ямғыр яуған дөм-ҡараңғы төндә кешенең бына ниндәй хәлдә ҡалғанын күрәбеҙ: «Сынтимер хәлде тиҙ аңланы, һалды бәйләп ҡуя торған йыуан арҡанды

ҡармап алып, кейеме-ние менән һыуға һикерҙе. Бәхеткә ҡаршы, был тәңгәлдә Ағиҙел ул тиклем тәрән түгел ине. Тырыша торғас, Сынтимер ярға сыҡты. Арҡанды беренсе осраған беләк йыуанлыҡ йәш ағасҡа сырманы, һал тартылыуға, ағастың ҡайыры һыҙырылып, ботаҡтары шартлап һынды. Сынтимерҙең танауына таныш ҡайыр есе бәрелде: муйыл ағасы, ныҡ булырға тейеш. Ләкин ағым ыңғайына дәртләнеп алған һал муйыл ағасын тамыры менән генә ерҙән һурып сығарҙы ла ары китте. Сынтимер шулай ҙа унын ярға яҡыная биреп ҡалғанлығын шәйләне. Арҡанды тарта-тарта өҫтөрәлеп барҙы ла муйыл ағасы аңғармаҫтан йыуан тирәк ботағының айырсаһына ҡыҫылды. Ҡылдай тартылған арҡан бирешмәне. Ҙур һал, ҡеүәте кәмеп, әкрен генә ярға һуҡты. Инде Сынтимер арҡанды тирәктең олонона бәйләп ҡуйҙы».

Динис Бүләков прозаһында кеше тәбиғәт менән хозурланып ҡына түгел, унын ташҡынлы, буранлы, дауыллы хәтәр ваҡыттарында сая алышып та йәшәй. «Упҡын ситендә бейеү», «Аҡбуҙ алышҡа сыға», «Шарлауыҡ» — китаптарҙың исемдәре үк һүрәтләнәсәк ваҡиғаларҙың ғәҙәти булмаясағын белгертеп тора. Геройҙарҙың киҫкен бәрелештәрҙә, етеҙ хәрәкәттә асылыуы, сюжеттың көсөргәнешле үҫеше, ваҡиғаларҙың тығыҙ үрелеүе, урыны-урыны менән мажаралы хәлдәргә юлығыуҙар, үҙенсә серлелек, йомаҡ булып килгән аҫрауҙарҙың йыш ҡына көтөлмәгәнсә хәл ителеп ҡуйыуы әҙиптең һүрәтләү стиленә, художество асылына иң хас сифаттар.

Күпселек әҫәрҙәре тормоштоң ҡатмарлы ҡаршылыҡтарына нигеҙләнеп тыуһа ла, Динис Бүләковтың ижад донъяһы — яҡты донъя. Ул күтәренке рухлы, күңеле ҡанатлы кешеләрҙе, романтик шәхестәрҙе айырыуса яҡын күрә, күберәк шундай яҙмыштар хаҡында яҙа. Үҙенең тәүге китаптарының береһен ул «Ауылымдың аҡ өйҙәре» тип атағайны. Әҙиптең геройҙарының күбеһе юлдарҙа аҙашып, тормоштары буталып ҡалғанда ла, кешелек сифатарын юғалтмайҙар, яҡты хыялдарына тоғро ҡалалар. Яҙмыштарының ҡояшы сайралып ватылғанда ла, унын һәр ярсығын ҡәҙерләй беләләр. Әйтәйек, ғүмере буйы кешеләргә йорт бурауҙан бушамаған Сынтимергә бәхет бер ваҡытта ла тулы ай булып баҡмаған кеүек, бер ваҡытта ла унын донъяһы түп-түңәрәк булмаған. Ләкин һуғыш юлдарында тапҡан мөхәббәтенең шаһиты булған ҡыйырсыҡ ай нисә йылдар инде унын күңелен ҡояш кеүек яҡтыртып йәшәй.

Яҙыусының тәүге әҫәрҙәренә үҙенең биографияһында, шулай уҡ иптәштәренең, таныштарының тормошонда булған ваҡиғалар туранан-тура инеп киткеләй торғайны. Ижадтың тәүге осорҙарында күп әҙиптәр өсөн уртаҡ сифат. Хәҙер инде Динис Бүләков тормоштоң тәрәнерәк ҡатламдарына үтеп инә, замандаштарҙы борсоған уй-тойғоларҙы нығыраҡ тоя. Бөгөн әҙип ғүмер

юлының илленсе артылышына артыла. Алсаҡ шишмә булып башланған ижады Ағиҙел һымаҡ олпатлана, уйсанлана, тулылана бара, иңдәге хәстәрҙәр ҙә арта. Ижад эштәрен Динис Бүләков оҙаҡ йылдар буйы яуаплы вазифалар менән бергә алып барҙы, «Пионер» журналының мөхәррире, Башҡортостан радио һәм телевидениеһының етәксеһе, республика Юғары Советы депутаты булды. Уҙған йыл көҙ ул икенсе тапҡыр Башҡортостан Яҙыусылар союзының рәйесе итеп һайланды. Бөгөнгө ауыр заманда беҙҙең ижади ойошманың берҙәмлеген һаҡлап ҡалыу өсөн ул күп эш эшләй. Алда ниндәй генә тормош ташҡындары көтһә лә, эштәрең уң булһын, хыялдарың мул булһын, ҡыуған юлың халыҡ юлы булһын, Динис дуҫ!

Ғинуар, 1994.

## Бәхилләшеү һүҙе

Башҡорт әҙәбиәте, башҡорт сәнғәте, барлыҡ Башҡортостан был көндәрҙә оло юғалтыу кисерә. Күренекле башҡорт яҙыусыһы һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Рәсәй Яҙыусылар союзы сәркәтибе, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы, Ғәлимов Сәләм исемендәге премия лауреаттары Динис Мөҙәрис улы Бүләковтың йөрәге ҡапыл тибеүҙән туҡтаны.

Мәләүез районының Арыҫлан ауылында тыуып үҫкән ир-арыҫландың, яландарҙа игенен дә иккән, ауыр һалдат хеҙмәтен егеттәрсә дан менән үткән, республикабыҙҙа журналистика эшенә күпме көс түккән, юғары ижтимағи вазифаларҙы лайыҡлы башҡарған, ғүмере буйы ижад өсөн янып йәшәгән ир-арыҫландың ҡайнар йөрәге тибеүҙән туҡтаны.

Әйтерһең дә, сал Уралдың ғорур бер ҡаяһы емерелеп төштө һымаҡ. Ижад бәйгеләрендә тынғы белмәгән ярһыу толпар йөрәге ярылып йығылды һымаҡ.

Динис Бүләков һәр саҡ сәмләнеп, илһамланып ижад итте. Ул һәр саҡ бөгөнгө көндөң борсолоуҙары, милләтебеҙҙең бөгөнгө хафалары менән йәшәне. Динис Бүләковтың яҡын ҡәләмдәше, атаҡлы шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың «Ни мәғәнә дөрөҫ һүҙ әйтеүҙән, дөрөҫ һүҙең инде һуңлаһа!» тигән шиғри юлдарын кемдәр генә белмәй. Динис бөгөнгө ҡатмарлы тормошобоҙ хаҡындағы хаҡ һүҙен үҙ ваҡытында әйтә белде, кешеләрҙең күҙенә тура ҡарап әйтә белде. Шуға ла уның хикәйәләре, повестары,

романдары меңәрләгән уҡыусыларыбыҙҙың ихтирамын яуланы, әҙәбиәтебеҙҙең хәҙерге юғары ҡаҙаныштарына әйләнде.

Динис Бүләков үҙенә үҙе аяу белмәүсе сая рухлы, тынғыһыҙ йәнле шәхес ине. Шуға ла ул ҡанатлы кешеләр хаҡында, көслө, ҡыйыу һәм матур кешеләр тураһында яҙырға яратыр ине.

Динис Бүләков йөҙө-күҙе һәр саҡ нур сәсеп торған матур кеше булды, көслө шәхес булды, һөйкөмлө, йондоҙло кеше булды. Ул үҙенең йөрәк ялҡынын кешеләргә йомарт өләшеп йәшәргә ашҡынды. Зирәк күңеле нимәлер һиҙенгән һымаҡ, һуңғы ваҡытта үлем тураһында ул йыш һөйләй торғайны.

Динис Бүләковтың ни тиклем ярҙамсыл кеше булғанлығын, тоғро дуҫ, ышаныслы юлдаш булғанлығын уның менән аралашҡан һәр кем ғүмерҙә онота алмаҫ.

Динис ғаиләһенә һәр саҡ хәстәрлекле булды, бала йәнле кеше булды. Рәйлә менән улар уңған, алсаҡ, тәүфиҡлы өс ҡыҙ үҫтерҙеләр. Беҙ бөгөн мәрхүмдең ғаиләһенең, туғандарының, яҡындарының оло ҡайғыһын ихлас уртаҡлашабыҙ. Һеҙгә Аллаһы Тәғәлә сабырлыҡтар бирһен, ҡәҙерлеләребеҙ. Ауыр саҡтарығыҙҙа һәр саҡ ярҙамға әҙер тороусы Динистең тоғро дуҫтары барлығын, зинһар, онотмағыҙ.

Бөгөнгө хәсрәтебеҙ уртаҡ, ҡайғыбыҙ бигерәк ауыр, йөрәктәребеҙгә уйылған яра бигерәк тәрән. Ҡайғыбыҙҙың ни тиклем ауырлығын әле аңлап та еткермәйбеҙҙер. Барыбыҙ ҙа тетрәп ҡалдыҡ, шаңҡып ҡалдыҡ. Яйлап, бәлки, иҫебеҙгә килербеҙ, юғалтыуыбыҙҙың тотош әҙәбиәтебеҙ өсөн ни тиклем оло булғанлығын ваҡыт үткән һайын ныҒыраҡ аңлай барырбыҙ.

Яны ғына ҡанатланып-илһамланып йөрөгән Динистең бөгөн табутта ятыуына бер ҙә генә ышанып булмай. «Ағиҙел»дең һуңғы һандарында уның «Туҙҙырылған тамуҡ» тигән яңы романы баҫыла ине. Күптән түгел генә Динис Бүләков яңы повесын яҙып бөтөргәйне. Уның әллә күпме ижади пландары бар ине. Көтмәгәндә улар барыһы ла селпәрәмә килде.

Шуныһы күңелде йыуата: уның һүҙе, уның китаптары беҙҙең менән ҡала. Әжәл уны беҙҙең аранан алһа ла, Динис Бүләков ижады тигән оло донъя был яҡты донъяларҙа йәшәйәсәк.

16 март, 1995 йыл.

***Динис иҫтәлегенә***

Индәремә ҡулың ғына һалдың,
Индәремә бәлә һалманың.
Осоп ҡына китер йәнкәйеңде
Тотоп ҡына ҡала алманым.

Ҡарашыңа сарсар күҙҙәремә
Ҡара ҡайғы булып ҡарай яҙ.
Хәлде белешерлек кешеләр аҙ,
Уй-сер бүлешерлек ирҙәр аҙ.
Һин ир булдың, көнсөлдәрҙең теле
Нахаҡ ғәйеп һиңә өйһә лә,
Тертләп китәм,
Үткән саҡта ҡапыл
Берәйһенә: «Динис!» тиһәләр.
«Динис!» ти ҙә, бары шаңдау ҡайта,
Бары шаңдау ҡайта моңайып,
Һин ҡарайһың һымаҡ шул саҡ һынап,
Күҙ йәштәрең аша йылмайып.

1995 г.

## Һинһеҙ килеп еттек етмешеңә

Әле ҡасан ғына Динис Бүләковтың илле йәшен байрам иткәйнек. Әле ҡасан ғына тәбиғәттең иң йәмле сағында яҡташтары яҙыусыны гөрләп торған һабантуй бүләк итеп ҡотлағайны. Халыҡ менән бергә беҙ ҙә шул байрамда ҡыуанып-ҡанатланып йөрөгәйнек.

Динис Бүләковтың илле йәшендә уның ижадын бик юғары баһалап, яңы уңыштар теләп, күпме ихлас һүҙҙәр әйтелгәйне, мәҡәләләр яҙылғайны. Уҡыусыларыбыҙ ҙа, ҡәләмдәштәре лә уны бик хөрмәт итәләр, киләсәктә лә әлеге һымаҡ илһамланып йәшәр, ең һыҙғанып эшләр тип, уға ҙур өмөттәр бағлайҙар ине.

Шул матур тантаналарҙан һуң бер йыл да үтмәне — ниндәй оло ҡайғы килде. Ҡайнап торған тормоштоң үҙәгендә үҙе лә тынғы белмәй йәшәгән һәм ижад иткән, яҙған һүҙе менән дә, яҡты йөҙө менән дә замандаштарын арбаған ошо көслө шәхес, аҫыл ир-азамат ҡапыл яҡты донъяларҙан китеп барыр тип кем уйлаған? Динис Бүләковтың юбилейҙарын унһыҙ үткәрербеҙ, әле һаман да сығып торған китаптарын яҙыусы үҙе күреп ҡыуана алмаҫ тип кем уйлаған?

Күпме юлдарҙы Динисһеҙ үткәндә, ғүмер йомғағын унһыҙ һүткәндә, уның үҙенең янына күпме дуҫтарыбыҙ киткәндә, юҡһыныуҙар һаман йөрәкте өткәндә, етмешенә лә килеп еткәндә яҙыла был юлдар. Сирек быуаттан артыҡ Динис Бүләков менән фекерҙәштәр, дуҫтар булып йәшәнек. Хәҙер уның менән китаптары аша ғына һөйләшәм, иҫтәлектәр донъяһында ғына осрашам.

Хәтирәләр күп, уларҙың һәр береһе күңелгә яҡын. Һүҙҙе Динистең тыуған төйәгенән башлағы килә. Шағирҙы аңларға теләһәгеҙ, унығ тыуған ерендә булығыҙ тип, бик белеп әйткәндәр. Яҙыусы менән дә, башҡа ижадсылар менән дә шул уҡ хәл.

Динис Бүләков йәмле Нөгөш буйындағы Арыҫлан ауылында тыуып үҫкән. Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы, зирәк зиһене, аҡыллы кәңәштәре менән Емельян Пугачевтың иң ышаныслы, иң тоғро арҡаҙашына әйләнгән Кинйә Арыҫлановтың атай-олатайҙары ошо ерҙәрҙә йәшәгән. Азатлыҡ өсөн көрәшкән бөйөк батырҙарҙың төйәгендә тыуыу үҙе бәхет түгелме ни? Уларҙың рухы яңы быуындарға күскән. Уларҙың тоғролоғо һәм ғорурлығы Динистең күңеленә лә бәләкәстән үк айырылғыһыҙ булып береккән.

Динистең әсәһе Нәғимә апай менән минең әсәйем, һирәк булһа ла, ихлас аралашып ҡалдылар, бер-береһен бик ихтирам иттеләр. Нәғимә апай вафат булғас, етемһерәп ҡалған йортта беҙ ғаиләбеҙ менән (әсәйем, ҡатыным, Айҙар улым) 1975 йылдың июнендә егерме көн йәшәнек. Йәй бик ҡоро килде, тамсы ла ямғыр күрмәгән яландар тап-таҡыр булып ҡалды. Бар кеше ҡырылышып япраҡ әҙерләне. Ошо түҙеп торғоһоҙ эҫе көндәрҙә беҙ күберәген Нөгөш буйында булдыҡ. Ҡомонда ҡыҙындыҡ, һыу индек, Айҙар менән ҡармаҡ һалдыҡ. Нөгөштөң Ағиҙелгә ҡойған ерендәге Нәтәҙе тауы башынан улым менән алдыбыҙҙа йәйрәп ятҡан йәмле тәбиғәткә һоҡланып ҡарап торғаныбыҙ, шул бейеклек, шул киңлектәр әле лә күҙ алдымда.

Бер кистә, күҙ бәйләнә башлаған ваҡытта, Айҙар менән балыҡтан ҡайтып килгәндә, Нөгөш өҫтөндәге матурлыҡты күреп, хайран ҡалып туҡталдыҡ. Йылғаға бер яҡтан шәфәҡ ҡыҙыллығы төшкән, икенсе яҡтан ай юлы һуҙылған. Эңерҙең моңһоу балҡышы айҙың уйсанлығы менән ҡушылған. Оноторлоҡ түгел.

Йоҡларға тышта урын әҙерләп алғайныҡ. Төн һайын тиерлек күперҙә йәштәр уйыны башлана. Күперҙе емерерҙәй булып бейегәндәре, йырлаған-көлөшкәндәре яңғырап тора. Бер нисә көнгә Динистәрҙең ғаилә менән ҡайтып тешәүҙәре тормошобоҙға йәм өҫтәй.

Динистең тыуған йортонда йәшәгән көндәрҙә беҙ уның күршеләре, дуҫтары, ихлас ауылдаштары менән аралаштыҡ. Бындағы тәбиғәттең хозурлығы беҙҙе арбаны. Ошонда йәшәгәндә мин күңеле кешеләргә һәр саҡ асыҡ, үҙе тәбиғәткә ғашиҡ Динис Бүләков ижадының тамырҙарын нығыраҡ аңланым һымаҡ.

Тыуған төйәгенең матурлығына, яҡташтарының күңел байлығына һоҡланып та, ғорурланып та йәшәгән, шул хазиналарҙан илһам алып ижад иткән Динис Бүләков ошоларҙы ҡәләмдәш дуҫтарына йышыраҡ күрһәтергә тырышты. Арыҫлан батыр атлап йөрөгән был ерҙәрҙә Рәми Ғариповтың

эҙҙәре лә ҡалған. Нөгөш буйҙары Рәми ағайҙың ҡатыны Надя еңгәнең йырлағанын да, Сафуан менән Фәрҙиә Әлибаевтарҙың моңло тауыштарын да ишеткән. Динис саҡырып килтергән шағирҙар һәм әҙиптәр, сәхнә оҫталары халыҡ алдында ихлас сығыш яһаған.

Дуҫыңдың тыуған яҡтарындағы матурлыҡтарға уның үҙе менән бергә хайран ҡалып йөрөүҙәрҙең ниндәй бәхет икәнлеген йылдар үткәс нығыраҡ аңлайһың. Динис менән бергә кисергән шундай яҡты мәлдәрҙе һағынып хәтерләйем. Уларҙың йышыраҡ булмағанлығы үкендерә. Хәҙер инде был ғәзиз урындарҙан Динисһеҙ үтәбеҙ. Яныбыҙҙа ул үҙе булмағас, был ерҙең балҡыштары һүрелеп ҡалған төҫлө, ауылдаштарының ҡараштарында моңһоулыҡ артҡан төҫлө.

* * *

Дуҫтарыңдың тыуған ерҙәрендә уларҙың үҙҙәре менән бергә йөрөүҙәр онотолмаҫлыҡ сәйәхәт, үҙең өсөн яңы донъяны асыу, шул уҡ ваҡытта һине яҡташтары янына саҡырған юлдашыңды нығыраҡ анлау мөмкинлеге лә ул. Ә бына дуҫтарыңды үҙеңдең тыуған яҡтарыңа алып ҡайтыу тағы ла шатлыҡлыраҡ ваҡиға. Ҡыуаныс та, бик ҙур яуаплылыҡ та.

Динис Бүләков менән байтаҡ юлдарҙы бергә үтергә насип итте. Шул сәфәрҙәрҙең мине иң ныҡ тулҡынландырғаны, әлбиттә, Туҡсоранға сәйәхәт.

Бик ҙур яуаплылыҡ тигән һүҙҙәрҙе тағы ла ҡабатлайым. Башҡортостандың райондарында һәм ҡалаларында, шулай уҡ туғандаш республикаларҙа, хатта Мәскәүҙең үҙендә башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре элегерәк йыш була торғайны. Был һәйбәт традиция, һүлпәнерәк булһа ла, әле лә дауам итә. Шуныһына иғтибар иткәнһегеҙҙер: был оло осрашыуҙарҙы исемләгәндә «әҙәбиәт» һүҙе бөтөнләй төшөп ҡалды. Ә бит элегерәк бындай тантаналар иң элек «әҙәбиәт» тигән һүҙҙән башлана торғайны. Ярар, быныһы башҡа мәсьәлә.

Һүҙем Туҡсоранға сәйәхәт тураһында ине. Башҡортостанда «әҙәбиәт» көндәре район етәкселәре менән, ҡайһы саҡта хөкүмәт кимәлендә алдан әҙерләнеп үткәрелә. Ундай саралар урындағы хужалар өсөн дә, яҙыусылар өсөн дә яңылыҡ түгел, күптән өйрәнелгән эш. Ә бына сит өлкәләрҙә йәшәүсе милләттәштәребеҙ менән осрашыуҙарҙы ойоштороу күпкә ҡатмарлыраҡ. Бында яҙыусыларҙы етәкселәр ҡолас йәйеп көтөп тормай. Яҡташтарым нисек ҡаршы алыр, ҡәҙерле ҡунаҡтар алдында һынатмаҫтармы? Дуҫтарың менән ҡайтҡанда бигерәк тә шуныһы уйландыра.

Туҡсорандағы ауылдар милләтебеҙгә Мөхәмәтша Буранғолов, Дауыт Юлтый, Ғабдулла Амантай, Сәғит Агиш, шулай уҡ яңы быуындарҙан

Сөләймән Муллабаев, Хисмәт Юлдашев һ.б. әҙиптәрҙе, Сәғит Мрәсев, Кәрим Иҙелғужин һымаҡ дәүләт эшмәкәрҙәрен, сәнғәтебеҙгә рәссам Рәхим Ишбулатовты, артист Сәхи Сәйетовты, башҡорт киноһына нигеҙ һалыусы Әмир Абдразаҡовты һ.б. шәхестәрҙе бирһә лә, бындағы халыҡ менән яҙыусыларыбыҙҙың йәнле бәйләнеше оҙаҡ йылдар буйына бөтөнләй булманы.

Гәрсә бында милли мәктәптәр һаҡланды, алтмышынсы йылдарҙың баштарына тиклем балалар бөтә фәндәрҙе лә тик башҡортса уҡыны. Журналдар ҙа һәйбәт тарала торғайны. Мәҫәлән, «Ағиҙел» журналының шанлы замандарында — тиражы 60 мең данаға еткән саҡтарҙа шунын дүрттән бер өлөшөн Башҡортостандан ситтә йәшәүсе башҡорттар алдырҙы. Тик яҙыусыларҙың ғына күрше тарафтарға, шул иҫәптән беҙҙең Туҡсоранға ла юлдары төшмәне.

Дөрөҫ, 1957 йылда Сәғит Агиш үҙенең тыуған ауылы Иҫәнгилдегә Мостай Кәрим менән бер нисә сәғәткә генә ҡайтып әйләнгән. 1959 йылда Кирәй Мәргән етәкселегендә фольклор экспедицияһы үткән. 1968 йылда Рәми Ғарипов менән ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Туҡ, Соран, Ҡырсоран буйҙарындағы башҡорт ауылдарының барыһында ла тиерлек булғайныҡ, көнөнә ике-өс ерҙә халыҡ менән осрашып йөрөгәйнек. Уйлап ҡараһаң, үҙенсә героик рейдта йөрөп ҡайтҡанбыҙ икән. Ләкин былар бик аҙ. Нисәмә тиҫтә йылдар буйына беҙҙең далаларға башҡорт яҙыусылары бөтөнләй аяҡ баҫмаған.

Һикһәненсе йылдарҙа хәлдәр яҡшы яҡҡа үҙгәрә башлағайны. 1984, 1988 йылдарҙа күренекле шағирҙар, ғалимдар, артистар менән Туҡсоран яҡтарында йөрөп ҡайттыҡ, кисәләрҙән һуң халыҡ бик ҡыуанып, үҙенең милләте өсөн ғорурланып, рәхмәттәр әйтеп ҡалды. Ошондай осрашыуҙар артабан да дауам итте. Шуларҙың береһе һәм иң ныҡ иҫтә ҡалғаны, минең өсөн айырыуса тулҡынландырғысы — 1989 йылдың көҙөндәге беҙҙең сәфәребеҙ.

Сәйәхәтебеҙҙең тәүге көнө бик ҡәҙерле яҙмаларҙа — Мостай Кәримдең иҫтәлектәрендә теркәлеп ҡалған. 1990 йылда яҙылған «Сылтыр ҙа ғына сылтыр» тигән хәтирәһен халыҡ шағиры былай башлаған: «Уҙған йәй Ырымбурға барышлай Юшатыр йылғаһы аша сыҡҡанда йөрәгемде ҡапыл сәнсеү алды. Сәбәбе бар. Баязит Бикбайҙың тәү эскән, тәү йөҙгән һыуы ул — Юшатыр. Хәтер тертләп уянды, һағыш яңырҙы. Көтөлмәгән шиғри юлдар уйға килде:

Ул килгәндән бирле,
Дала буйлап,
Бигерәк моңһоу аға Юшатыр.

Юшатырға ҡарап, уны һағынам,
Күңелемде кемдәр бушатыр?

Шөкөр, юлдаштарым һағыш уртаҡлашып, күңел бушатырлыҡ ирҙәр — Рауил Бикбаев, Динис Бүләков, ҡурайсы Юлай Ғәйнетдинов. Туҡталып, шағирҙың тыуған тупрағына баш эйҙек, күгенә рәхмәттәр уҡыныҡ. Юлдаштарым бына тигән. Ләкин ер йөҙөндә лә, күңел түрендә лә берәүҙе берәү алмаштыра алмай».

Баязит Бикбайҙың иҫтәлеге беҙгә фатиха биреп ҡалғайны. Мин юл буйынса, осрашыуҙар нисек үтер, нисек ҡаршыларҙар, тип борсолоп барҙым. Ә Мостай ағайҙың күңелендә, дуҫын һағынып, шиғри юлдар яралған.

Тыуған яҡтарыма бына ниндәй ир-егеттәр, милләтебеҙҙең ғорурлығы булған шәхестәр менән ҡайтып төштөм.

Дүрт көнлөк сәфәребеҙҙең байтаҡ ваҡыты юлға китте, сөнки аралар алыҫ. Шулай ҙа ете ауылда булырға өлгөрҙөк. Мәшһүр Мостай Кәримдең үҙен күреп тыңлай алғанға, Яҙыусылар союзы рәйесе, бары әҫәрҙәре аша таныш булған күренекле прозаик Динис Бүләковтың үҙе менән осрашыуға, былтыр ғына был яҡтарҙа булып киткән Юлай Ғәйнетдиновтың ҡурай моңон, йырҙар тарихын һөйләүен ишетеүгә яҡташтарымдың ни тиклем ҡыуанғандарын аңлаһа, Башҡортостандан ситтә йәшәүсе милләттәштәрем генә тулыһынса аңлар. Был осрашыуҙарға сирек быуат ғүмер үтеп китһә лә, унда ҡатнашҡан яҡташтарым Мостай Кәрим менән аралашып ҡалғанына ғорурлана, Динис Бүләковты, Юлай Ғәйнетдиновты оло хөрмәт менән иҫкә ала.

Был сәфәрҙә лә Динис Бүләков тыңлаусыларҙың хәтеренә уйылырлыҡ сығыштар яһаны, яҡташтарымды беренсе тапҡыр күрһә лә, уларҙы электән белгән һымаҡ, тиҙ генә уртаҡ тел таба белде, һәр ваҡыттағыса илгәҙәк тә, зирәк тә булды.

Юл йөрөгәндә төрлө ҡыҙыҡ хәлдәргә осрайһың. Зөлхизә һеңлем менән Рифат кейәүҙәрҙә ҡунаҡ булғанда уларҙың Френд тигән эте иртүк тороп йөрөгән Мостай ағайҙы балтырынан эләктереп алғайны. Уның яраһын эргәләге медпунктта тиҙ генә бәйләй һалдылар. Был ваҡиға онотолған да һымаҡ ине. Әммә ике айҙан һуң минең «Соран буйындағы Френдҡа» тигән шиғырым тыуҙы.

Даланы тәү күргән кешене дала киңлектәре хайран итә. Ҡараш иңләмәҫлек бындай күренештәр беҙҙең Дөйөм һырт (Общий Сырт) тип йөрөтөлгән ерҙәргә бигерәк тә хас. Тип-тигеҙ генә йәйрәп ятҡан далала тиҫтә саҡрымдарға һуҙылған бындай иркенлекте күреп булмай. Ә беҙҙә яңы бейеклеккә артылыуың була — алдында ғүмерҙә онотолмаҫлыҡ ғәләмәт панорама асыла. Иҫәнгилдегә барғанда Туҡ менән Ҡырсоранды айырған

һыртта туҡтап, землемер бағанаһы янында илаһи киңлектәргә һоҡланып торғайныҡ.

Көндәре лә иҫ киткес ине бит! Ысын алтын көҙ балҡып тора. Әйтерһең дә әбейҙәр сыуағы түгел, йылы йәй мәле. Сентябрь булһа ла, Актин ауылы янында Туҡта мин һыу инмәйенсә түҙмәнем.

Далам киңлектәрен, яҡташтарымдың йомарт күңелен, ҡунаҡсыллығын, әҙәбиәтте, сәнғәтте шул тиклем яратыуҙарын юлдаштарым бик хуш күрҙе. Шуға ҡыуанып йөрөнөм, ҡыуанып ҡайттым. Әле лә ихлас ҡыуанып иҫкә алам.

* * *

Динис Бүләковты күреп белгәндәр иң элек уның яҡты йөҙлө, нурлы кеше булыуын әйтә. Үҙе матур ир-егет ине, донъяны ла матур итеп күрергә теләне. Икенсе китабын йәш яҙыусы иң уңышлы хикәйәләренең береһенең исеме менән «Ауылымдың аҡ өйҙәре» тип сығарғайны. Тормоштағы яҡтылыҡты һаҡлау һәм яҡлау — әҙип ошо оло маҡсаттар менән йәшәне.

Динис һәр ваҡыт башҡаларға эскерһеҙ ярҙам итергә әҙер ине. Янындағы шна түгел, әллә ҡайҙағы һәләкәт-фажиғәләрҙе йөрәге һыҙланып кисерҙе. 1988 йылдың аҙағында Әрмәнстанда ер тетрәгәндә Динис ундағы кешеләрҙең ҡайғыһын уртаҡлашырға ашыҡты, етемдәрҙең яҙмышын хәстәрләне.

Совет осоронда әҙиптәргә әҫәрҙәрендә ыңғай герой ижад итергә тигән талап ҡуйылды. Урынлы талап. Кешеләргә үрнәк булырлыҡ образ тыуҙырыу яҙыусы өсөн оло ҡаҙаныш. Бик һирәкләп булһа ла, әҙәбиәттә ундай әҫәрҙәр ҙә яҙылды. Китаптарҙа тасуирланған «өлгөләрҙән» юғарыраҡ торған шәхестәр тормоштоң үҙендә лә осрай. Улар һирәк, әммә бар.

Халыҡтың таянысы булған шәхес тигән заттың күп сифаттарын Динис Бүләков үҙенә туплағайны. Олпатлыҡ менән ябайлыҡ был шәхестең яҙмышында үҙ-ара һис бер ҡаршылыҡһыҙ татыу йәшәне. Йомарт, әммә талапсан. Ихлас, әммә бер ҡатлы түгел. Аҡыллы, принципиаль етәксе. Башбаштаҡлыҡҡа, екеренеүҙәргә юл ҡуймай, һәр кемгә кәрәкле һүҙҙе таба белә. Илдәге ижтимағи үҙгәрештәрҙе бик һиҙгер тоя. Ығы-зығы менән ваҡланмай, тик ҙур эштәргә тотона.

Ысынлап та, Динис һымаҡ көслөләр ваҡсыл булмай. Көслөләргә көнсөллөк ят нәмә. «Киң донъяға һыймай ваҡ кешеләр, киң күңелгә һыймай ваҡ тойғолар».

Мин яҡын фекерҙәшемде һис кенә лә идеаллаштырырға йыйынмайым. Динис ер кешеһе, заман улы булып йәшәне. Хаталар ҙа, алданыу-хыянаттар ҙа уны урап үтмәне. Ләкин ошоларҙы сабыр кисерә белде.



***Бөрйәндә Башҡорт әҙәбиәте көндәре. 1990 йыл.***

Яҙыусы менән аралашырға өлгөрмәгән яңы быуын уҡыусылары һаҡланып ҡалған фоторәсемдәрҙән алсаҡ ҡарашлы, һөйкөмлө, матур кешене күрер. Бигерәк тә йәшерәк саҡтарында төшкәндәрендә күпме көс-дәрт, күҙҙәрендә ихласлыҡ һәм ышаныс түгелеп тора.

Ләкин мин Динис Бүләковтың ауыр кисерештәр менән йәшәгән һағышлы, борсоулы саҡтарын да байтаҡ күрҙем. Шул бойоҡ мәлдәре фотоларында ла сағылған. Белгертмәҫкә тырышһа ла, хәүеф-хафалары, һағышлы уйҙары йөҙөнә сыҡҡан. Йылдар уҙған һайын уның моңһоу уйҙары арта барҙы.

Ғүмеренең һуңғы ун йылы донъяларҙың аҫтын өҫкә килтергән ҡәһәрле осорға тура килде. 1985—1995 йылдарҙа халҡыбыҙ нимәләр генә кисермәне! Таҫма телле Горбачевтың үҙгәртеп ҡороу тигән һөрәне менән башланған эштәре емереү-ҡырыуға әйләнде. КПСС бөттө, донъялағы иң ҡеүәтле ике илдең береһе булған СССР тарҡалды. Кисәге күпме ватандаштар башҡа илдәрҙәге күршеләр хәлендә ҡалды. Донъя тарихында булмаған енәйәт эшләнде: Рәсәй Президенты Ельцин үҙ иленең парламентын тупҡа тотто. Тирандың гонаһтары уның менән генә сикләнмәне, уның ҡараҡтары ил байлығын таларға тотонды.

Динис Бүләковтың ҙур-ҙур вазифалар башҡарыуы ла, тынғыһыҙ йәмәғәт эшмәкәрлеге лә һәм, иң мөһиме, — шул осорҙағы ҡатмарлы ваҡиғаларҙы сағылдырған киң ҡоласлы, тормошсан өс роман ижад итеүе лә нәҡ ошо һәләкәтле ун йыл эсендә булды бит. Ул бик уңған һәм һәләтле яҙыусы ғына түгел, хәстәрлекле етәксе, оҫта ойоштороусы, яңы дәүләтселек өсөн көрәшеүсе, Башҡортостандағы ижтимағи ваҡиғаларҙың үҙәгендә

йәшәүсе үткер ҡарашлы сәйәсмән дә ине. Ул Башҡортостан Яҙыусылар союзының берҙәмлеген һаҡлап ҡалыу өсөн бик күп көс һалды. Был ойошманың район-ҡалаларҙа бер нисә яңы бүлеген асыу нәҡ уның эшмәкәрлеге, етәкселәр менән уртаҡ тел таба белеүе арҡаһында ғына мөмкин булды.

Һәр саҡ йәштәр менән аралашты, төрлө ижади саралар йыш үткәрелде. Әҙәбиәттең киләсәк яҙмышын уйлап йәшәүен Мәскәүҙәге атаҡлы Әҙәбиәт институтында беҙҙең йәштәрҙән бер төркөм тәржемәселәрҙе уҡытыуҙы ойоштороуы ла раҫлай.

Уҙған быуаттың һикһәненсе йылдары аҙағында — туҡһанынсы йылдар башында башҡорт милли хәрәкәте республикалағы ижтимағи ваҡиғаларға көслө йоғонто яһаны. Ғалимдарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ, бик күп зыялыларыбыҙ ошо хәрәкәттең башында йөрөнөләр. Улар йыш ҡына Яҙыусылар союзына, уның етәксеһе Динис Бүләков янына тупланды. Мәҫәлән, милләтебеҙҙең юлбашсыһы, Башҡортостан республикаһын ойоштороу өсөн күпме ауырлыҡтарҙы еңеп сыҡҡан дәүләт эшмәкәре, артабан донъя күләмендә абруй яулаған тарихсы Зәки Вәлидиҙе халҡыбыҙға яңынан ҡайтарыу юлында бик мөһим аҙым булған сараны — уның йөҙ йыллыҡ юбилейы тантаналарын үткәреүҙә, исемен мәңгеләштереү буйынса унан һуңғы ҙур ҡаҙаныштарға ирешеүҙә Динис Бүләков төп ойоштороусыларҙың береһе булды.

Һанай башлаһаң, бындай эштәр күп. Яҙыусы, ваҡыт дистанцияһының үткәнен көтмәйенсә, әҫәрҙәрендә, бигерәк тә өс романында заман хаҡындағы һүҙен нәҡ үҙ ваҡытында — ошо заман мөхитендә ҡанатланып та, һыҙланып та, даулашып-яғалашып та, еңеп-еңелеп тә йәшәгән саҡта әйтә алды. Әммә замандың аяуһыҙлығын, йәшәйештең һәм кеше тәбиғәтенең асылын тәрәндәнерәк аңлау Динистең йөрәген нығыраҡ яраланы, ҡарашында моңһоулыҡты арттырҙы.

1983—1984 йылдарҙа мин ошо шиғырымды яҙғайным:

Хыялдарҙа эҙләп күк диңгеҙҙең
Аҡ карабын, алһыу елкәнен,
Онотабыҙ ерҙә кешеләрҙең
Мал көткәнен, иген иккәнен —
Ошо үҙе тормош икәнен.

Уратҡанда ҡайсаҡ ығы-зығы,
Ауырлыҡтар баҫып киткәндә,

Әйткеләнем:
Шул да булған тормош!
Башҡасараҡ беҙҙең көткәндәр.

Уйламайса ыскындырған һүҙҙән
Кешеләрҙең күңеле кителде.
Әллә ниндәй тормош эҙләнем мин...
Ошо үҙе — тормош бит инде.

Күпме эште, алда эшләнер тип.
Иртәгәһе көнгә ҡалдырҙым.
Яҡындағын ҡайғыртаһы ерҙә
Алыҫтағын уйлап ҡаңғырҙым.

Донъя мәшәҡәте ялыҡтырып,
Хыял менән күңел тулышһа,
Әйттем тағы:
Былар тормошмо ни?!
Алда әле беҙҙең тормоштар...

Йөрәк һыҙландырып,
Ғүмеремдең
Аҫыл мәле үтеп киткәндә,
Аңланым мин: һәр ғәҙәти сәғәт —
Ошо үҙе тормош икән дә.

Дуҫыма арналған, тарихтағы киҫкен боролоштар алдынан яҙылған был шиғырҙың башына «Динискә» тип ҡуйылған. Киләсәккә ҙур өмөттәр бағлағанбыҙ, донъяға ныҡлы ышаныс менән баҡҡанбыҙ. Күпме ҡанатланыу, эҙләнеү, ынтылыш! Шулай ҙа ул ваҡыттарҙа күберәк романтик хыялдар менән йәшәлгән.

Шиғырымда «Башҡасараҡ беҙҙең көткәндәр» тигәнмен. Алдағы көндәребеҙ, ысынлап та, башҡасараҡ килде. Ләкин беҙ көткәнсә килмәне. Ер тетрәүенән дә яманыраҡ тарихи тетрәүҙәр беҙҙең иллюзияларҙы емерҙе, ҡыйралыштар уртаһында буш хыялдар таралып, бушлыҡҡа осто. Алдыбыҙҙа ысынбарлыҡ бөтә ҡаршылыҡтарында асылды, беҙҙе романтиктарҙан реалис-тар итте. Динистең ауылындағы аҡ өйҙәр аҡ көйөнсә ҡалһа ла, күңелдәр ҡараға буялды. Тыуған ерендә килмешәккә әйләнгән, илде ботарлап талаған әҙәмдәр, иманһыҙҙар күбәйҙе. Хеҙмәт ритмы боҙолдо, илде аритмия

ҡалтыратты, әхлаҡ ҡаҡшаны. Был ваҡиғалар башҡорт әҙәбиәтендә иң элек Динис Бүләковтың «Килмешәк», «Ғүмер бер генә», «Туҙҙырылған тамуҡ» романдарында, образлы йылъяҙма булып, киләсәк өсөн теркәлеп ҡалды.

Динис Бүләков болғауыр йылдарҙа ла киләсәккә өмөт-ышанысын юғалтманы, халҡын һаман да алға әйҙәне. Уның 1995 йылды сәләмләп яҙылған һуңғы мәҡәләһе «Йондоҙҙарға ҡарап йәшәйек!» тип атала. Ундағы һүҙҙәр әле генә яҙылған һымаҡ: «Бөгөнгө ялған демократия килтергән афәтте нисек анларға һуң?», «Власть руленә йәбешеүселәрҙең көрәшлегендә халыҡтарҙың ни ғәйебе бар һуң?», «Ниндәйҙер яңы тормош ҡорам тип, ни өсөн тотош бер илде, уның тиҫтәләгән халыҡтарын шулай хурлыҡҡа, түбәнселеккә, бөлгөнлөккә, хәйерселеккә, ыҙғыш-талашҡа ғына түгел, хатта ҡойошҡа дусар итергә кәрәк булды һуң?» Бындай өҙөктәр менән генә сикләнеп булмай, мәҡәләне яңынан тулыһынса баҫтырырға кәрәк. Унда күтәрелгән мәсьәләләр әле лә хәл ителмәгән, яҙыусының ҡайһы бер һүҙҙәре бөгөн хатта элеккенән дә актуалерәк.

Динис Бүләковтың йөрәген бына ниндәй хәлдәр һыҙлатҡан. Яҙыусы үҙе әйткәнсә, ғүмер бер генә. Әммә йөрәктә берәү генә, барыһы ла шунда йыйыла. Йөрәктең дә түҙер сиктәре бар.

«Йондоҙҙарға ҡарап йәшәйек!» тигән яңы йыл ҡотлауында ватандаштарына яҙыусы ошолай тип өндәшкәйне: «Теләктәрем изге, улар милләттәштәремә ҡағыла: әйҙәгеҙ әле 1995 йылда, тарихта беренсе тапҡыр үткәреләсәк Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы йылында, берҙәмерәк йәшәйек, йөҙ ҡыҙартырлыҡ булмаһын! Берҙәмлектә — көс, татыулыҡта — бәрәкәт. Милләтебеҙ кәмеү яғына түгел, артыу яғына китһен, сәләмәт балалар үҫтерәйек». Артабан да бик изге теләктәр әйтелә. Тағы ла ҡабатлайым: был мәҡәләне яңынан баҫтырырға кәрәк.

Башҡорттарҙың бөтә донъя ҡоролтайында Динис Бүләков ни тиклем кинәнестәр менән йөрөр ине. Насип булманы. Яҙғандары хәҙер уның васыяты һымаҡ ишетелә.

* * *

Ғүмер бер генә килһә лә, яҙыусының яҙмышы башҡасараҡ. Әҙиптең үлемһеҙлеге уның үлеменән һуң башлана, тиҙәр. Ләкин бының өсөн тос ижад, киләсәк быуындарҙың да рухи донъяһында йәшәрлек әҫәрҙәр ҡалырға тейеш.

Динис Бүләковтың хикәйәләре, повестары, романдары ваҡытлы матбуғатта ла, айырым йыйынтыҡтар булып та йыш баҫылды, тотош әҙәбиәттең ҡаҙаныштарынан һаналып, юғары баһаланды. Китаптары Өфөлә генә түгел, Мәскәүҙә, Ҡазанда донъя күрҙе.

«Туҙҙырылған тамуҡ» романы әҙиптең вафатынан һуң айырым китап булып сыҡты. «Килмешәк» романының русса тәржемәһе Мәскәүҙә «Современный писатель» нәшриәтендә донъя күрҙе. Һайланма әҫәрҙәренең томдары укыусыларға барып етте. Замандаштарының, ҡәләмдәштәренең хәтирәләре, уға арналған шиғырҙар «Динис Бүләков хаҡында иҫтәлектәр» тигән бай йөкмәткеле китапҡа тупланды.

2012 йылда Динис Бүләковтың һүҙе Төркиәгә етеп, унан әйләнеп ҡайтты. ТЮРКСОЙ-ҙың ойоштороуы буйынса «Килмешәк», «Ғүмер бер генә» романдары төрөк ҡатыны Ниғар Ҡалҡандың тәржемәһендә ике матур китап булып баҫылып сыҡты. Өфөлә, Мәләүездә был баҫмаларҙың презентацияһы ысын байрамға әйләнде. Бер үк яҙыусының ике романының бер юлы ике китап булып бер сит телдә баҫылып сығыуы — бындай ваҡиғаның әлегә тиклем башҡорт әҙәбиәтендә булғаны юҡ ине. Башҡа әҙәбиәттәрҙә лә йыш буламы икән? Был ике китаптың нәшер ителеүе башҡорт әҙәбиәтенең халыҡ-ара бәйләнештәрен үҫтереүсе мөһим ваҡиға булып тарихта ҡаласаҡ.

Тимәк, Динис Бүләковтың һүҙе алыҫтарға барып етә, киләсәккә үтә. Әҙип тураһындағы иҫтәлектәр китабынан бер өҙөк килтерәм. Динистең ауылдашы, оҙаҡ йылдар «Нөгөш» колхозының етәксеһе булған Миҙхәт Таштимеров былай тип һөйләй: «Әлеге көндә музей ауылыбыҙҙың ҡото булып тора, ниндәй генә сара үткәрергә булһаҡ та, музей ҡатнашмай ҡалмай. Динис Бүләковтың исемен мәңгеләштереү буйынса байтаҡ эштәр эшләнде: Арыҫлан урта мәктәбе уның исемен йөрөтә, Нөгөш һыуһаҡлағысында, туристарҙы шатландырып, «Динис Бүләков» исемендәге катер йөҙә, Мәләүез ҡалаһында, Смаҡ, Арыҫлан ауылдарындағы урамдарға исеме бирелде. 60 йәше тулған көндәрҙә мәктәп ихатаһында Динис Бүләковтың бюсы асылды. Йыл һайын 18 майҙа, тыуған көнөндә, мәктәп балалары, ауыл халҡы һәм яҙыусылар ҡатнашлығында хәтер кисәләре, әҙиптең ижадына арналған уҡыуҙар үткәрелә. Онотмай ҙа, онота ла алмай тыуған иле аҫыл улын».

Динис Бүләковтың исемен мәңгеләштереү буйынса күп изге эштәр башҡарған яҡташтарына рәхмәт. Бигерәк тә яҙыусының һөйөклө ҡатыны Рәйлә Мөхәмәт ҡыҙына рәхмәт. Ул һәр бер көнөн Динис исеме менән башлай, Динис исеме менән тамамлай. Китаптарын әҙерләй, замандаштарының иҫтәлектәрен туплай. Һаулығы буйынса юл йөрөүе хәҙер уға ауырлашһа ла, Мәләүез яҡтарында нисек тә булырға тырыша. Ҡыҙҙары Ләйсән, Зөһрә, Миләүшә аталарының иҫтәлеге менән йәшәй, әҙәби мираҫын барлауҙа әсәләренә һәр саҡ ярҙамлаша.

Яҙыусының тыуған ауылындағы музейында булғанда мин Динистең сәңгелдәген күргәйнем, уның хаҡында бик фәһемле тарих һөйләгәйнеләр. 2004 йылдың 18 майында — Динис Бүләковтың тыуған көнөндә Милли йәштәр театрында уның 60 йыллыҡ кисәһен асҡанда мин шуларҙы иҫкә төшөрҙөм: “Ҡәҙерләй һәм хәтерләй беләбеҙ икән, моңһоу булһа ла, — бөгөн барыбер байрам. Кешенең тормошо сәңгелдәктән башлана. Бишек — әҙәм балаһының тәүге төйәге. Мин дә һүҙемде Динистең ҡотло сәңгелдәгенән башламаҡсымын. Динестең ҡотло бишеген уның музейында күрҙем. Уның ауылында бер ғаиләлә бер-бер артлы өс бала тыуа. Тыуып торалар, үлеп торалар. Шунан был ата-әсә Динистең сәңгелдәген ала. Шунда алты балалары иҫән-һау аунап үҫә. Ошо бишектә ауылдың утыҙлап сабыйын бәүелтәләр. Динис булған ер һәр ваҡыт ҡотло булды”. Дуҫымдың алтмыш йыллыҡ юбилейындағы һүҙемде ошолай башлағайным. Етмеш йыллығы алдынан да шул ҡотло бишекте иҫкә төшөрәм. Динис Бүләковтың бәүелгән сәңгелдәге лә, атлап йөрөгән эҙҙәре лә, әйткән - яҙған һүҙҙәре лә ҡотло булды.

Февраль, 2014.

**Ҡотлогилдина, З. Балалар әҙәбиәтенә тоғро ҡалды [Текст]**
**/ З. Ҡотлогилдина**
**// Йәншишмә. – 2014. – 16 май. – Б. 4.**

***Күренекле яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Динис Бүләковтың тыуыуына - 70 йыл***

***“Йәншишмә”лә алты ай дауамында үҙенең әҫәрен баҫтырған яҙыусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Ошо гәзиттә ҡырҡ йыл эшләү дәүерендә, хәтерем яңылышмаһа, улар икәү генә булды. Береһе — Фәрит Иҫәнғолов. «Ҡайҙа һеҙ, Питер малайҙары?» романы менән балалар тәү башлап «Башҡортостан пионеры»нда (ул йылдарҙа гәзит шулай аталды) танышты. Университетты тамамлап, бында яңы эшләй башлаған сағым ине.***

***Икенсеһе — Динис Бүләков. «Тыҡрыҡ башы беҙҙең биләмә» тигән повесы 1995 йылдың 21 апрелендә баҫыла башлап, 25 октябрендә тамамланды. Тотош алты ай буйына «Йәншишмә» уҡыусылары үҙҙәре һымаҡ тиҫтерҙәренең тормошо менән йәшәне, улар өсөн һөйөндө, көйөндө.***

Был повесть хаҡында айырым һөйләп китеү кәрәктер. Сөнки ул - Динис Бүләковтың һуңғы әҫәре. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: яҙыусы үҙенең иң тәүге хикәйәһен дә балалар гәзитендә баҫтырған. 1959 йылда «Башҡортостан

пионеры»нда «Маҡтансыҡ Зариф» донъя күргән. Аҙаҡ ғүмере буйына балалар әҙәбиәтенә тоғро ҡалды. Бигерәк тә «Упҡын ситендә бейеү», «Саған япраҡ яңырта» исемле китаптарын үҫмерҙәр яратып уҡыны. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Башҡортостан телевидение һәм радио тапшырыуҙары комитеты рәйесе кеүек яуаплы вазифаларҙа эшләүенә ҡарамаҫтан, ул ижад менән шөғөлләнергә лә ваҡыт тапты. Хатта тап ошо тынғыһыҙ мәлдәрендә «Килмешәк», «Ғүмер бер генә», «Туҙҙырылған тамуҡ» кеүек ҡыйыу романдарын тыуҙырҙы. «Ғүмер бер генә» әҫәре өсөн Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһына лайыҡ булды.

1994 йылдың май айында Динис Бүләков үҙенең 50 йәшлек юбилейы уңайынан биргән интервьюһында «Йәншишмә» гәзите өсөн махсус повесть яҙырға вәғәҙә иткәйне. Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ быға ышанып та бөтмәнек. Вәғәҙә биреүселәр күп булды, әммә әҫәрҙәрен генә көтөп ала алманыҡ. Ләкин Динис Бүләков әйткән һүҙенә тоғро ҡала торғандарҙан булып сыҡты. Гәзитебеҙҙең юбилейына килгәндә, магнитофон бүләк итеп: «Һеҙгә тигән повесты тамамлап киләм, эпилогы ғына ҡалды», — тине.  Ә 5 мартта киске сәғәт 11-ҙәр тирәһендә әҫәренә һуңғы нөктәне ҡуйғас, ҡатынына: «Бына, Рәйлә, повесты бөтөрҙөм, 157 бит булды. Зөһрә алдында егет булып ҡалдым, биргән вәғәҙәмде үтәнем. Ҡара әле, кем шулай яҙа: ҡаҙ тештәре кеүек бит», — тип шаяртҡан, бөхтә һәм таҙа итеп яҙылған ҡағыҙ биттәренә күрһәтеп.

Ысынлап та, Динис Бүләковтың ҡульяҙмаһына һоҡланмау мөмкин түгел. Башта оҙаҡ уйлап йөрөгәндән һуң ике бүлеген алып ташлап, аҙаҡ бер төҙәтеүһеҙ ултырған да яҙған. Фекер ебе ағылған да ағылған.

Ҡульяҙмаһын алырға барғанда Рәйлә апай Динис ағайҙың ҡағыҙҙары араһынан «Тыҡрыҡ башы - беҙҙең биләмә» повесының схемаһын күрһәтте. Мин әҫәр яҙыуҙа шундай алым ҡулланылыуын тәүгә күреп аптыраным. Ҡағыҙ битендә, шәжәрәләге һымаҡ, геройҙарҙың үҙ-ара бәйләнеше уҡтар ярҙамында күрһәтелгән. Һәр сюжет һыҙығы билдәләнгән. Шул ваҡиғалар барыһы ла башта уйланылған, аҙаҡ ҡына тотош әҫәр булып яҙылған.

Ләкин яҙыусыға был повесының балалар күңеленә барып етеүен күрергә насип булманы. Күп тә үтмәй, 14 мартта, көтмәгәндә арабыҙҙан китте. Башҡортостан йәмәғәтселегенең, яҙыусыларҙың, әҙәбиәт һөйөүселәрҙең, бигерәк тә ғаиләһенең, оло ҡайғы кисереүенә ҡарамаҫтан, мин Рәйлә апайға  шылтыратып, Динис ағайҙың әҫәрен һорап алдым. Һәм уның вафатына 40 көн тигәндә «Йәншишмә» гәзитендә «Тыҡрыҡ башы - беҙҙең биләмә» тигән повесын баҫа башланыҡ.

...18 майҙа күренекле яҙыусы, дәүләт эшмәкәре Динис Бүләковҡа 70 йәш тулыр ине. Әммә ул арабыҙҙан бик иртә, илле йәшен генә тултырып, китеп барҙы. Яҙыусы үҙе үлһә лә, әҫәрҙәре мәңгелеккә уҡыусыларға ҡала.

Улар - үлемһеҙ. Динис Бүләковтың тыуған яғы — Мәләүез районының Смаҡ ауылындағы мәктәптә уның музейы булдырылған һәм бюсы ҡуйылған. Яҡшы өлгәшкән балаларға уның исемендәге премиялар тапшырыла.

Быйыл уҡыусылар Динис Бүләков әҫәрҙәре буйынса иншалар яҙа. Әҙиптең тыуған яғында хәтер һәм ҡәҙер кисәһе үтә. Өфөнән барған ҡәләмдәштәре ауыл халҡы алдында әҙип хаҡындағы иҫтәлектәре менән уртаҡлашасаҡ, бюсына сәскәләр һаласаҡ.

Динис Бүләковтың өс ҡыҙы ла аталарының тыуған яғына киләсәк. Әле өлкән ҡыҙы Ләйсән — табип, үҙе өс бала тәрбиәләй, Зөһрәһе — радиожурналист, бер ҡыҙ үҫтерә. Кесеһе Миләүшә мәктәпкә бармаҫ борон ук шиғырҙар яҙа ине, улар «Аҡбуҙат» журналында ла баҫылып сыҡты. Әле иһә дәүләт эшендә, ике балаға әсәй. Әкренләп кенә ижад менән шөғөлләнеүен дауам итә, яҙмай тороп булмай икән, ти. Бәлки, киләсәктә атаһының юлын дауам итеп, ныҡлап ижадҡа тотонор. Ни булһа ла, Динис Бүләковтың ғүмере өс ҡыҙында, алты ейән-ейәнсәрендә, меңәрләгән китап һөйөүселәр, яҡташтарының хәтерендә дауам итә. «Ғүмер бер генә» тип әҫәр яҙһа ла, уның ижады, ғүмерен оҙайтып, меңдәрсә кешеләр йөрәгендә йәшәй.

Зөһрә Ҡотлогилдина.

**Абдрахманова, Л. Тағы килде яҙҙар ... [Текст] / Л. Абдрахманова // Көнгәк. - 2015. - 26 май. – Б. 1, 4.**

***Күренекле яҡташыбыҙ, билдәле яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Динис Бүләковтың Хәтер кисәһе шулай тип аталды.***

***Башкорт әҙәбиәте, йәмәғәтселек, яҙыусының балалары, яҡындары, дуҫтары һәм яҡташтары егерменсе тапҡыр яҙҙы Динис Бүләковһыҙ ҡаршы алды. Уттай ҡыҙыу яҙғы сәсеү, бакса эштәре, мәктәптәрҙә һуңғы ҡыңғырауға, дәүләт имтихандарына әҙерлек осоро булһа ла, Динис Мөҙәрис улының тыуған көнө айҡанлы уның яҡты иҫтәлеген иҫкә алыу көнөн яҡташтары йыл һайын киң билдәләй.***

Башҡорт әҙәбиәтендә сағыу эҙ, бай мираҫ ҡалдырған әҙиптең ижадташ дуҫтары, яҡташтары быйыл да яҙыусының тыуған төйәгенә - Смаҡ ауылына йыйылды. Хәтер кисәһе Динис Бүләков исемен йөрөткән мәктәп алдындағы яҡташыбыҙ бюсына сәскә һалыуҙан башланды. Белем биреү учреждениеһы коллективы данлы яҡташының исемен лайыҡлы йөрөтә. Йыл һайын уның рухи мираҫын популярлаштырыу, исемен быуындан-быуынға тапшырыу йәһәтенән конкурстар, класс сәғәттәре үткәрәләр. Район-ҡала, республика кимәлендәге сараларҙа әүҙем ҡатнашып, юғары күрһәткестәр яулайҙар.

Уҡыусыларҙың уңыштары ҡаҙаныштары менән таныштырыу маҡсатында баш ҡала ҡунаҡтарына, атап әйткәндә, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы Рауил Бикбаев, уның тормош иптәше Фәриҙә ханым, яҡташыбыҙ, филология фәндәре докторы, профессор Фәнил Күзбәков, яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Ғәлим Хисамов, Башҡортостан Милли әҙәбиәт музейы белгесе Альмира Шәрипова, яҡташыбыҙ, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры әҙәбиәт бүлегендә оҙаҡ йылдар әҙәбиәт белгесе булып эшләгән, Сафуан Әлибаевтың тормош иптәше Фәрҙиә Әлибаева, Шәйхзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты, "Юлдаш" радиоһы хеҙмәткәре Фәрзәнә Аҡбулатоваға бай тарихлы мәктәпкә экскурсия ойошторолдо. Смаҡ ауылы халҡының үҙ көсө менән төҙөлгән мәсеттә Динис Мөҙәрис улы, уның тормош иптәше Рәйлә Мөхәммәт ҡыҙы рух-тарына доға ҡылғас, мәҙәниәт йортона юлландылар.

Динис Бүләковты иҫкә алыу сараһы йыл һайын һағышлы нотала булһа ла, һәр ваҡыт оло байрамға әйләнә. Был хаҡта Арыҫлан ауылы биләмәһе хакимиәте башлығы Айрат Шәйәхмәтов та үҙенең сығышында әйгеп үтте: "Моңһоу байрам булһа ла, беҙ уны көтөп алабыҙ. Унан күптәрҙең күңеле байып, эшкә дәрт, илһам алып ҡайталыр. Яҡташыбыҙҙың әҫәрҙәрендәге геройҙар кеүек артабанда намыҫлы, ғәҙел, тырыш, эшһөйәр булыу теләге уяналыр. Беҙҙең бурыс - Динис Бүләков исеменә тап төшөрмәҫкә!".

Район Хакимиәте башлығының эске һәм кадрҙар сәйәсәте буйынса урынбаҫары Рита Самиғуллина яҡташыбыҙҙың әҙәбиттә тотҡан урыны, уның ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә бай рухи мираҫ ҡалдырыуы, үлемһеҙ әҫәрҙәр ижад итеүсенең исемен мәңгеләштереү буйынса башҡарылған эштәр тураһында бәйән итте. Динис Мөҙәрис улын онотмай яҡташтары. Уның тормош юлына, ижадына арналған кисәләр, конференциялар, осрашыуҙар ойошторола.

Тыуған ауылы Арыҫланда, Смаҡта һәм Мәләүез ҡалаһында уның исемен йөрөткән урамдар бар. Исемен йөрөткән мәктәп ихатаһында яҙыусы бюсы ҡуйылған. Мәҙәниәт йортонда музейы эшләй, Нөгөш һыуһаҡлағысында аҡҡош кеүек матур пароходы тулҡындар яра. Бынан тыш, Смаҡ мәктәбенең иң алдынғы уҡыусыларына Динис Бүләков исемендәге премия тапшырыла. Быйыл был премияға түбәндәге укыусылар лайыҡ булды: Рәмилә Байгилдина, Гөлшат Таштимерова, Дания Әлмөхәмәтова, Батыр Юлмөхәмәтов, Алмаз Бураҡанов, Гүзәлиә Мәксүтова, Ильяс Кучекаев, Рәил Хәйҙәров, Миләүшә Аҫылбаева, Айтуған Таштимеров һәм Рәйлә Хөсәйенова. Яҡшы билдәләргә генә уҡыған, мәктәп, район тормошонда әүҙем ҡатнашҡан, төрлө ижади-мәҙәни конкурстарҙа юғары һөҙөмтәләр яулаған был

уҡыусыларға премияны мәктәп директоры Светлана Таштимерова һәм Динис ағайҙың уртансы ҡыҙы Зөһрә Бүләкова тапшырҙы.



***Динис Бүләковтың ҡәләмдәш дуҫтары яҙыусының бюсы янында***

Артабан "Мәләүез таңдары" әҙәби берекмә етәксеһе Мәрйәм Күсмәева, Хәлиҙә Шәйәхмәтова Динис Мөҙәрис улын юҡһынып яҙған шиғырҙарын уҡыны, күңел түрендә һаҡлаған иҫтәлектәре менән уртаҡлашты. Баш ҡаланан килгән ҡәләмдәш һәм ғаилә дуҫтары Рауил Бикбаев, Фәнил Күзбәков, Ғәлим Хисамов, Альмира Шәрипова һәм Фәрҙиә Әлибаевалар ҙа билдәле әҙип менән бер рәттән уның һөйөклө ҡатыны Рәйлә Бүләкованы ла хөрмәтләп иҫкә алды. Рәйлә апай, ысын мәғәнәһендә, маҡтау һүҙҙәренә лайыҡ шәхес. Тормош иптәше вафат булғас уның ҡулъяҙмаларын, иҫтәлектәрен баҫтырҙы, йыйынтыҡтар сығарҙы,тыуған ауылы, яҡташтары менән бәйләнеште нығытты, исемен мәңгеләштереү буйынса бик күп эшләне. Йыл һайын Хәтер кисәһен үткәреү ҙә - нәҡ уның башланғысы. Был хаҡта кисәгә килгән яҙыусының ҡыҙҙары Ләйсән, Зөһрә, Миләүшә лә үҙҙәренең сығышында кисәһен билдәләп үтте. Әсәйҙәре һалған һуҡмаҡты артабан да дауам итергә кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алдылар, атайҙары хөрмәтенә матур кисә

ойошторғандары өсөн район Хакимиәтенә, ауыл биләмәһе халҡына, мәктәп коллективына, уҡыусыларға рәхмәт белдерҙеләр.



***Сәхнәлә – “Нөгөш ынйылары” өлгөлө фольклор коллективы.***

Сығыштар Динис Бүләковҡа арналған шиғырҙар, Нәсимә Суҡбаева, Булат Биков, Фәнил Яманаев, Азамат Суҡбаев һәм Өфө ҡунағы, "Юлдаш" радиоһы алып барыусыһы, популяр йырсы Филүс Ҡасимов башҡарыуында йыр, ҡурай моңо, бейеүҙәр менән үрелеп барҙы.

Мәктәптең йөҙөк ҡашы, яңыраҡ ҡына "өлгөлө коллектив" маҡтаулы исеменә лайыҡ булған “Нөгөш ынйылары” фольклор төркөмө “Һыу юлы” йолаһын байрамын сәхнәләштерҙе. Башҡорт әҙәбиәтенең алтын бағанаһы булған яҡташ яҙыусыбыҙ Динис Бүләковтың Хәтер кисәһе тотош әҙәбиәт байрамын хәтерләтте.

**Аралбай, Ҡ. Үҙ баһаһын белер ир ине [Текст] : яҙыусы Динис Буләковтың тыуыуына - 75 йыл / Ҡ. Аралбай // Ағиҙел. – 2019. – № 5. - Б. 136-138.**

Динис Бүләковты, һалдаттан ҡайтып, «Башҡортостан» гәзитендә эшләй башлағанынан алып белә инем. Тәүге хикәйәләре лә матбуғат биттәрендә сығып тора, егет аралашыусан, ҡыйыу, асыҡ-ярыҡ холҡо менән дә кешене үҙенә тиҙ ылыҡтырыусан. Шул ваҡыттарында уҡ алға ҡарап, уй-хыялдарын киләсәккә йүнәлешләп йәшәне. Мин быны ҡоро һүҙ өсөн генә әйтмәйем, ә тап шундай осраҡ булғанға, шул мәлдә үҙебеҙ менән булған тормош хәл-әхүәлдәренән сығып әйтәм. Мәҫәлән, 1975 йылда булһа кәрәк, ул беҙгә “Ағиҙел” журналына эшкә килде. Дөрөҫөрәге, Рәйес Низамов, «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире, уны элегерәк тә эшкә саҡырһа ла, Динис ризалыҡ бирмәй, ниңәлер, хәл итмәй “Совет Башҡортостаны» гәзитен ташлап китә алмай йөрөнө.

Һәм бына беҙ «Ағиҙел» редакцияһында бергә эшләйбеҙ. Нисектер, бер кисен шулай икәүбеҙ генә ултырып ҡалдыҡ. Һөйләшәбеҙ, эш тураһында ла, донъя хәлдәре, бүтән мәсьәләләр ҙә. Мин ул мәлдә журналдың яуаплы секретары инем, эш буйынса Динис менән ныҡ бәйләнештәбеҙ, йыш аралашабыҙ, серҙәр уртаҡ. Эш көнө бөтөп, бер аҙ тын алып, сәй эсеп, гәпләшеп ултырғанда ул үҙенең гәзиттән китеүенә үкенгән кеүек тә әйтеп ҡуйҙы:

- Әллә инде, Рәйес ағайҙың һүҙен йыҡманым был юлы. Элегерәк, былтыр уҡ саҡырғайны ул эшкә. Мин үҙем башта риза булмай йөрөнөм. Әле инде өҙмәй-ҡуймай һорағас, риза булдым да ҡуйҙым. Хәҙер яҙышыуға ныҡлап тотонғас, барыбер, ҡасан да булһа әҙәби журналда эшләргә тура килер ине... - тине.

Мин шунда уның тәүәккәллегенә лә, үҙ-үҙенә ныҡлы ышаныуына ла һоҡландым. Бына бит егет - әле әҙәбиәткә яңы-яңы аяҡ баҫҡан, ә алдына ниндәй оло маҡсаттар алып, үҙен шул оло һынауҙарҙы барыбер бер мәл үтәсәген билдәләп, шуға эстән, күңеленән әҙерләнеп тә ҡуйған. Был ысын мәғәнәһендә әҙәбиәткә, оло ижадҡа йәштән үк мөкиббән бирелгәнлек, инанғанлыҡ билдәһе ине. Һәм Динис ошо үҙенең алдына ҡуйған маҡсаттарына тоғролоҡ һаҡланы, ысынлап та, оло әҙәбиәт диңгеҙенә фиҙәкәрлек менән, тәүәккәллек менән сумды. Алыҫҡа йөҙөп китте. Мәңгелек донъяһына юл алды.

1997

*Динис дуҫымдың 60 йыллығына арнап Республика Йәштәр театрында уҙғарылған хәтер  һәм ҡәҙер кисәһендә миңә лә һүҙ әйтеү форсаты тейҙе. Форсаты, тим, сөнки унда һүҙ әйтергә теләүселәр күп ине, ә ваҡыт сикләнгән. Оло тамаша залында уның күп һанлы  уҡыусылары, уны ихтирам итеп килгән инсандар алдында әйткән һүҙем бынан ете йыл әүәл яҙған иҫтәлектәремә ялғанһын, шуларҙың дауамы булһын, тип уйлайым.*

- Ҡәләмдәшем һәм ижадташым Динис Бүләковтың был моңһоу хәтер кисәһендә шатлыҡҡа ла, ҡыуаныстарға ла урын юҡ һымаҡ. Сөнки беҙ бөгөн уны юғалтҡандағы ҡайғыбыҙҙы яңыртабыҙ. Башҡорт әҙәбиәте өсөн, уның туғандары, ғаиләһе һәм балалары өсөн ҙур юғалтыуҙы иҫкә алып, йөрәктәребеҙ әрней.

Әммә ошо хәтәр хәтирәләр араһында, эҫе иҫтәлектәр эсендә Динис Мөҙәрис улының беҙгә, үҙенең замандаштарына ҡарата булған яҡшы мөнәсәбәттәрен, атҡарған изгелектәрен дә иҫкә төшөрәбеҙ икән, тимәк, барыбер уның хаҡында күңел йыуаныстары, нескә ҡәнәғәтлек тойғолары ла кисерәбеҙ. Уның рухын да шат ҡылабыҙ. Шулар менән беҙ уны үҙебеҙгә изге бер йән итәбеҙ, илаһилаштырабыҙ. Тимәк, беҙҙең рухыбыҙ ҡайғы-һағыштан юғары, ваҡлыҡтарҙан азат, кәмселектәрҙән өҫтөн. Бына ошо - иң мөһиме.

Динис Бүләков тәбиғәте менән тыныс ҡына, һип-һил холоҡло булманы. Уның ярһыу йөрәкле кеше булыуы бөтә фиғелендә сағылды, башҡарған эштәрендә күренде. Мин уның шундай бөтмәҫ дәртен, тынғыһыҙ йәнен, күңел болоҡһоуҙарын үҙебеҙҙең остазыбыҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғарипов менән сағыштырам. Улай ғына ла түгел, Динискә тап Рәми ағайҙың бунтарь холҡо, Рәмиҙең дауыллы тәбиғәте, Рәмиҙең ярһыу хистәре йоҡҡан тип әйтер инем. Был холҡо, был тәбиғи сифаттары уның ижадында ла ҡалманы: романдары, повестары һәм хикәйәләре йәшлек дәрте, хыялыйҙар романтикаһы, мөхәббәт лирикаһы менән һуғарылған. Динистең һәр әҫәренән шаулы-даулы тормош бөркөлөп тора. Улар уҡыусыны битараф ҡалдырмай, уйланырға мәжбүр итә.

Бөгөн беҙҙең борсоулы ла, болоҡһоу ҙа, хатта бер аҙ хәүефле лә заманыбыҙҙа философия ғалимы һәм йәмәғәт эшмәкәре Дамир Вәлиев, Динис Бүләков кеүек йәки үтә лә тынғыһыҙ Аҫылғужа кеүек ҡыйыу, ҡурҡыуҙың ни икәнен белмәҫ, ҡай сағында алабарман да, алдын – артын ҡарап тормаған батыр заттарыбыҙ етмәй. Кәрәк икән (эх нисек кәрәк әле!) утҡа – һыуға инергә, кәрәк икән Шакирйән Мөхәмәтйәнов (Александр Матросов) кеүек уны-быны байҡап, киҫкен ситуацияны үлсәп-бизмәнләп тормай, ут бөркөп ятҡан амбразураға ташланырлыҡ тәүәккәл азаматтар етмәй тормошобоҙҙа. Ни хәл итәһең, заманыбыҙ шундай, тимәк. Батырҙы заманы

тыуҙыра, ханды ла заманы ҡуйҙыра. Бахырҙар хәтерҙән ҡыуыла,батырҙар хәтерҙән юйылмай.

2004.

* * *

Быйыл май айында Динис Бүләковҡа 75 йәш тулған булыр ине. Үкенес, уның арабыҙҙан лә егерме дүрт йыл ғүмер үтеп бара.

Тәүге яҙған иҫтәлектәремдә (1997,2004) Динис менән Башҡортостан Яҙыусылар Союзы идараһында ергә эшләүебеҙ хаҡында телгә алмағанмын. Динисте ҡапыл юғалтыуҙан шаңҡып ҡалған мәлдә һәм аҙаҡ, уның 60 йыллығын билдәләгәндә (2004) күберәк уны шәхес булараҡ һынландырырға тырышылғандыр.

Ә беҙ уның менән 1988 - 1993 йылдарҙа йәнә бергә, бер ойошмала эшләп алдыҡ: ул X съезда Яҙыусылар союзы рәйесе итеп һайланғайны, мин иһә яңы идараның беренсе ултырышында рәйес урынбаҫары итеп тәғәйенләндем. Шунан алып биш йылдан ашыу ғүмеребеҙҙе ижади ойошмабыҙҙың эшмәкәрлеген күтәреүгә, әҙәби процессты йәнләндереүгә арнаныҡ. Төрлөһө булды: уңыштар ҙа, үкенестәр ҙә...

Ижадына килгәндә инде, Динис баштараҡ балалар һәм үҫмерҙәр өсөн яҙыусы булараҡ танылды. Был осорҙа уның «Аҡбуҙ алышҡа сыға», «Ҡыңғырау сәскәһе», «Упҡын ситендә бейеү», «Ҡыйырсыҡ ай», «Шарлауыҡ» кеүек китаптары киң танылыу алды. Артабан ул ҙур полотнолы әҫәрҙәр яҙыуға тотондо һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә «Килмешәк» (1989), «Ғүмер бер генә»(1993), «Туҙҙырылған тамуҡ» (1995) романдарын сығарҙы.

Динис Бүләков йәмәғәт эштәренең уртаһында ҡайнаны: Юғары Совет эшендә лә, төрлө комиссияларҙа, редколлегияларҙа һ.б. әүҙемлек күрһәтте. Сит илдәрҙә сәфәрҙәрҙә булырға ла, Союзда күренекле шәхестәр менән осрашыуҙар ойошторорға ла өлгөрҙө (яҡташыбыҙ авиация маршалы Иван Пстыго, Венгрия Республикаһы Президенты, яҙыусы Арпад Генц, Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡыҙы, профессор Иҫәнбикә Туған, бөйөк авар шағиры Рәсүл Ғамзатов һәм башҡалар менән).

1992 йылда Төркиәгә ижади командировкаһының һөҙөмтәһе булараҡ Ғази университетында башҡорт яҙыусыһының әҫәрҙәрен тел-стиль һәм семантик йәһәттән өйрәнәләр. Ошо нигеҙҙә аҙаҡ Динис Бүләковтың «Ғүмер бер генә» һәм «Килмешәк» романдары төрөк телендә нәшер ителде (2012).

Динис ҡәләмдәшем менән байтаҡ юлдарҙы бергә үтергә лә тура килде. Мәскәүҙә, Ҡаҙанда, Татарстандың Түбән Кама, Яр Саллы ҡалаларында йәшәгән яҡташтарыбыҙ менән башҡорт әҙәбиәтенә арналған байрам кисәләрендә ҡатнашыу бәхете тейҙе. Минең тыуған яғым Хайбуллала йәмле Таналыҡ, Һаҡмар буйҙарын ҡыҙырыу, усаҡ янында бергә үткәргән кистәр,

сиҙәмселәр менән иген баҫыуҙарында осрашыуҙар һағынислы хәтирәләр уята.

Динис Бүләков тормошта актив позициялағы кеше ине. Бөтә нәмәлә лә үҙенең ҡатнашлығын белгетер, кәрәк икән - хаҡлығын да иҫбатлар. Ғорур, үҙ баһаһын белер һәм милләте өсөн утҡа инер, һыуға ла төшөр аҫыл азаматтарыбыҙҙың береһе булды.

Яҙмамды ҡәләмдәшем Динис Мөҙәрис улы Бүләковтың илле йәшендә үҙенә уҡыған һәм ул яҡты донъяларҙан киткәс яҙылған ике шиғырым менән йомғаҡлайым.

## Динис Бүләковҡа ике арнау

### Тоғро ҡалайыҡ

**Башкортостан Яҙыусылар союзында бергә эшләгән йылдар ( 1988 - 1993) иҫтәлеге.**

Эй әйләнә тормош ҡуласаһы,
Ваҡыт ваҡлап ғүмер иләнә.
Тарта-тарта һәлмәк йәшәү йөгөн,
Күҙҙәр тона, урттар сәйнәлә.

Әл дә дуҫтарым бар - бергә-бергә
Күтәрергә заман һынауын.
Юрап-белеп булмай әле дәүер
Алда тағы ниҙәр һонаһын.

Гөл һулытып, сүл киптереп үткән
Ғүмеребеҙҙән намыҫ уйланыр,
Ҡәбер ҡаҙып, китап яҙып үткән
Көнөбөҙгә сауап юлланыр.

Беҙ йырлайһы йырҙар алда әле,
Иң шәп шиғыр әле тыумаған,
Беҙ һөйәһе ҡыҙҙар буй етмәгән,
Ижад ҡомарыбыҙ туймаған.

Эй әйләнә тормош ҡуласаһы,
Ваҡыт ваҡлап ғүмер иләнә.
Ғүмер берәү булғанғалыр, ахыры,

Ҡарашыбыҙ
Үткәндәргә йыш-йыш әйләнә.
Кемде генә илатмаған икән
Күҙ һирпкәнсе үтер был ғүмер —
Сәскә кеүек кенә ата ла ул
Ята ла шул ергә көл-күмер.

Ерҙә бер ниндәй ҙә юҡ мөғжизә,
Юҡ ҡағиҙә,
Бар хис, ярһыуҙар...
Беҙгә насип булған бер ғүмерҙе
Йөҙ ғүмер итерлек бар хыял!
Ҡалған юлыбыҙға һабаҡтарҙың
Ғибрәтлеһен генә алайыҡ,
Һатылмай ҙа,
Ватылмай ҙа торған
Хыялдарға тоғро ҡалайыҡ!

1993

## Мәңгелеккә

Динис дуҫҡай,
Китеп барғанһың бит,
Бөттө ләме шулай түҙемең
«Ғүмер бер генә» тип әйтеүеңә
Ышанманыңмы ни һин үҙең

Бер генә шул ғүмер...
Тик бер генә...
Икенсегә ҡабат бирелмәй.
Шуғалырмы, унын үткәне лә
Бергә саҡта бер ҙә һиҙелмәй.

Ә һин һиҙҙең, ахыры.
Шуғалыр ҙа
Эй кинәнеп, ихлас йәшәнең,
Ҡулың асыҡ, күңелең йомарт
булды,
Йәшнәгәндә - бик мул йәшнәнең

Йөктө тарттың тик төпкә егелеп
Риза түгел инең мисәүгә.
Тик йәшәгән һайын
ҡомарландың,
Һыуһай ғына барҙың йәшәүгә.

Һыуһағанда эстең касаларҙың
Береһен генә түгел, бишәүһен.
Һорап-ҡарап тормай һемерҙең дә
Һүҙ ишеттең бары “киҫәүһеҙ...”

Мөхәббәтте эстең каса-каса,
Һыуһындарың ҡанмай
ҡайтманың,
Һинең өсөн төндәр ҡыҫҡа булды,
Таңың оҙаҡ ҡына атманы...

Бөтәһе лә булды...
Был тормошта
Ҡалды микән татымағаның,
Сөсөһөнә ҡарағанда күптер
Әселәрен ҡапҡылағаның...

Кисер,
Әгәр һине нимәләлер
Тыймаһаҡ беҙ
Тыйнаҡ булып, булып
ҡыйыуһыҙ.
Ләкин һин бит ундай түгел инең -
Белә, тыңлай торған тыйыуҙы.

Киттең атлап мәңгелеккә...
Ҡояш
Ярсыҡтары ҡуҙлы-күмерле...
Ҡыҫҡа ғүмерең менән
Ҡабыҙҙың һин
Оҙон ғүмер — ижад ғүмерен...

16.03.95.

**Мәһәҙиев, Н. , Ҡотлогилдина, З.  Ғүмер бер генә – ижад мәңгелек [Текст] /  Н.Мәһәҙиев, З.Ҡотлогилдина**
**// Ағиҙел.  -  2019.  -  № 5.  –  Б. 139-150.**

***Күренекле яҙыусы һәм дәүләт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Динис Бүләковтың тыуыуына 18 майҙа 75 йыл тулды. Ошо уңайҙан, әҙипте иҫкә алыу ниәтенән ҡасандыр үҙе эшләп киткән "Ағиҙел"журналы редакцияһы исеменән ҡыҙҙары менән әңгәмә ҡорҙоҡ.***

***- Ләйсән, Зөһрә, Миләүшә! Һәр һорауға өсөгөҙ ҙә айырым-айырым яуап бирһәгеҙ ине. Ни өсөн тигәндә, бер туғандар булһағыҙ ҙа, йәш айырымлығы, донъяға ҡараш-мөнәсәбәт буйынса һәр кем төрлөсә уйлай, фекерләй. Хатта игеҙәктәр ҙә бер үк мәсьәлә буйынса төрлөсә яуап бирә. Шулай итеп, ниндәй атай ине ул һеҙҙең өсөн Динис Бүләков?***

**Ләйсән.** Атайым ҙур һәм көслө булып иҫемдә ҡалған. Ул үҙен уратып алған бөтә донъяны оло һөйөү менән ҡабул итте. Күп яҡлы шәхес, бар яҡлап талантлы ине. Һөйкөмлөлөгө менән бөтә кешеләрҙе лә үҙенә тартты. Ул эргәлә саҡта бер нәмә лә ҡурҡыныс түгел ине. Нескә хисле, һиҙгер, киң күңелле кеше булды. Тыуған еребеҙҙе яратты, төйәгебеҙҙең патриоты ине. Бөтә нәмәнең дә тик яҡшы яҡтарын ғына күрә белде. Ул шул тиклем ихлас көлә ине, быны ишетеп, хатта тирә-яғындағылар ҙа уға ҡарап йылмая торғайны.

Атайҙа ғәҙеллек тойғоһо көслө булды.Һөйләй башлаһа, кешеләрҙе ауыҙына ҡарата ине. Әңгәмәсеһен ғәҙеллеккә ышандыра белде. Бер ҡасан да һүгенмәне. Әгәр нимәнәндер ҡәнәғәт булмаһа, үҙенең өмөтөн аҡламағанға үкенесен белдерҙе. Сөнки бүтәндәрҙә лә үҙе кеүек кешене күргеһе килә ине.

Мин һәр ваҡыт уның ышанысын аҡларға, алдыма ҡуйған юғары талаптарына тап килергә тырыша инем. Ошо тойғо гел генә яңы үрҙәр яуларға, бығаса белмәгәнгә өлгәшергә, уңыштарға өлгәшергә әйҙәп торҙо. Атай менән һәр саҡ ҡыҙыҡ һәм күңелле ине. Ул үҙенең әсәһен, ҡатынын һәм беҙҙе, өс ҡыҙын, бик ныҡ яратты.

**Зөһрә.** Һәр бала өсөн әсәй - тыуған өйҙөң йылыһын һаҡлаусы, иң беренсе кәңәшсе, тәмле аштар менән һыйлаусы, ә атай әкиәттәге батыр һымаҡ иң көслө, иң ғәҙел, миһырбанлы һәм өйҙөң, ғаиләнең ныҡлы терәге булып торалыр. Минең атайым тап шундай ысын атай ине! Ул беҙҙең менән ябай ҙа була белде, шул уҡ ваҡытта бик талапсан да ине. Оло йөрәкле, ихлас күңелле атайым беҙҙе лә ҡуйған маҡсаттарға өлгәшергә, кешеләр менән матур мөғәмәләлә булырға өйрәтте, ихлас күңелле, аҡыллы, үҙ-үҙенә талапсан, ғәҙел, эшһөйәр кешеләр итеп үҫтерергә тырышты.

**Миләүшә.** Атайым арабыҙҙан киткән саҡта миңә ни бары туғыҙ йәш кенә ине. Әлбиттә, туғыҙ йәшлек балаға Динис Бүләковтың “яҙыусы, дәүләт эшмәкәре” тигән исемдәре бөтөнләй буш һүҙ ине, сөнки минең өсөн ул бәләкәй саҡта ла, әле лә иң тәүҙә атай булып ҡала. Уның өйгә ҡайтыуын иртәнсәк ҡояш сыҡҡан һымаҡ көтөп ала инек. Күҙ алдына килтерегеҙ: Бүләковтарҙың ҡәҙимге бер кисе. Кухняла әсәйем тирә-яҡҡа тәмле еҫтәр таратып аш бешерә, ҡоймаҡ ҡоя. Апайымдар эргәһендә ярҙамлашып йөрөй. Мин уйынсыҡтарым менән уйнайым, шул уҡ ваҡытта барыбыҙ ҙа атайымдың ҡайтҡанын көтә.

Ҡапыл ишектә ҡыңғырау зыңғырлай... йүгереп барып асып ебәрәм... атайым матур, бөхтә кейенгән, үҙенән тәмле одеколон еҫе килә, ҡулында - дипломат. Өҫкә кейемен сискәнен көтөп тә тормайынса, ҡосағына ырғыйым. Ул мине күтәреп ала, йылмая-көлә күккә сөйөп һикертә... сыйылдайым, үҙемә рәхәәәәт! Шул арала килеп еткән әсәйем икебеҙгә мөхәббәт тулы ҡарашын төбәгән, апайымдар ҙа бында, ҡыуаныстары йөҙөнә сыҡҡан. Мине ҡыҫып-ҡыҫып ҡосаҡлап туйғас, атайым, һәр ваҡыттағыса, “тылсымлы ҡумта”һын, йәғни дипломатын аса, күстәнәс көткәнемде белә бит инде... Эсендә, эш ҡағыҙҙарынан тыш, йә әфлисун, йә кәнфит, йә колбаса киҫәге ята. Өйөбөҙ тағы ла йәмләнеп китә!

Былар - бала сағымдың иң ҡәҙерле иҫтәлектәренең береһе. Ошо ябай ғына минуттар ҙа Динис Бүләковтың ниндәй атай булғанын асыҡ күрһәтәләр, тип уйлайым.

***- “Совет Башҡортостаны” гәзитендә бүлек мөдире, “Ағиҙел” журналында проза бүлеге мөхәррире, “Пионер” журналында ун йылдан ашыу баш мөхәррир, Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы буйынса дәүләт комитеты етәксеһе, бер үк ваҡытта республиканың Журналистар союзы рәйесе һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы секретары... Ошондай ҙур һәм яуаплы вазифалар башҡарған атайығыҙ, ғөмүмән, һеҙҙең менән булырға ваҡыт таба инеме? Шул бәхетле мәлдәрҙән айырыуса ҡайһы ваҡиғалар онотолмаҫлыҡ булып хәтерегеҙҙә ҡалған?***

**Ләйсән.** Уның исем-дәрәжәләрен гел нишләптер кешеләргә белдермәҫкә тырыштым, сөнки минең өсөн ул бары атай ғына ине. Бала саҡта ғаиләбеҙ менән бөтә республика буйлап сәйәхәттәргә күп йөрөнөк, атайым тәбиғәтте ныҡ ярата ине. Уның дуҫтары (Ғариповтар, Бикбаевтар, Әлибаевтар һәм Сәхәүетдиновтар) менән бергәләшеп тәбиғәт ҡосағына йыш сыға торғайныҡ. Ә йәйҙәрҙе Нәғимә өләсәйҙә үткәрер инек. Атайым гел малай тыуыуын теләгән, ләкин беренсе булып мин донъяға килгәнмен. Ҡыҙ

булһам да, атайым малайҙар белергә тейешле бөтә һөнәрҙәргә өйрәтте: ҡаҙаҡ ҡағырға, бысҡы менән эш итергә һ.б.

Ә беҙҙең баҡса - бала сағыбыҙҙың бәхетле минуттары менән бәйле урын ул. Йәй көндәрендә бергәләшеп шунда ял иттек. Баҡсалағы өйҙө үҙебеҙ төҙөгәнебеҙ бик асыҡ иҫемдә ҡалған. Мин атайымдың ярҙамсыһы булдым. Ҡайһы ҡаҙаҡтың ҡайҙа ятҡанын, таҡталарҙың номерҙарын бик яҡшы белә инем. Атайым ҡыҙының малайҙарҙан кәм түгел, хатта оҫтараҡ та булыуы менән ныҡ ғорурлана торғайны.

Шулай уҡ атай-әсәйемдең күп уҡығаны иҫтә. Беҙҙең өйҙә гәзит-журнал өйөлөп ятты. Шуларҙың араһында ҡалын һәм ҙур “Литературная газета” һаман күҙ алдымда. Атайым беҙҙең менән мәҡәләләр буйынса фекер алышырға яратты. Үҙенә күрә бәләкәй генә политинформация килеп сыға. Һәр беребеҙ фекерен еткерә, атайым иғтибар менән тыңлай.

Уның бик йыш командировкаларға йөрөгәнен иҫләйем. Әммә йыраҡта булһа ла, беҙгә хат яҙып, эсенә матур открыткалар һалып ебәрә, хат аша булһа ла һәр беребеҙгә иғтибар бүлә ине. Шул сәләмдәрҙең береһендә миңә килгән Муха-Цокотуха открыткаһын әлегә тиклем һаҡлайым. Һүрәтендә түңәрәк өҫтәл артында Муха-Цокотуха һәм башҡа бөжәктәр самауыр сәйе эсеп ултыра. Ә икенсе яғында атайымдың һүрәткә ҡыҙыҡлы, мөхәббәт тулы аңлатмалары яҙылған. Нисәмә йылдар үтеүенә ҡарамаҫтан, ошо открытканан һаман да атай йылыһы, һөйөүе бөркөлөп тора.

Ә инде уның командировканан ҡайтыуын айырыуса һағынып көтөп алабыҙ. Беҙҙең өсөн был бәләкәй генә йолаға әйләнгәйне. Барыбыҙ ҙа атайым һәм уның сумаҙаны эргәһенә ултырабыҙ, ул ашыҡмай ғына, мут йылмайып ҡумтаһын бушата башлай. Һәр беребеҙ өсөн мотлаҡ бүләк була. Уларҙы сумаҙандың иң төбөнә һалыр ине. Көтөп ала алмайынса сыҙамай ултырғаныбыҙ, шул мәлдәге хистәр һаман иҫемдә. Хәҙер үҙем дә командировканан ҡайтҡан саҡтарҙа сумаҙан төбөнән сабыйҙарыма бүләктәр сығарырға яратам. Бала сағыма ҡайтҡандай булам шул минуттарҙа.

Атайым, эше бик күп булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең өсөн гел ваҡыт таба белде. Минең тормош иптәшемде һайлауыма ла етди ҡараны. Беренсе күрешеүҙә үк буласаҡ ирем менән оҙаҡ һөйләшеп, фекер алышып ултырҙы. Егетем урыҫ ине, бөтәһе лә ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Ә атайым: “Ләйсән нәмә эшләгәнен үҙе белә, ул мөхәббәтте һайлай”, - тип яуапланы. Ғөмүмән, ул һөйөү һәм тоғролоҡ төшөнсәләрен бик юғары ҡуйҙы. Тормошто яратты, уның ҡәҙерен белде.

Инде мин кейәүгә сығып, декретта ултырған саҡта, атайым беҙгә төшкө ашҡа ҡунаҡҡа килергә ятты. Уның килеүенә берәй тәмле нәмә бешерергә тырыша инем. Сәйнүк ҡайнап сыҡҡансы диванда гәзит уҡып  ял итә, йә

яңылыктары менән бүлешә. Һуңынан әҙерләгән ризығымды рәхәтләнеп, минең ҡанаттарым үҫеп сыҡҡансы маҡтай-маҡтай ашай. Атайым бик ҙур талантҡа эйә ине. Ул кешеләрҙең яҡшы яҡтарын күрә белде, быны һыҙыҡ өҫтөнә алып, күңелде тағы ла нығыраҡ үҫтереп ебәрә торғайны. Шуның өсөн дә кешеләр уға тартылды, атайым 1995 йылда уҡ арабыҙҙан китеүенә ҡарамаҫтан, һаман уның хаҡында бик күп йылы һүҙҙәр ишетәбеҙ. Уның яҡшылыҡтары тағы ла ҙурыраҡ изге эштәргә алып барасаҡ тип әйтер ине гел әсәйебеҙ. Хәҙер инде беҙгә, балаларына, ҡәҙерлеләребеҙҙең күркәм ғәмәлдәре маяҡ булып тора, һәм уларҙың өмөттәрен аҡларға тырышабыҙ.

**Зөһрә.** Атай бала йәнле кеше булды. Иң бәхетле мәлдәр - кис барыһы ла өйҙә саҡтар! Беҙ - мәктәптән, атай-әсәй эштән арып ҡайтҡас, ашап, сәй эсеп бөткәс, өҫтәл янында һөйләшеп ултырыу. Һәр беребеҙ нимәлер һөйләй. Беҙ - мәктәптәге хәлдәр, әсәйем нәшриәттәге эштәр менән бүлешә. Атайым тыңлап ултыра ла, һуңынан үҙенең кәңәштәрен биреп, маҡтап, тормошта нимә дөрөҫ, ә нимә ялған икәнен аңлатып бирер ине. Ул беҙгә гел дә: “Яҡшылыҡ ҡасан да булһа бер еңергә тейеш, яманлыҡ барыбер фашланасаҡ!!! Күңелегеҙҙе теләһә ниндәй бысраҡлыҡ, ваҡлыҡ менән тултырмағыҙ”, - тип әйтә торғайны.

- ***Әҫәрҙәрен ҡайһы ваҡытта ижад итә ине һәм нисек эшләй торғайны?***

**Зөһрә.** Бындай мәлдә өйҙә ниндәйҙер сихри тынлыҡ, тылсымлылыҡ, ҡыуаныс хистәре була торғайны. Бер нисә көн ултырып, әҫәрен “һә” тигәнсе яҙып та бөтөрә ине. Әҫәре баштан аҙағынаса уйланып етмәһә, эшкә ултырманы. Ә инде һуңғы нөктәһен ҡуйып бүлмәһенән сыҡһа, үҙе бер шатлыҡлы мәл, өйҙә бала тыуған һымаҡ хистәр кисерелә. Ғаиләбеҙҙә оло байрам була...

**Миләүшә.** Атайымдың илһамы тулып, фекер туплап, әҫәренең бөтә йөкмәткеһен күҙ алдынан төшөрмәй бер бөтөн епкә теҙгәс, ул бөтә булмышы менән “ижад шишмәһе”нә сума. Ашамай, йоҡламай, ҡайһы саҡ бүлмәһенән көндәр буйы сыҡмайынса яҙыша. Бындай мәлдәрҙә илһам ҡошон ҡыуып ебәреүҙән ҡурҡып, әсәйем дә, беҙ ҙә шауламай, аяҡ осонда ғына йөрөй инек.

- ***Яҙасаҡ әҫәрҙәренең йөкмәткеһен һеҙгә һәм әсәйегеҙгә, Рәйлә апайға, һөйләй инеме?***

**Ләйсән.** Атайым эшкә ултырған саҡта, өйҙә барыһы ла тынып ҡала.Уға ҡамасауларға ярамай. Бүлмә ябыҡ, ишек артында әҫәр “донъяға килә”. Атайым, ысынлап та, әҫәрҙе хас әсә кеше баланы ҡарынында йөрөткән кеүек, эшкә тотонорҙан алда баштан аҙағына тиклем сюжетын башында “үҫтерә”. Барыһы ла әҙер булғас ҡына ҡағыҙ биттәренә күсерә. Ул дәртләнеп, рәхәтләнеп, һуңғы нөктәһен ҡуйғансы туктауһыҙ эшләр ине. Яҙышып арып

китһә, бүлмәһенән сығып беҙгә төрлө ҡыҙыҡ хәлдәр һөйләй ҙә, фекеребеҙҙе, ҡарашыбыҙҙы аңлағас, артабан эшләргә инеп китә.

**Зөһрә.** Иң беренсе тәнҡитсе һәм тыңлаусы, әлбиттә, әсәй ине. Ул бик уҡымышлы, аҡыллы, нескә, һиҙгер күңелле кеше булды. Атайым гел уның кәңәштәренә ҡолаҡ һалды. Ә инде беҙгә килгәндә, ҡайһы ваҡыт эргәгә килеп әҫәрҙән ваҡиғаларҙы һөйләп китә, һуңынан нимә әйткәнебеҙҙе, уйлағаныбыҙҙы тыңлар ине. Үҫә төшкәс, үҙебеҙ һөйләгән ҡайһы бер сюжеттарҙы әҫәрҙәрендә осратҡаным булды.

**Миләүшә.** Атайымдың яҙасаҡ әҫәрҙәренең деталдәрен, персонаждарын әсәйем менән уртаҡлашҡанын иҫләйем. Миңә, бәләкәй балаға, икеһенең оҙаҡ итеп кистәр буйы серләшеп, һөйләшеп ултырыуы сәйер ҙә, ҡыҙыҡ та күренә ине, ләкин һүҙҙәрен бүлеп, араларына ҡыҫылырға бер ҡасан да баҙнат итмәнем.

***- Динис ағай - һуғыш осоро балаһы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, үҫмерҙәр өсөн ижад иткән повестарында замана балаларының тормошон, психологияһын нық белеп яҙа. Теге йәки был осраҡта нимә эшләр инегеҙ, тип һеҙҙең менән кәңәшләшкәне булманымы?***

**Ләйсән.** Мәләүез районының Смаҡ ауылында Динис Бүләков исемендәге урта мәктәп бар, йыл һайын унда яҙыусы исемендәге премия бирелә. Был матур йоланы әсәйебеҙ башлап ебәрҙе һәм атайымдың тыуған көнөндә дуҫтары, ҡәләмдәштәре менән мәктәпкә килер ине.

Ошо сара тора-бара укыусылар өсөн ҡыҙыҡлы, фәһемле ваҡиғаға әйләнде. Осрашыуҙарҙың береһендә Фәрҙиә апай Әлибаева Сафуан бабайҙың армияла хеҙмәт иткән атайыма яҙған хатын уҡып күрһәтә. Унда башҡорт балалар әҙәбиәтенә күберәк иғтибар бирергә, ғөмүмән, кимәлен үҫтерергә кәрәклеге тураһында бәйән ителгән була. Эйе, атайымдың үҙенең бәләкәй сағы ябайҙарҙан түгел: һуғыш осоро балаһы, ауылдарында бөтәһенең күҙ алдында үҫкән берҙән-бер малай бәләкәй сағында хатта “үлеп” тә өлгөргән. Бала саҡ йылдары төрлө ваҡиғалары менән иҫтә ҡалырлыҡ мажараларҙан тора, бәлки, шуның өсөндөр ҙә балалар әҙәбиәте атайымдың ижадында ҙур урын ала. Инде билдәле яҙыусы булғас та, ул һәм ҡәләмдәштәре йәш быуын менән осрашыуҙар ойошторорға ярата. Үҙе йәштәр менән уртаҡ телде бик тиҙ таба торғайны.

**Зөһрә.** Атайым бик шәп психолог һәм бала йәнле кеше булды.

**Миләүшә.** Ҡыҙғаnысҡа күрә, был һорауға яуап бирә алмайым, сөнки үҫмер йылдарымды атайһыҙ үткәрҙем.

***- Ижадын балалар өсөн яҙған “Маҡтансыҡ Зариф” тигән хикәйәһе менән башлап, иң һуңғы әҫәрен дә кескәй дуҫтарына тәғәйенләне. Нисек уйлайһығыҙ, “Тыҡрыҡ башы - беҙҙең биләмә” исемле повесының***

***сюжетын берәй ысын хәлгә нигеҙләнеп яҙҙымы әллә фантазия емешеме? Әҫәрҙең исеме лә ҡыҙыҡ ҡына: ни өсөн шулай атаны икән?***

**Зөһрә.** Атайымдың бар әҫәрҙәре лә булған хәлгә таянып яҙылған. Унда тыуған иленең матур ерҙәре, ихлас күңелле кешеләре сағылдырыла. “Тыҡрыҡ башы - беҙҙең биләмә” повесы ла тормоштан алынған. Йәш саҡта улар Салауат Юлаев урамында бер бәләкәй генә бүлмәлә йәшәгән. Шул тирәләге тыҡрыҡты “Әтәс тыҡрығы” тип йөрөткәндәр. Әҫәрҙә тап шундағы балаларҙың тормошо һүрәтләнгән.

**Миләүшә.** Был бик ҡатмарлы һорау, минеңсә, сөнки яҙыусының башында ниндәй уйҙар, ниндәй идеялар тыуғанын, уларға ниндәйерәк фантазиялар ҡушылғанын ул үҙе генә беләлер. Шәхси фекеремә килгәндә, әҫәрҙәрҙең “рецебы” былайыраҡ булғандыр тип уйлайым: 1 стакан тормошта булған йәки ишеткән, шаһит булған ваҡиғалар, идеялар; 1 стакан фантазия емеше; 1 стакан шәхси тормош тәжрибәһе һәм белем. Барыһын да болғатып, иң мөһим “компонент” өҫтәйбеҙ: ҙур аш ҡалағы мөхәббәт (персонаждарға, идеяға, ғөмүмән, әҙәбиәткә һөйөү өҫтәүе мотлаҡ).

Аҙағында шуны ғына әйткем килә: “рецепт”ың компоненттарын бутамай әҙерләһәгеҙ ҙә, ысын, ҡыҙыҡ, “тәмле” әҫәр сыҡһын өсөн авторының Динис Бүләков кеүек талантлы, телде белгән, тойған яҙыусы булыуы бик мөһим.

***- Башҡорт балалар әҙәбиәтендә Динис Бүләков - үҫмерҙәр араһындағы тәүге мөхәббәт тойғоларын сағылдырыусы беренсе әҙип тип әйтергә лә мөмкин. Уға тиклем был хаҡта асыҡтан-асыҡ яҙырға баҙнат итеүселәр юҡ ине шикелле. “Аҡбуҙ алышҡа сыға”, ‘Упҡын ситендә бейеү”, “Саған япраҡ яңырта”, “Эҫе ҡар” повестарын балалар ныҡ яратып уҡый торғайны. Матбуғатҡа баҫырға биргәнгә тиклем уларҙы һеҙгә уҡырға бирә инеме? Әгәр фекерегеҙҙе әйтһәгеҙ, уларға ҡолаҡ һалдымы?***

**Ләйсән.** Атайымдың мөхәббәткә мөнәсәбәте бик үҙенсәлекле булды. Уныңса, был иң саф, иң таҙа, иң изге хис ине. Атайым бар булмышы, күңеле менән бирелеп ярата белде! Мәҫәлән, минең беренсе мөхәббәтем тураһында ла ул барыһын да белә ине, күрәһең, әсәйем һөйләгәндер. Ләкин белгәнен күрһәтмәйенсә генә һөйөү хистәре менән янып йөрөгәнемде күҙәткән. Бер саҡ хатта мине яҡлап сыҡты, шунда ғына уның бөтәһен дә белгәнен аңланым. Үҙебеҙҙең арала ла атайым әҫәрҙәре тураһында йыш фекер алышты.

**Зөһрә.** Ғөмүмән, бар әҫәрҙәрен дә иң беренсе әсәй уҡый ине. Ҡайһы саҡтарҙа ғына беҙгә лә ишеттерә торғайны. Миңә килгәндә инде, атайымдың “Эҫе ҡар”ҙы һөйләгәне, һуңынан илап ултырғаным иҫтә.

***- “Килмешәк”, “Ғүмер бер генә”, “Туҙҙырылған тамуҡ” кеүек ҙур күләмле романдарында заманыбыҙҙың үткер проблемалары ҡыйыу күтәрелә. Быны менән Динис Бүләков прозаһы әҙәбиәтебеҙҙә айырым урын алып тора. Уларҙа республикабыҙҙағы үҙгәртеп ҡороу осоро һәм артабанғы йылдар, власть менән халыҡ араһындағы мөнәсәбәттәр сағылдырыла. Мәҫәлән, “Туҙҙырылған тамуҡ” әҫәре баҫылып сыҡҡандан һуң, ишетеүебеҙсә, әҙипкә янаусылар ҙа булған. Шундай ауыр саҡтарын нисек үткәрә ине?***

**Зөһрә.** “Ғаиләм - ҡәлғәм” тип боронғолар юҡҡа әйтмәгән бит. Кистәрен әсәйем менән һөйләшеп ултырғандары әле лә күҙ алдымда.

**Миләүшә.** Әсәйем һөйләүе буйынса, атайым болғансыҡ 90-сы йылдарҙа булған ваҡиғаларҙы бик ауыр кисерә. Бигерәк тә халыҡтың кешелеклелек, намыҫ, иман сифаттарын юғалта башлауы, уларҙың урынын аҡса алмаштырғаны күңелен ныҡ әрнетә. Ҡаялай ғорур, көслө, баһадир ирҙең хисләнеп күҙ йәштәрен түккәнен бер-ике тапҡыр миңә лә күрергә тура килгеләне.

Әммә, минеңсә, атайым үҙ ваҡытында был һынауҙар аша үтмәһә, башҡорт әҙәбиәте “Ғүмер бер генә”, “Туҙҙырылған тамуҡ” кеүек романдарҙан мәхрүм булыр ине. Аллаһ Тәғәлә һәр кешегә һынауҙарҙы белеп бирә, тип уйлайым, тик ҡайһылары еңә алмай ҡойолоп төшә, ә икенселәре, киреһенсә, атайым кеүек, ҡыйынлыҡтарҙы зиһенен, шәхесен үҫтереү өсөн бер сәбәпкә әйләндерә.

***- Заманында республикабыҙҙың Мостай Кәрим, Ноғман Мусин, Булат Рафиҡов, Ғәзим Шафиҡов һ.б. кеүек 12 күренекле яҙыусыһы менән бергә Динис ағай ҙа Башҡортостандың Юғары Советына депутатлыҡҡа үҙенең кандидатураһын тәҡдим итә. Әммә һайлаусыларға хөкүмәт иҫәбенән юл һалдырырға, газ үткәрергә торбалар вәғәҙә иткән чиновниктар, сәйҙәр таратып, аҡса өләшеп йөрөгән байҙар менән ярышта бер генә яҙыусы ла үтмәй. Халыҡ араһында ифрат популяр Гөлфиә Юнысова-Иҙелбаеванан башҡа. Әҙиптәрҙең рухи байлығынан башҡа бирер мөлкәте юҡ шул. Улар халҡының киләсәген хәстәрләүҙе алға ҡуя ла бит, әммә... ябай халыҡ ымһындырғыс вәғәҙәләргә алдана. “Мин үтмәҫемде алдан белә инем, шуға ла бик ҡайғырманым. Уның ҡарауы, ошо ваҡиғалар нигеҙендә “Ғүмер бер генә”романын яҙҙым”,- тигәйне Динис ағай. Атайығыҙҙың шул осоро нисек хәтерегеҙҙә ҡалған?***

**Ләйсән.** “Өйөм - ҡәлғәм!” Был лозунг түгел, ә атай, әсәй шулай йәшәне. Әсәй үҙенең Батшаһының батшабикәһе булды, донъя мәшәкәттәренең бөтәһен дә үҙ өҫтөнә алды. Шуға һаулығын да бөтөргәндер. Ул атайҙың һаҡлаусы фәрештәһе булды. Әсәй гел: “Тирә-яҡта яу булһа ла,

өйөм эсе һау булһын”, - тип әйтә торғайны. Атай әсәй менән бөтә уйҙарын уртаҡлаша ине. Туҡһанынсы йылдар... Бөтәһе лә илдәге хәл-ваҡиғаларҙың яҡшы яҡҡа үҙгәреүенә өмөтләнә. Депутатлыҡҡа кандидатураһын күрһәтеп, тормоштоң бөтөнләй икенсе яғын күреп, үҙенә яңылыҡ асты. Аҡындар, сәсәндәр нимә күрһә, шуны йырлаған кеүек, атай ҙа шул күргәндәрен роман итеп яҙҙы...

**Зөһрә.** Ул осор бик ҡатмарлы ине бит. Юҡлыҡ, талаш-тартыш, алдашыу, кемгәлер ошаҡ яҙыу. Кешеләрҙең өмөттәрен, күңелдәрен һындырған ваҡыт. Иҫемдә, ул саҡта атай өйҙә бик һирәк булды, гел юлда, районлар буйлап йөрөп, ауыл халҡы менән осрашып, бик һуң ғына ҡайта торғайны. Йөрәге ярылырҙай хәбәрҙәр эсенә һыймай башлаһа, әсәйем менән төнө буйы һөйләшеп ултырғандары иҫтә. Иманым камил: һайлаусылар алдында уның намыҫы таҙа. “Ғүмер бер генә” романында үҙе кисергән, көрәшкән һәм йәшәгән ваҡиғалар яҙылған.

**Миләүшә.** Ҡыҙғаныҫҡа күрә, ул ваҡыттарҙы йүнләп иҫләмәйем. Ләкин, уйлауымса депутатлыҡҡа үҙ кандидатураһын тәҡдим итеү атайымдың эшмәкәрлегендә бер яңы этап, тәжрибә булғандыр. Сөнки кеше бер урында оҙаҡ эшләп, бер үк нимәләр менән шөғөлләнһә, бәләкәй генә булһа ла асыштар яһамаһа, деградацияға бирелә башлай. Оло шәхес гел яңы белемгә, бейеклектәргә үрләргә тейеш, шул саҡта ғына ул үҫә һәм йәмғиәткә һөҙөмтәле йоғонто яһай ала. Шулай итеп, атайым өсөн дә депутатлыҡҡа һынау үтеү үҫеш этабы ғына булғандыр, тип уйлайым.

***- Динис Бүләковтың әҫәрҙәре Ғәлимов Сәләм, Салауат Юлаев исемендәге премияларға лайыҡ булғас, бындай шатлыҡлы ваҡиғаларҙы ғаиләгеҙҙә нисектер билдәләнегеҙме?***

**Ләйсән.** Беҙ атай менән һәр ваҡыт ғорурлана инек.

**Зөһрә.** Ундай шатлыҡлы ваҡиғаларҙы өйҙә, йә Аҡманайҙағы баҡсала дуҫтары, күршеләр, яҙыусылар менән бергәләп билдәләгәндәре иҫтә. Шиғырҙар, хикәйәләр бәйгеһе, йырҙар менән бергә сорналып бара торғайны. Бик күңелле матур мәлдәр ине.

**Миләүшә.** Был һорауға ла аныҡ ҡына яуабым юҡ, сөнки бәләкәй булғанлыҡтан иҫләмәйем, ләкин беҙҙең ғаилә юҡ ҡына ваҡиғанан да байрам яһау талантына эйә. Дәфтәрҙәге “бишле” булһынмы, яңы затлы әйберме, баҡса миҙгелен асыумы, бәрәңге ҡаҙыумы - әсәйем йәһәт кенә тәмлекәстәр бешереп, атайым ҡунаҡ саҡырып, йә булмаһа, үҙ ғаиләбеҙ менән генә (ә беҙ үҙебеҙ ҙә күмәкбеҙ) рәхәтләнеп сәй эсеп, һөйләшеп, серләшеп, йырлашып ултырыуҙар элек тә бик йыш ине, әле лә шул ҡанундарҙы боҙмаҫҡа тырышабыҙ. Әсәйемдең һүҙҙәре гел ҡолаҡ төбөндә: “Миләш, байрам кәйефе үҙеңдән башлана!”

***- Был донъянан үҙенең шулай иртә китерен һиҙмәнеме икән?.. Нишләптер, уның тураһында телевизион тапшырыуҙы ҡарағас, хушлашып йөрөгәндәй тойоп, күңелдә шундай һиҫкәнеү һәм моңһоу уйҙар ҡайнаны. Һеҙгә бер нәмә лә белдертмәнеме?***

**Ләйсән.** Беҙҙең нәҫелебеҙ өсөн 50 йәш - ул бик мөһим һынау осоро. Атайым яғынан күбеһе ошо йәштә яҡты донъянан киткән. Өләсәйҙе генә алғанда ла... Атайым, әлбиттә, быны белә һәм аңлай ине. Күрәһең, уның йөрәгенә лә ошо йәш сиге инеп “ояламғандыр”...

**Зөһрә.** Атайымдың әсәһе Нәғимә Бикбулат ҡыҙы 51 йәше тулыр-тулмаҫтан был донъянан китә. Миңә ни бары бер генә йәш булған ул саҡ. Атайым да гел: “Әсәйемдең йәшенә етһәм ине”, - ти торғайны. Бәлки, был күңел һиҙемлеге булғандыр. Белмәйем. Ҡыҙғаныста күрә, атайым да, Нәғимә өләсәй һымаҡ, 50 йәшен гөрләтеп үткәреп, 51 йәше тулыуға һанаулы ғына көндәр ҡалғас, 1995 йылдың 14 мартында, арабыҙҙан китте.

**Миләүшә.** Һиҙгәндер, тип уйлайым. Атайымдың 50 йәшенә төшөрөлгән документаль фильмды ҡараған һәр кеше лә минең менән риза булыр.

***- Әсәйегеҙ Рәйлә апайҙың үҙенең дә яҙышҡанын беләбеҙ. Динис ағайҙың әҫәрҙәренең тәүге уҡыусыһы ла, тәнҡитсеһе лә, машинкала баҫыусыһы ла булған. Улар әҙәбиәт һәм яҙыусылар тураһында йыш фекер алыша инеме?***

**Ләйсән.** Атайым һәм әсәйем студент ваҡыттарында Өфөлә осраша. Ул саҡтарҙа әҙәби кисәләр бик йыш үткән. Шуларҙың береһендә атайым буласаҡ әсәйебеҙгә, Рәйлә исемле ҡыҙға, иғтибар итә. Ә ул матур ҙа, белемле лә, киң ҡарашлы, аҡыллы ҡыҙ була. Шулай танышып китәләр.

Атайым - Башҡортостандың көньяғынан, әсәйем - төньяғынан. Бергә йәшәгән йылдарҙа икеһе лә бер-береһен ишетә лә, тыңлай ҙа белде. Әлбиттә, тормоштоң төрлө ваҡыттары ла булды уларҙың ғүмерендә. Ләкин әҙәбиәт менән сәнғәт, рухи донъя атайым һәм әсәйем өсөн иң мөһим төшөнсә булып ҡалды. Ауыр 90-сы йылдар... Ҡиблалар буталған саҡ, халыҡ нисек йәшәргә, нимәне ҡайҙан табырға белмәй ҡаңғыра, ә әсәйем менән Фәрҙиә апай Әлибаева аш бүлмәһендә бер сынаяҡ сәй артында әҙәбиәт яңылыҡтары, яңы әҫәрҙәр тураһында һөйләшеп ултыра. Улар һәр ваҡыт донъя ығы-зығыһынан өҫтөн булды.

**Миләүшә.** Әҙәбиәт темаһы ғаиләбеҙҙә, бигерәк тә атайым менән әсәйемдең мөнәсәбәтендә, бик ҙур урын алып торҙо. Бала сағымда хатта аптырай торғайным: нисек әҫәр сюжеты, стилистикаһы, етешһеҙлектәре, отошло яҡтары, яҙыусылар, йә, ғөмүмән, башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш

тенденциялары тураһында шул хәтлем мауығып, сәғәттәр буйы фекер алышыу мөмкин икән?!!

- ***Динис ағай арабыҙҙан киткәс, Рәйлә апай уның хаҡындағы иҫтәлектәр китабын әҙерләп сығарҙы. Тыуған ауылы Арыҫландағы мәктәпкә Динис Бүләков исемен биреүҙе юлланы, һәйкәлен эшләттерҙе, йыл һайын мотлаҡ тыуған көнөндә хәтер һәм ҡәҙер кисәләрен ойоштороуҙы, уҡыусылар араһында Динис Бүләков исемендәге премия булдырыуҙы, музейын асыуҙы хәстәрләне. Тағы ла беҙ белмәгән ниндәй эштәр башҡарҙы икән үҙе лә оҙаҡ йылдар ныҡ ауырыған әсәйегеҙ, көслө рухлы яҙыусы ҡатыны Рәйлә апайыбыҙ?***

**Ләйсән.** Әсәйем хас декабрист ҡатыны булды. Атайымдың рухы, таланты хаҡына барыһын да эшләне. Тимур кейәү әйтеүенсә, әсәйебеҙ, ҡаты ауырыуына ҡарамаҫтан, карауатында ятҡан көйө ике ҡулында ике телефон тотоп донъяға идара итер ине. Ул оло йөрәкле кеше булды, бөтәһенә лә иғтибары, йылы һүҙе етте: беҙгә лә, дуҫтарына ла, таныштарына ла. Ябай нәмәләрҙә лә йәм күрә белде, тормоштоң бар яҡтарын да ихлас яратып йәшәне. 2000 йыл башында әсәйемдең мәктәп балаларына автобус биреүҙе юллауы иҫемдә. Һуңынан уға был уйҙың ҡайҙан килгәнен һорағайным, үҙенең бәләкәй сағында һигеҙ саҡрымдағы күрше ауыл мәктәбенә йөрөгәнен һөйләне. Бәләкәй Рәйлә шул араны көн дә үткән. Ошо ауырлыҡтар онотолмаҫлыҡ булып иҫендә ҡалған, шуға ла бөгөнгө балаларға уҡыу еңелерәк булһын тип хәстәрлек күргән, автобус юлларға ярҙам иткән.

**Зөһрә.** Әсәйем ғүмер буйы атайыма тоғро булды. Уға ҡарата мөхәббәтен, ихтирамын атай үлгәс тә оҙаҡ йылдар ҡәҙерләп һаҡланы. Яңы китаптарын сығарҙы, иҫтәлеген яңыртып осрашыуҙар үткәреп торҙо. Әсәйем атайымдың тормошо менән йәшәне.

**Миләүшә.** Әсәйем атайымдан һуң егерме йыл ғүмер итте, шул ваҡыттың һәр көнөн “Динис” тип башланы. Уларҙың араһында ир һәм ҡатын араһындағы мөхәббәт кенә түгел ине. Әсәйем атайыма талантлы, юғары кимәлдәге, телде “һиҙгән” яҙыусы итеп һоҡланып ҡараны. Ә инде әҙиптәрҙең төрлөләре булыуын ярты ғүмерен китап нәшриәтендә эшләгән әсәйем бик яҡшы белә ине. Ҡаты ауырыуына ҡарамайынса, көн һайын тигәндәй ул атайымдың ижадын, исемен мәңгеләштереү маҡсатына табан дәртләнеп атлай бирҙе...

Егермегә яҡын китабын нәшер итте, уларҙың исем туйҙарын, әҙәби осрашыуҙар ойошторҙо... Нөгөш һыуһаҡлағысында “Динис Бүләков” исемендәге теплоход йөҙә, Өфө, Сибай, Мәләүез ҡалаларында, атайымдың тыуған ауылында “Динис Бүләков”" урамдары бар.

Әгәр ҙә һуңғы йылдарҙа һаулығы нык хөртәймәһә, әсәйем тағы ла әллә нисә проектты тормошҡа ашырыр ине. Рәйлә Бүләкова һәр кемдең күңелендә зирәк, көслө рухлы, тырыш, аҡыллы, бик теүәл, маҡсатына өлгәшә белгән ҡатын булараҡ ҡалды һәм шулай ҡаласаҡ. Һоҡланғыс ҡатын ине әсәйебеҙ...

***- Инде әсәйегеҙҙең вафатына ла байтаҡ йылдар үтте. Әммә ул васыят итеп ҡалдырған аманатты - йыл һайын атайығыҙҙың хәтер һәм ҡәҙер кисәләрен үткәреүҙе - һеҙ, өс ҡыҙы, йыл да үтәйһегеҙ. Ундай ҡәҙер – хөрмәт һәр әҙипкә лә тәтемәй. Быңдай рухи тәрбиәне һеҙ, әлбиттә, атайығыҙҙан да, әсәйегеҙҙән дә алғанһығыҙҙыр...***

**Ләйсән.** Шулай килеп сыҡты: мин үҙебеҙҙең төп ғаиләнән иртә айырылдым һәм күберәк уның физик яғына яуаплы булдым. Шөғөлөм әҙәбиәт өлкәһенә ҡарамай. Зөһрә менән Миләүшә - беҙҙең рухи етәкселәребеҙ. Зөһрә әсәй менән бергә атайҙың әҙәби эшмәкәрлеген өйрәнде, университетта диплом эше лә ҡәҙерлебеҙҙең ижадына арналды. Теләһә, кандидатлыҡ диссертацияһын да яҙа алған булыр ине, сөнки Зөһрә әҫәрҙәрҙе фәнни күҙлектән баһалай ине.

Ә Миләүшә - беҙҙең төпсөгөбөҙ, уның күңеленә атай менән әсәй үҙҙәренеке кеүек өлкәндәрсә уй-тойғо һеңдергән, шуға күрә лә арабыҙҙа иң аҡыллыһы.

**Миләүшә.** Әлбиттә, был - ата-әсәмдең тәрбиәһе, васыяты. Атайым арабыҙҙан киткәс, әсәйемдең иң мөһим ҡағиҙәһе шул булды: “Балалар, һәр нәмәлә атайығыҙҙың тәртибен тоторға кәрәк!” -тип әйтә торғайны. “Атайымдың тәртибе” беҙҙең йәшәү принцибына әйләнде. Мин үҙемдең балаларыма ла шундай уҡ рухи тәрбиә бирергә тырышам. Шулай итеп, Рәйлә менән Динис Бүләковтарҙың васыяттары ейән - ейәнсәрҙәренә лә күсте...

***- Үҙегеҙҙең ғаиләләрегеҙ менән дә таныштырып китһәгеҙ ине. Рәйлә менән Динис ағйҙың ҡыҙҙары ниндәй һөнәр һайлап, ҡайҙарҙа эшләп йөрөй, атай-әсәйҙәре рухын ниндәй уңыштары менән ҡыуандыра? Бүләковтарҙың нисә ейән-ейәнсәре үҫә, улар ни менән шөғөлләнә?***

**Ләйсән.** Кейәүҙәмен, өс балаға әсәймен, табип.

**Зөһрә.** Мин “Юлдаш” мәғлүмәт һәм йыр-моң каналында мөхәррир булып эшләйем, ирем Марс - Эске эштәр министрлығы системаһында. Лилиә исемле ҡыҙыбыҙ бар һәм ейәнебеҙ Арыҫлан үҫә.

**Миләүшә.** Атайым минең һөнәр алғанымды, кейәүгә сыҡҡанымды күрә алманы, үкенескә күрә. Ә әсәйем, Аллаға шөкөр, ирем Тимурҙы ла яҡын күрҙе, ике баламды ла һөйөп өлгөрҙө. Мин бының өсөн Аллаһ Тәғәләгә нык рәхмәтлемен. Ҡыҙыбыҙ Сәмирә икенсе класта уҡып йөрөй, китап уҡырға ярата, теннис менән мауыға.Улыбыҙ Кәрим балалар баҡсаһына йөрөй, футбол буйынса спорт мәктәбендә шөғөлләнә. Әлеге ваҡытта иремде Ҡырым

Республикаһына эш буйынса ебәрҙеләр. Әсәйем: “Ирең ҡайҙа - урының шунда”, - тип өйрәтә ине, шуға беҙ ҙә, оҙаҡ уйламайынса, бергәләшеп ваҡытлыса күсеп киттек. Әле Ҡара диңгеҙ буйында йәшәйбеҙ. Әммә тыуған яҡтар, туғандар бик ныҡ һағындыра...

***- 2012 йылда Динис Бүләковтың “Ғүмер бер генә” һәм “Килмешәк” романдары Төркиәлә баҫылып сыға. Гаази университеты уҡытыусыһы Нигяр Ҡалҡан ошо әҫәрҙәр буйынса докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. Был һеҙҙең өсөн көтөлмәгән ваҡиға булдымы?***

**Зөһрә.** Әлбиттә, минең өсөн был көтөлмәгән шатлыҡлы хәбәр булды. Атайымдың баҡыйлыҡҡа күсеүенә 20 йылдан ашыу ғүмер үткән, ә сит илдә тәржемә менән ике ҙур романы баҫылып сыға... Ундай хөрмәт иҫән булғандарға ҡай саҡ тәтемәй. Тимәк, атайыбыҙҙы онотмайҙар, әҫәрҙәрен уҡыйҙар, тормош юлы менән ҡыҙыҡһыналар, хатта ки тыуған яғында ғына түгел, сит ерҙәрҙә лә диссертация яҡлайҙар.

***- Аҙаҡ Нигяр Ҡалҡан төрөк телендә сыҡҡан китаптарҙы Башҡортостанға алып килә, ҡышҡы һалҡын көндәрҙә Динис ағайҙың тыуған яғы Мәләүез районында, Арыҫлан ауылында ла була. Һеҙҙең менән дә осрашҡандыр. Ул Динис Бүләков ижады хаҡында ниндәй фекерҙәрен еткерҙе? Был әҫәрҙәр уға нисек килеп юлыҡҡан һәм ни өсөн тап ошо романдарҙы тәржемәләү эшенә тотонған икән?***

**Ләйсән.** Был донъяла һәр ғәмәл беҙгә нимәгәлер бирелә. Эштең уңышлы килеп сығыуы ла - алдан планлаштырыу һөҙөмтәһе, минеңсә. Әсәйем ғүмерен әҙәбиәт менән бәйләй һәм егерме йылдан ашыу “Китап” нәшриәтендә эшләй. Дәреслектәр, китаптар баҫтырыу өсөн хөкүмәттән аҡса бүлдереүҙе хәстәрләй. “Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре” тигән маҡтаулы исемде лә бушҡа ғына бирмәгәндәрҙер уға. Тырышлығы, эшһөйәрлеге, әҙәбиәткә һөйөүе өсөн лайыҡ булды был наградаға. Әйткәндәй, әсәйем башҡорт әҙәбиәте Рәсәй кимәленә күтәреү хыялы менән янып йәшәне. Атайымдың талантлы, үткер, заманса романдарының төрөк теленә тәржемә ителеүе әсәйемдең хыялын ил генә түгел, ә донъя кимәлендә тормошҡа ашырҙы.

**Зөһрә.** Эйе, декабрь айының сатлама һалҡын көндәренең береһендә Төркиә ҡунаҡтары - Гаази университеты уҡытыусыһы Нигяр Ҡалҡан һәм Анкара ҡалаһының Этймесгутг районы мэры урынбаҫары Сонат Алааттин килде. Башта Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбленең концерт залында китаптың исем туйын үткәрҙек, һуңынан Мәләүез районы Смаҡ ауылына юл тоттоҡ. Унда мәктәптә халыҡ менән осрашыу ойошторҙоҡ, музейҙы күрһәттек. Шунда Нигяр Ҡалҡан барыһына ла рәхмәт әйтеп, атайым менән таныш булмаһа ла, уның әҫәрҙәре аша тыуған

еренең матурлығы һәм ауыл халҡының шундай ҡунаҡсыл, ихлас булыуын күреп, уны шулай күҙ алдына баҫтыра инем, тип әйткәйне.

Ни өсөн тап ошо романдар? Күрәһең, тел байлығы, әҫәрҙәрҙең бөгөнгө тормошто асыҡ итеп биргәне менән арбағандыр...

***- Динис ағайҙың бәләкәй ҡыҙы Миләүшә башланғыс класта уҡ "Аҡбуҙат" журналында бер уҡыуҙан ятлап алырлыҡ матур шиғырҙар баҫтыра торғайны. Беҙҙә хатта, был ҡыҙ атаһының юлын дауам итмәҫме икән, тигән өмөт тә тыуғайны. Белеүебеҙсә, Миләүшә, матбуғатта күренмәһә лә, яҙышыуын ташламаған, күңел дәфтәренә тулышҡан хистәрен ҡағыҙ биттәренә лә төшөрә бара икән. Уларҙы берәй ҡасан уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итергә уйлаймы?***

**Ләйсән.** Эйе, Миләштең таланты бар, нисек кенә тыйып тоторға тырышһа ла, ул ташҡын шикелле бер урғылыр.

**Зөһрә.** Миләүшәбеҙ шиғырҙар яҙа. Бәлки, берәй ваҡыт уларҙы айырым китап итеп күрербеҙ.

***- Динис Бүләков менән Сафуан Әлибаев дуҫтар булды. Бер йортта, бер подъезда йәшәнеләр, бер-береһе менән көн дә тиерлек аралаштылар. Ҡатындары Рәйлә апай менән Фәрҙиә апай ҙа иҫ китмәле аҡыллы, сабыр ине, тоғро дуҫлыҡтары ғүмер ахырҙарына тиклем дауам итте. Балалары ла бер туғандай булды. Белеүебеҙсә, әҙиптәрҙең дуҫлығына көнләшеүселәр ҙә, араларын боҙорға теләүселәр ҙә булған. Алама уйлы бәндәләрҙең хаслығы сәбәпле Динис ағай менән Сафуан ағайҙың араһына һалҡынлыҡ үтеп өлгөрмәнеме?***

**Ләйсән.** Башҡаларҙың уңышҡа өлгәшеүенә барыһы ла ҡыуана алмай шул, тик көслө рухлы, бәхетле кешеләр генә бүтәндәрҙең ҡаҙаныштарына шатлана. Ә инде Динис менән Сафуандың, шулай уҡ Рәйлә менән Фәрҙиәнең дуҫлыҡтарына күптәр көнләшерлек ине!

**Миләүшә.** Юҡ, атайым менән Сафуан бабай һуңғы көндәренә тиклем дуҫлығына тоғро ҡалды. Атайым вафат булғандан һуң да Әлибаевтар ғаиләһе менән бик дуҫ йәшәнек. Әле лә мин Сафуан бабай менән Фәрҙиә апайҙың улы Салауат менән яҡшы мөнәсәбәттә, бер-беребеҙҙең хәл-әхүәлен белешеп торабыҙ.

***- Ике яҙыусының баҡсалары ла бер урында булды. Ижадтан, өй мәшәҡәттәренән тыш ваҡыттарында "Аҡманай" тигән гүзәл тәбиғәт ҡосағында улар нисек аралашты? Ғөмүмән, Динис ағай ниндәй баҡсасы ине, унда нимәләр эшләй торғайны?***

**Миләүшә.** Беҙҙең баҡса - минең өсөн тылсымлы урын. Ҡайҙа ғына йөрөһәм дә, ул гел йөрәгем түрендә.

Атайым менән әсәйем өсөн, шулай уҡ Әлибаевтар, Бикбаевтар, Туғыҙбаевтар һәм башҡа яҙыусы - баҡсасылар өсөн дә был урын илһам шишмәһе булғандыр. Урман араһында урынлашҡан егерме өйҙөң бер ғаилә кеүек сикһеҙ дуҫ йәшәүе күбеһен һоҡландыра ине. Көндөҙ баҡса эштәре менән булып, кистәрен эскәмйәлә ултырышып “шиғриәт байрамдары” үткәрә инеләр: бер-береһенә яңы шиғырҙарын, әҫәрҙәрен уҡып, йырҙар йырлап, әҙәбиәт, мәҙәниәт тураһында танһыҡтары ҡанғансы һөйләшеп, көлөшөп матур йәйҙе уҙғара торғайнылар. Шунда беҙ ҙә, бер өйөр бала-саға, баҡсаны геү килтереп уйнап, бәхеткә сумып үҫтек... Хәҙер инде балаларыбыҙ ҙа баҡса буйлап бер өйөр булып рәхәтләнеп йүгереп ҡояшта ҡыҙынып йәй үткәрә.

***- Динис ағайҙың уҡыусылар белмәгән ниндәй шөғөлдәре, һәнәрҙәре бар ине?***

**Ләйсән.** Аҡманай юҡҡа ғына “аҡ” һүҙенән башланмайҙыр. Унда бөтә нәмә аҡ һәм саф ине. Бала саҡтың иң бәхетле мәлдәре! Бер ниндәй ҙә хәсрәт юҡ, күңелдәр һөйөү менән тулы, тирә-яғыбыҙҙы дуҫлыҡ уратып алған. Ул йылдар - үҙе тотош дәүер. Атайҙың ҡулдары алтын ине, ул бөтә нәмәне эшләй белде, эш ҡоралдары ла иң яҡшылары ине, иң һәйбәт уңыш та беҙҙә булғандыр. Ысын ирҙәр башҡара торған бөтә ғәмәлдәрҙе теүәлләне: йорт һалды, ағас ултыртты, егеттәргә торошло өс ҡыҙға атай булды. Хас Чеховса: өс апалы-һеңлеле һәм сейә баҡсаһы

**Миләүшә.** Атайым ысын ир кеше ине, уға етмеш төрлө һәнәр ҙә әҙ булды. Ҡулынан килмәгәне юҡ ине тиерлек. Өй төҙөү, нимәлер йүнәтеү, электр уты үткәреү, төрлө инструменттар менән эшләү - барыһын да белде. Ҡолаҡ артына ҡәләм ҡыҫтырып, ниндәйҙер көйҙө һыҙғыра-һыҙғыра эшләп йөрөгәндәре күҙ алдыма йыш килә. Моғайын, әҫәрҙәренең сюжеттары тураһында фекер туплап йөрөгән саҡтары ла булғандыр шундай мәлдә.

Үҙенең зәңгәр “Нива”һын рәткә килтерергә, ремонтларға ярата ине... Йәй көндәре түтәлдәрҙә яңы сығып килгән кишерҙәрҙе һирәкләтә торғайны: һуҙылып ятып, бәләкәс кенә үҫентеләрҙе уйлана-уйлана йолҡҡаны хәтерҙә ҡалған.

***- Сафуан ағайҙан башҡа, Динис ағайға тағы кемдәр айырыуса яҡын дуҫ булды? Өйөгөҙгә ниндәй яҙыусылар йышыраҡ килә ине?***

**Ләйсән.** Ысын дуҫтар күп булмай. Атайым һәм әсәйем йәш саҡтарында “әҙәби кисәләр” үткәрә торғайны. Рәми Ғарипов, Сафуан Әлибай, Рауил Бикбаев үҙенең шиғырҙарын уҡый, Роза Сәхәүетдинова пианинола, Фәрҙиә Әлибаева скрипкала уйнай, әсәйебеҙ дәртләнеп бейей ине ул байрамдарҙа. Атайым менән әсәйем бик ҡунаҡсыл булды. Башҡортостандың Яҙыусылар һәм Журналистар союздарының ул саҡтағы бөтә ағзалары ла тиерлек килгәндер беҙгә. Атайым Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Кәтибә

Кинйәбулатованың кәңәштәрен бик юғары баһаланы. Билдәле кешеләр араһынан шулай уҡ Рәсүл Ғамзатов, Ринат Мөхәмәҙиев, Әхиәр Хәкимовтарҙың өйөбөҙҙә булғаны иҫемдә. Фатирыбыҙ ишеге барыһы өсөн дә асыҡ булды.

**Зөһрә.** Атайым менән әсәйем бик ҡунаҡсыл кешеләр ине. Шуға ла беҙҙең өйҙә кемдәр генә булмағандыр ул? Ғаилә дуҫтары ла, яҙыусылар ҙа, дуҫтар ҙа, күршеләр ҙә, ауылдаштар ҙа, хатта белмәгән кешеләр ҙә - барыһына ла ишегебеҙ асыҡ ине.

***- Динис ағай бәләкәйҙән әсәһе менән генә үҫкән. Атаһының иҫән булыуы хаҡында аҙаҡ, хатта ғүмеренең һуңғы йылдарында ғына белгән, буғай. Улар осрашҡан да шикелле. Атайлы килеш етем үҫкән Динис ағай атаһы Мөҙәрис ағайға рәнйеш-үпкәләрен белдерҙеме икән, әллә ирҙәрсә аңлашҡандармы? Был хаҡта һеҙгә низер һөйләмәнеме?***

**Ләйсән.** Ҡайһы саҡта, бәлки, яҙмыш боролоштарына рәхмәт әйтергә лә кәрәктер. Әгәр ҙә атайҙың тормошо икенсе юлдан китһә, ул әлегесә бөйөк шәхес булмаҫ ине.

... Атаһының барлығы хаҡында ул һәр ваҡыт белде. Тик олатай булаһы кеше генә уны улы итеп танып, танышырға, аралашырға ашыҡмаған. Шуның өсөндөр ҙә, бәлки, Хоҙай уға башҡа ир бала бирмәгән, гел ҡыҙҙары булған. Беҙ атай менән ул йәшәгән ауыл аша, ҙур, матур өйө эргәһенән ҡарап үтеп китә торғайныҡ. Атайымды һуңғы юлға оҙатырға килгәндә яҡындан таныштыҡ, йөҙөндә үкенес һәм берҙән-бер улын юғалтыу ҡайғыһы ине...

***- Динис ағайҙың күҙҙәрендә, хатта йылмайған, көлгән сағындала, ниндәйҙер тәрән һағыш, һыҙланыу сағылған һымаҡ була торғайны. Был ауыр бала саҡ мисәтеме, әллә яҙыусылыҡ, яуаплы вазифалар, донъяның мең хәсрәттәре һәм хәстәрҙәренең сағылышымы, әллә башҡа сәбәптәре булдымы икән - һеҙ нисек уйлайһығыҙ?***

**Ләйсән.** Атай нескә күңелле философ ине. Мәңгелек ҡиммәттәребеҙҙең емерелеүен бик ауыр кисерҙе.

**Зөһрә.** Атайымдың күҙҙәрендә барыһын да күреп була ине. Унда һағыш та, һыҙланыу ҙа, бәхет тә, шатлыҡ та, мөхәббәт тә - барыһы ла сағылды.

***- Динис ағайҙың “Төнгө ожмах” тигән пьесаһы ла бар бит. Уны берәй театр ҡуйҙымы икән?***

**Зөһрә.** Эйе, атайым “Төнгө ожмах” тигән пьеса яҙғайны. Ваҡытында уны Азат Нәҙерғолов сәхнәләштерәм тип тә ышандырғайны. Бәлки, берәй заман ҡуйырҙар.

***- Әгәр бөгөн иҫән булһа, атайығыҙға элек әйтә алмаған ниндәй һүҙҙәрегеҙҙе еткерер инегеҙ?***

**Ләйсән.** Атай менән беҙ бөтә нәмә хаҡында ла һөйләшә инек. Мин уға: “Рәхмәт, атай, мин һине яратам!” - тип әйтер инем.

**Зөһрә.** “Атай, барыһы өсән дә рәхмәт!”

**Миләүшә.** Әйтер һүҙҙәр бик күп шул, үкенескә күрә... Ләкин иң мөһиме ошолай яңғырар ине, моғайын: “Атай, мин һине бик ныҡ яратам! Барыһы өсөн һиңә ныҡ рәхмәтлемен!”

***- Сафуан ағайҙың ҡатыны Фәрҙиә апай Рәйлә апайҙың яҙған китабы тураһында һөйләгәйне. “Мә, уҡып ҡара ла фекереңде әйтерһең”, - тип бирһә лә, “Тотошлай тамамлағас, уҡырмын” тип әйтеүенә үкенесен белдергәйне. Икенсе осрашҡанда ул Рәйлә апайҙы баҡсала ҡалын-ҡалын дәфтәрҙәрен янып ятҡан мейескә ташлаған мәлендә тап итә. “Ниңә улай иттең инде?" – тигәс, Рәйлә апай: “Балаларыма ауырлығы төшмәһен тинем”, - тип яуаплай ...***

***Һеҙ әсәйегеҙҙең нимә хаҡында яҙғанын белә инегеҙме? Ниндәй дөрөҫлөктө асып һалыуҙан һеҙҙе ҡурсаланы икән? Был турала үҙегеҙ менән һөйләшкәне булманымы?***

**Миләүшә.** Ысынлап та, был китап булды. Әсәйемдең йәй буйы яҙышҡаны һаман күҙ алдымда... Әммә, китаптың нимә хаҡында хаҡында булғанын белһәм дә, башҡаларға быны асыуҙы әсәйем хупламаҫ ине.

- ***Атайығыҙ һәм әсәйегеҙ хаҡында тағы нимәләр һөйләргә теләр инегеҙ?***

**Зөһрә.** Һүҙҙең һуңында атайым уҡыған һәм тыңлаған, уның бар булмышын сағылдырған, ут күршебеҙ Сафуан бабайҙың “Матурлыҡ” шиғыры менән тамамлағы килә. Ни өсөн тигәндә, матурлыҡты тоя белеү, уны кешеләргә өләшеү – ул үҙе бер бәхет.

Был донъяның бар йәмдәрен тойоп
Йәшәй белеү - үҙе матурлыҡ;
Ил-көнөндә аҙмы моң-ауаз бар
Йырҙар юлдарына ятырлыҡ.
Киңлектәре ерҙең иҫ китерлек,
Һауалары һулап туйғыһыҙ.
Алда күпме ғүмер булғанда ла,
Һүнмәҫтер ул йәшәү тойғоһо!
Сылтыр-сылтыр шишмә йыр башланы,
Ағастарҙа бөрө тулышҡан.
Донъя ҡапыл шаңдап китер һымаҡ
“Әс-сәй!” тигән тәүге тауышҡа.
Был донъяла бөтәһе лә матур,

Ҡабатланмаҫ иртә, кистәре;
Кешеләрҙе ҡалай матур итә
Матурлыҡты тойоу хистәре.
Был донъяның бар йәмдәрен тойоп
Йәшәй белеү - үҙе матурлыҡ;
Китеп барһаң теге донъяларға,
Әмәлдәр юҡ кире ҡайтырлыҡ...
Йәшәй белеү - шиңмәҫ матурлыҡ!

**Нияз МӘҺӘҘИЕВ һәм Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА әңгәмәләште.**

**Ҡотлогилдина, З. Ижады бәхетле [Текст] / З. Ҡотлогилдина // Йәншишмә. – 2019. – 17 май. – Б. 7.**

Электә яҙғаным булды: ижадтарында балалар әҙәбиәтенә тоғро әҙиптәр бик һирәк. Шуларҙың береһе - күренекле яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Динис Бүләков. «Мактансык Зариф» тигән тәүге хикәйәһе менән оло әҙәбиәт донъяһына килеп ингән әҙип (әйткәндәй, ул тап «Башкортостан пионеры» - хәҙерге «Йәншишмә» гәзитендә донъя күрә) аҙаҡ балаларҙың иң яраткан яҙыусыһына әйләнә. «Аҡбуҙ алышҡа сыға», «Упҡын ситендә бейеү», «Саған япраҡ яңырта», «Эҫе ҡар, йәки ҡыҙыма һөйләгән хикәйәләр», «Тыҡрыҡ башы - беҙҙең биләмә» повестары үҫмерҙәрҙең уҡымлы әҫәрҙәре булды, һуңғы повесы хаҡында айырым билдәләп үтергә кәрәк. Сөнки уны автор редакцияның махсус заказы буйынса яҙҙы. Башҡортостан радиоһы һәм телевидениеһы буйынса дәүләт комитеты етәксеһе булып эшләгәндә, вазифаһының үтә яуаплылығына ҡарамаҫтан, вәғәҙә - иман, тип беҙҙең һорауҙы үтәне. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был яҙыусының һуңғы әҫәре булды. Уны гәзитебеҙҙә үҙенең вафатынан һуң баҫтырып сығарҙыҡ.

Тағы шуныһын билдәләп китергә кәрәк: балалар матбуғатында ярты йыл буйына баҫылған әҫәрҙәр бер-ике генә. Билдәле яҙыусы Фәрит Исәнғоловтың «Ҡайҙа һеҙ, Питер малайҙары?» романы шулай гәзит биттәрендә оҙайлы ваҡытта сыҡһа ла, балалар уның һәр һанын түҙемһеҙлек менән көтөп ала торғайны. Был юлы Динис Бүләковтың «Тыҡрыҡ башы - беҙҙең биләмә» повесы ла апрель айынан башлап октябргәсә балаларҙы мауыҡтырғыс донъяла сәйәхәт иттерҙе.

Ул балалар әҙәбиәтендә тәүге тапҡыр ҡыҙҙар һәм малайҙар араһындағы дуҫлыҡ хистәре тураһында яҙҙы, бәлки, шуғалыр ҙа үҫмерҙәр авторҙың үҙҙәренә тәғәйенләнгән әҫәрҙәрен айырыуса көтөп ала һәм яратып уҡый ине.

Әйтеп үткәнебеҙсә, яҙыусы Динис Бүләков ҙур вазифалы урындарҙа эшләне. Балалар өсөн ижад итеүенең бер сәбәбе «Пионер» (хәҙерге «Аманат») журналының баш мөхәррире булыуындалыр, тип уйлаһаҡ, икенсеһе, әлбиттә, үҙенең дә өс ҡыҙ үҫтереүенә ҡайтып ҡалалыр. Сөнки ул шул тиклем иғтибарлы атай, хәстәрлекле хужа, тормош иптәше Рәйлә апайға тоғро ир, таяныс була. Оло ҡыҙы Ләйсән тураһында, маҡтанып, малайҙарҙан эшлеклерәк, тип әйтеүендә хаҡлыҡ бар. Баҡсаларында төҙөлөш барғанда Ләйсән, бәләкәй булһа ла, ҡайҙа ниндәй таҡта, ниндәй сөй кәрәклеген белеп тороп, атаһының уң ҡулына, ышаныслы ярҙамсыһына әйләнә.

Балалары хаҡында һүҙ сыҡҡас, алғараҡ китеп булһа ла, улар хаҡында әҙерәк мәғлүмәт биреп китһәк, урынлы булыр. Ләйсән табип һөнәрен һайлаған, өс бала тәрбиәләй. Уртансыһы Зөһрә - журналист, Башҡортостан «Юлдаш» радиоһында эшләй, бер ҡыҙ үҫтерә. Кесеһе Миләүшә - дәүләт эшендә, ике бала әсәһе.

Миләүшә бәләкәй сағында ук шиғырҙар яҙа торғайны. Улар «Аҡбуҙат» журналында баҫылып сыҡҡас, үҙе кеүек бәләкәстәр бер уҡыуҙан яттан һөйләп йөрөнө. Әле лә яҙыуынан айырылмаған. Киләсәктә, бәлки, уның шиғырҙар китабын ҡулыбыҙға алып танышыу бәхетенә лә өлгәшербеҙ әле. Иншалла, шулай булһын.

Яҙыусы Динис Бүләковтың өлкәндәр өсөн ижады айырыуса иғтибарға лайыҡ. «Ҡояш ярсығы» тигән тәүге хикәйәләр китабының ҡул арты еңел булды. Бер-бер артлы повестары, романдары донъя күрҙе.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе булып эшләгәндә ун ике әҙип Башҡортостандың Юғары Советына депутатлыҡҡа үҙ кандидатураларын күрһәтә. Шулар араһында ун беренсе саҡырылышта депутат булып һайланып, тәжрибә туплаған Динис Бүләков менән бергә Мостай Кәрим, Ноғман Мусин, Булат Рафиҡов, Ғәзим Шафиҡов кеүек күп күренекле әҙиптәр була. Ләкин, үкенескә күрә, депутатлыҡҡа бер генә яҙыусы ла үтмәй. Халыҡ менән осрашыуҙарҙа буш вәғәҙәләр биреп, аҡсалар, сәй - шәкәр таратып, заводтарҙың байлығы иҫәбенә «йомарт» булып йөрөгән етәксе ишараттары, хатта төрмәлә ултырып сыҡҡан бурҙар, енәйәтселәр үтеп китә. Шуларҙы күреп йөрөп, ғибрәт итеп, «Ғүмер бер генә» тигән романын яҙа. «Туҙҙырылған тамуҡ» романы ла заманында ярайһы шау-шыу тыуҙырған әҫәр булды.

Динис Бүләковтың тормош иптәше Рәйлә апай «Китап» нәшриәтендә эшләй, әҙәбиәт донъяһын яҡындан белә, хатта үҙе лә яҙыша. Ул Динис

ағайҙың китаптарының Рәсәй, хатта донъя кимәленә сығыуын теләй. Был хыял да тормошҡа аша. Әлеге ике роман - «Ғүмер бер генә» менән «Туҙҙырылған тамуҡ» төрөк теленә тәржемә ителеп донъя күрә. Уларҙы Гази университетының филология фәндәре докторы Нигяр Ҡалҡан тәржемә иткән.

... Иртәгә Динис Бүләковтың тыуған яғы - Мәләүез районының Смаҡ ауылында яҙыусының ҡәҙер һәм хәтер кисәһе уҙа. Әйткәндәй, ул Рәйлә апай һәм ҡыҙҙарының тырышлығы менән йыл да уҙғарыла. Әҙиптең вафатынан һуң уның исемен мәңгеләштереү буйынса бик күп эштәр башҡарылған. Смаҡ мәктәбенең ихатаһында яҙыусыға бюст ҡуйылған. Уның исемендәге премия булдырылған. Мәктәптең уҡыуҙа, сәнғәттә, спортта уңыштар яулаған укыусыларына бирелә. Нөгөш һыуһаҡлағысы буйлап әҙип исемендәге теплоход йөҙә, Өфөлә, Сибайҙа, Мәләүездә, ауылында Динис Бүләков исемендәге урамдар бар.

Һаулығы ныҡ ҡаҡшаһа ла, Рәйлә апай әҙиптең вафатынан һуң егермеләп китабын, иҫтәлектәр йыйынтығын сығарҙы. Хәҙер инде уның башлаған эшен ҡыҙҙары дауам итә. Бына иртәгә лә Смаҡ ауылына Башҡортостандың күренекле яҙыусылары, Төркиәнән ҡунаҡтар киләсәк һәм Динис Бүләковтың яҡты иҫтәлеген хәтергә аласаҡ. Бер әҙиптең әйткән һүҙе йөрәккә уйылып ҡалды. «Әллә күпме китаптарың булғансы, һине иҫкә алырлыҡ, йәшәтерлек балаларың булһын икән ул», - тигәнерәк фекере тап Бүләковтар ғаиләһенә ҡарата әйтелгән кеүек. Ә бит балаларының иғтибарынан, тырышлығынан ситтә ҡалып, күпме талантлы яҙыусыларыбыҙ хәтер упҡынында юғалып бара. Был йәһәттән Динис Бүләковтың ижады ла үлемһеҙ. Уның хаҡындағы хәтерҙе оноттормай йәшәткән балалары ла ғорурланырлыҡ. Әҙип үҙе арабыҙҙан китһә лә, хәтере, ижады йәшәй икән, тимәк, ул бәхетле яҙмышлы.

**Зөһрә Ҡотлогилдина**




Динис Бүләковтың юбилейына Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте ҙур бүләк әҙерләгән. Балалар өсөн сыҡҡан «Эҫе ҡар, йәки ҡыҙыма һөйләгән хикәйәләр», «Тыҡрыҡ башы — беҙҙең биләмә», «Упҡын ситендә бейеү», «Саған япраҡ яңырта» повестары тупланған йыйынтыҡ баҫып сығарған. Китапҡа «Дуҫым хаҡында һүҙ» тигән исем менән баш һүҙҙе Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев яҙған.

Иң үҙенсәлеклеһе шунда: уға иллюстрацияларҙы Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге республика һынлы сәнғәт интернат - гимназияһы һәм Мәләүез районы Яңауыл башланғыс мәктәбе уҡыусылары төшөргән. Был утыҙлап уҡыусы эштәре араһында Динис Бүләковтың туған тейешле нәҫелдәре һәм ейәнсәрҙәре Дина Изотова, Сәмирә Исхаҡова һәм Диана Значковаларҙың да һүрәттәре бар. «Зәңгәр офоҡтар» һеҙҙе хыял донъяһына саҡыра.

***“Әлфиәнең күҙ йәштәре” хикәйәһенә Искәндәр Әбдрәшитов төшөргән һүрәт.***



**Бикмухаметова, Ф. Как блеснувшая звезда [Текст] / Ф. Бикмухаметова // Путь Октября. – 1996. – 15 февраля. – С. 3.**

Своим величием, талантом, и вместе с тем простотой, человечностью привлекает к себе безвременно ушедший из жизни видный башкирский писатель-прозаик, председатель правления Союза писателей, член Союза писателей России, лауреат премий имени С. Юлаева и Г. Саляма Динис Мударисович Буляков.

Он родился весной, когда обновлялась природа и все кругом цвело, 18 мая 1944 года в деревне Арсланово Мелеузовского района в семье колхозника. Начальное образование получил в родной деревне, после чего продолжил учебу в Смаковской и окончил Воскресенскую среднюю школу Проработав в колхозе «Нугуш» механизатором, поступил в Белебеевский техникум на отделение механизации и электрификации сельского хозяйства, после окончания его оставили работать инженером в объединении «Сельхозтехника».

Вскоре Диниса приглашают в район корреспондентом редакции региональной газеты «Знамя Победы» в отдел сельского хозяйства, которая издавалась для тружеников Бижбулякского, Белебеевского и Ермекеевского районов. Отслужил в рядах Вооруженных Сил.

Любовь к литературе приводит его в Московский литературный институт имени М Горького. Из-за тяжелых семейных обстоятельств сельскому юноше приходится учиться заочно. Некоторое время он трудился в газете «Совет

Башкортостаны», был заведующим отделом журнала «Агидель». С 1977 года – главный редактор журнала «Пионер».

В 1986 году нашего земляка выдвигают председателем Государственного комитета по радиовещанию и членом правительства БАССР. Журналисты республики избирают его руководителем своего творческого союза. В этот период особенно ярко проявляется организаторский талант. Он становится активным общественным деятелем, известным писателем, прилагает много сил для расширения телерадиовещательной сети, развития журналистики, пропаганды литературы. Друг за другом выходят его книги для взрослых и детей.

В 1988 году на X съезде писателей республики Диниса Булякова избирают председателем правления Союза писателей БАССР, а на XI съезде в 1993 году он был переизбран на следующий срок.

Д. М. Буляков с детских лет любил мечтать, наблюдать, восхищаться красотой природы и сельским пейзажем, писал посвященные им стихи и рассказы. Первый его рассказ – «Хвастун Зариф» был опубликован в 1959 году на страницах газеты «Башкортостан пионеры». Первый сборник рассказов «Осколок солнца» увидел свет в 1971 году. Главный герои его произведений – наши современники, люди, сильные духом. Автор изображает внутренний мир, душевные переживания своих героев на фоне интересных дел, событий нашей повседневной жизни. Повести и рассказы, вошедшие в сборники «Белые дома моей деревни», «Акбузат вступает в бой», показывают, как обогащается внутренний мир молодого писателя.

В последние годы он занял достойное место среди видных романистов. В своих произведениях он описывал красоту родного края. Пример тому – изданный в 1988 году роман «Пришелец».

Одно из последних произведений писателя – роман «Жизнь дается однажды» – итог глубоких раздумий о судьбах людей, о важных проблемах сегодняшней жизни страны и мира в целом.

Свой юбилей Д. М. Буляков встретил завершением нового романа «Разоренный ад», который посвящается острейшим проблемам современности.

Он горел и жил ради своего народа и был бы желанным гостем и участником такого важного форума, как курултай. Динис Мударисович Буляков, неповторимая личность, ушел, но оставил нам всем частицу своей души – свои произведения.

**Ф. Бикмухаметова.**

**Имангулов, С. Стремление к высоте [Текст] / С. Имангулов // Путь Октября. – 1997. – 7 июня. – С. 2.**

Динис Буляков… Произносить это имя и перед глазами предстает образ солидного, настоящего мужчины, талантливого писателя. Я вспоминаю нашу первую встречу с ним в доме его матери Нагимы апай на берегу

Нугуша в д. Арсланово, работницы бухгалтерии, с его братом Талгатом и снохой Савией.

– Смутные шестидесятые. Они чем-то напоминали нынешнюю перестройку. То и дело создавались совнархозы, сельскохозяйственные промышленные обкомы.

Весной 1962 года эти опрометчивые реформы П. С. Хрущева коснулись районов – на юге республики были ликвидированы ряд районов и организовано Кумертауское производственное управление. Для нового объединения наладили выпуск газеты "Путь Октября" на русском и башкирском языках. К работе привлекли талантливых журналистов.

Вскоре при нашей редакции начал действовать литературный кружок. В его работе активно участвовали Зиннат Галимов, выпустивший несколько повестей, молодой писатель, шахтер Хуснулла Тулякаев, электрик, кураист и певец Гали Ильясов. Наладили тесный контакт с известными писателями Баязитом Бикбаем, Зайнаб Биишевой, побывал у нас Фарит Исянгулов, ознакомился с нашими творениями и высказал свои замечания.

Весной следующего года приехал в творческую командировку Гайнан Амири. Он заинтересовался нашим литературным кружком и выпустил подборку "Уголь и стихи" в газете "Кызыл тан", где вышли в свет рассказ З. Галимова, стихи Х. Тулякаева, Г. Ильясова и моя басня.

Но не суждено было нам обосноваться в городе угольщиков. Когда журчали весенние ручьи, машины автошколы перевезли редакцию в Мелеуз, и он стал столицей нового управления. А кружок жил и работал. Наши друзья по перу, проживающий в Кумертау Г. Амири навещали нас, регулярно выходили литературные странички. Пополнились наши ряды такими поэтами, как Фаргат Кутлучурин из Шарипово, Динис Буляков из Смаково, журналист Фатхи Комиссаров из Мелеуза, Узбек Сирбаев из Салавата, Винер Янбеков. Среди них особо выделялся Динис. Симпатичный, стройный, общительный парень своим характером и творчеством привлек внимание, его признали как своего, когда он уехал учиться в Белебеевский сельхозтехникум, переписывались.

Летом 1965 года, во время каникул Диниса, вдвоем поехали в Уфу и остановились у моего хорошего знакомого, поэта Нажиб агай Идельбая.

Солнечным утром мы посетили могилу народного поэта Р. Нигмати, поклонились памятнику Салавату Юлаеву. Здесь я сфотографировал на память моего молодого друга и Нажиб агая. Зашли в редакцию, где Диниса тепло приняли сотрудники "Башкортостан пионеры", ознакомились с его рассказами и обещали опубликовать. По традиции эту радость… обмыли с коллегами.

А на следующее утро мы тронулись обратно поездом Учалы-Кумертау. В вагоне Динис достал свои рукописи и начал читать рассказы для детей. Мы не думали ни о чем – ни об отдыхе, ни о сне и еде, я слушал с упоением. «Молодец! Хорошо написал, а как ты успеваешь учиться и творить?» – спросил я. Он, как обычно, с улыбкой ответил: «Жизнь - одна, стараюсь работать несколько смен в сутки и творить. И еще мечтаю поступить в литературный институт им. М. Горького в Москве. Если поступлю, придется трудиться в три смены, чтобы подняться ввысь».

И он поднялся, став известным писателем. Вот только жизнь оказалась короткой – нет с нами Диниса. Этой весной ему исполнилось бы пятьдесят три года.

**С. Имангулов, писатель.**



**На снимке: Д. Буляков с братом Талгатом и снохой Савией (1977 г.)**

**Озерова, Ф. Ему исполнилось бы 73 ... [Текст] / Ф.Озерова // Путь Октября. – 2017. – 23 мая. – С. 2.**



**В эти майские дни башкирскому писателю, общественному деятелю, нашему земляку Динису Мударисовичу Булякову исполнилось бы 73 года. В 1995-м он ушёл из жизни. С тех пор каждый год на малой Родине проходит вечер памяти. В день рождения Д. М. Булякова, 18 мая, в д. Смаково собрались односельчане, коллеги, родные, почитатели его творчества.**

В средней школе, которая носит его имя, прошла встреча учащихся с известными писателями, поэтами и журналистами - Сарвар Суриной, Фарзаной Губайдуллиной, Марьям Кусмаевой, Зухрой Кутлугильди- ной. Делились воспоминаниями об отце и дочери Диниса Булякова - Миляуша и Зухра. Участники встречи минутой молчания почтили память писателя и возложили цветы к его бюсту.

Далее мероприятие продолжилось в сельском Доме культуры. Перед собравшимися выступили глава администрации Араслановского СП А. Т. Шаяхметов, начальник архивного отдела И. Ю. Файзуллина, директор КДЦ Б. Б. Биков, гости. По традиции в этот день лучшим учащимся средней школы д.Смаково были вручены премии им. Д.Булякова.

Вечер сопровождался яркими выступлениями участников художественной самодеятельности.

**На снимке:** почтить память Д.М. Булякова приехали родные, друзья, коллеги по перу.

**Фаина Озерова**

**Байгильдина, Р. Чтобы понять поэта, нужно побывать на его Родине [Текст] / Р. Байгильдина**
**//Путь Октября. – 2018. – 22 мая. – С. 5.**

**Я хочу рассказать о музее писателя Диниса Булякова, лауреата премии им. Галима Саляма, Государственной премии им. С. Юлаева, заслуженного работника культуры РБ.**

Д. М. Буляков родился 18 мая 1944 года в д. Арасланово. Мать воспитывала сына одна, несмотря на это, сумела дать ему хорошее образование в тяжёлые послевоенные годы.

Динис Буляков окончил литературный институт им. М. Горького в Москве. В годы учёбы работал в редакции республиканской газеты «Советская Башкирия» - «Совет Башкортостана», позже - в журнале , а с 1977 по 1986 год был главным редактором журнала «Пионер» (с 1991 г. - «Аманат»).

В 1986 году писатель был назначен председателем Государственного комитета по телевидению и радиовещанию, в 1988-м избрался председателем Союза писателей Башкортостана и до конца своей жизни возглавлял его.

Нашего героя всегда поддерживала семья - супруга Райля Булякова, дочери Ляйсян, Зухра и Миляуша.

Д. М. Буляков - автор романов «Пришелец», «Взорванный рай», «Жизнь даётся однажды», за который в 1993 году он был удостоен Государственной премии им. С. Юлаева.

Произведения писателя о любви к близким и родному краю, о добре и справедливости очень понятны читателям и поучительны. И сам он был человеком светлым и порядочным. В марте 1995 года в возрасте 50 лет, в самом рассвете сил и жизненных планов, ушёл из жизни.

Вся выше сказанная информация с добротой и гордостью передаётся посетителям литературного музея Диниса Булякова, расположенного в д. Смаково, где хранится дух писателя, в скромном уголке, рассказывающем о великодушном нашем земляке. Каждый экспонат связан с моментами его жизни и творчества. Здесь мы видим произведения, рабочий стол, на котором создавались многие его шедевры. На стендах висят фотографии, юбилейные грамоты, благодарности, поздравления и письма прощания. Фонд литературного музея составляет более 300 единиц экспонатов. А также тут имеется этнографический уголок. Нашли себе место старинные предметы домашнего обихода, посуда, утварь башкирского народа. Можно увидеть уникальную глиняную и берестяную посуду, национальную одежду и

украшения, а также орудия труда. У каждого экспоната своя история. С заботой хранится и его колыбель. По рассказам односельчан она имела особую силу: у жительницы д. Арасланово умирали все дети сразу после рождения, и тогда мать Д. Булякова отдала колыбель, в которой она вырастила своих детей и внуков.

Музей распахнул двери в 1996 году, через год после смерти Д. Булякова. Большую работу провели по его открытию земляки писателя: глава администрации местного сельсовета Х. М. Бураканов, ветеран труда и местный краевед А. Т. Хисаметдинов, журналисты района Сулпан Имангулов и Зайни Рафиков, председатель АО «Нугуш» М. Г. Таштимеров, администрация школы д. Смаково, учителя Л. С. Шаяхметова, Г. С. Таштимерова и Г. И. Хисамутдинова. Огромный вклад в сборе материалов для музея внесла вдова писателя Райля Булякова и бывшая заведующая литературным музеем республики им. М. Гафури Альмира Шарипова, которые передали в дар личные вещи писателя. Музей прекрасно оформлен художниками национального музея республики. Заведующей была назначена Д. Г. Шарипова.

Здесь много своих посетителей. С первых дней учёбы сюда приходят ученики школы им. Д. Булякова д. Смаково, чтобы поделиться впечатлениями от прочитанных произведений и поближе познакомиться с тем, кто каждое утро пристальным взглядом встречает их в родной школе. А в день рождения и в день смерти великого писателя тут ежегодно встречаются его читатели, коллеги, друзья и родственники.

Динис Буляков всегда гордился своим происхождением и прославлял в произведениях историю села и земляков. Он был живительным родником для всех, кто его знал и любил.

Музей всегда рад гостям и ждёт новых посетителей.

**Рамиля Байгильдина,**
**учащаяся 7 класса школы им. Д. Булякова д. Смаково**

**Сакаева, Г. Наследие Диниса Булякова [Текст] / Г. Сакаева // Пульс – М. – 2019. – 18 апр. – С. 10.**

***«Кызым, добро победит зло! Нужно просто делать больше хороших дел», - всегда учил Зухру Буля кову её отец, Динис Буляков. Дочь писателя поделилась воспоминаниями об отце в Смаковском доме***

***культуры, где прошли муниципальные этапы республиканского конкурса чтецов и инсценировок среди сельских школ.***

Динис Мударисович Буляков - прозаик, талантливый романист, автор многочисленных повестей, родился в деревне Арасланово Мелеузовского района. 18 мая ему исполнилось бы 75 лет. Собственно, ряд мероприятий, который проходит на территории нашего района, посвящен именно этому событию. В конце марта городской этап прошел на базе гимназии №9 им. Кинзи Арсланова. Девять творческих групп - сельские школы нашего района собрались на муниципальном этапе на базе Смаковского СДК апрельским днем.



***Учащиеся СОШ д. Восточный – обладатели Гран – при конкурса инсценировок.***

***- Мой отец сегодня здесь, я знаю. Я знаю, что его душа радуется. Спасибо вам, ребята, за искренность, за неподдельные эмоции. Вам удалось передать характеры героев произведений, - обратилась к ученикам Зухра Динисовна.***

Герои Диниса Булякова – бескомпромиссные, сильные, стремящиеся к искренности и чистоте человеческих чувств. Такие как Хамит из повести “Танец над пропастью”. Отрывок из произведения показали ребята из СОШ д.Восточный. Хотя назвать отрывком эту инсценировку назвать сложно – ребята развернули целый спетакль! Убедительная игра актеров, акапельное исполнение песни, живая игра на курае, продуманные декорации – выступление мы посмотрели с большим удовольствием. К слову, востоковцы стали обладателями Гран – при конкурса инсценировок. «Почему вы выбрали это произведение и как долго готовились?» - спросила я у учителя башкирского языка Гульнары Ануровны Каримовой. ***«Ребята с удовольствием прочитали повесть, поэтому остановились именно на ней. А готовились мы очень долго …»*** - поделилась она.

История сожаления и раскаяния маленькой Альфии из произведения **«Слезы Альфии»** инсценировали по несколько творческих групп. Самые младшие из них - ребята из начальной школы д. Янги-Аул. Ученики 2-3 классов, несмотря на юный возраст, выступили уверенно. Смаковцы подготовили несколько инсценировок. На сцене были показаны отрывки из произведений «Ценный подарок», «Через года», «Подруги» и др. Не менее оживленно прошел конкурс чтецов, в котором приняли участие более 25 ребят. Учащиеся обратились к творчеству Ирика Киньябулатова, Равиля Бикбая, Валентина Сорокина, Фаузии Юмагуловой, Марьям Кусмаевой и многих других поэтов башкирской литературы. Отрывки из романов Диниса Булякова «Жизнь одна», «Танец над пропастью» прочитали учащиеся средних школ деревни Восточный и села Нугуш. Победителями стали ребята из д. Восточный и Смаково.

Современники о Динисе Булякове говорят: ***«Такая короткая, но так много вместившая в себя долгая жизнь».***



***Дочь писателя Зухра Булякова с учащимся школы***
***д. Верхнеюлдашево***

Действительно, он прожил короткую, но очень плодотворную и насыщенную жизнь. Видному общественному деятелю, автору трех романов, многочисленных повестей и рассказов было всего 50 лет. Провожая писателя в последний путь, Мустай Карим сказал о нем: «Он унес с собой много ненаписанных книг. А написанные будут жить, служить народу, давая ему тепло и свет». Да, его книги - замечательное наследие для нас, сегодняшнего поколения.

**Гульгина Сакаева.**